ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

17-23 июнь (һөтәй) 2017

№24 (754)

15 йыл

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Беҙҙә ҡунаҡта - ҡырғыҙҙар



4

Был һындар ни һөйләй?



7

Замандан алда атлау...



Үҙ дәүерендә хәҡиҡәтте яҡлау ул

8

Дуҫлыҡ байрамы



11

ТВ-программа 14

***Буласаҡ кейәү тураһында ошо ете нәмәне бел: белеме ниндәй, ата-әсәһе, дуҫтары кемдәр, холҡо нисек, баймы, матурмы һәм нисә йәштә - ошо һорауҙарыңа ҡәнәғәтләнерлек яуап алһаң, ҡыҙыңды ике лә уйламай, уға кейәүгә бир.***

**(Боронғо һинд аҡылы).**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Иртәгә илдә атай көнө билдәләнә, ошо айҡанлы атайҙарыбыҙ тәрбиәһе тураһында һөйләшеп алайыҡ әле...

***Нурмөхәмәт хәҙрәт НИҒМӘТУЛЛИН, Башҡортостан мосолмандарының диниә назараты рәйесе, мөфтөй:*** Бисмиллаһир-рахмәнир-рахим! Яҡшы атай менән әсәйҙең бала хаҡындағы хәстәрлеге һәм тәрбиәһе сабый тыуғанға тиклем үк башлана һәм ғүмер буйы дауам итә. Балаға яҡшы тәрбиә бирә белмәгән атай-әсәй ҡиәмәт көнөндә Раббыһы алдында яуап тотасаҡ, тиелә хәҙистә. Шуның өсөн дә һәр бер атай-әсәй үҙенең балаһына күркәм тәрбиә бирергә, үҙҙәре лә тәрбиәһеҙлектән алыҫ йөрөргә тейеш, тип өйрәтә динебеҙ. Ғаиләлә генә түгел, ғөмүмән, йәшәйешебеҙҙә әсәйҙәрҙең дәрәжәһе шул тиклем оло, уларҙы изгеләкләүҙәр шул ҡәҙәре юғары. Юҡҡа ғынамы ни, "Ожмах - әсәйҙәрҙең аяҡ аҫтында" тип тә әйтә хәҙис. Шул уҡ ваҡытта быны һис кенә лә атайҙың ролен баһалап еткермәү тип аңларға ярамай. Бала - әсәйгә лә, атайға ла Аллаһ тарафынан бүләк, аманат итеп бирелә, шуға ла сабый ғүмере һәм уның киләсәкке яҙмышы өсөн атай-әсәйҙең яуаплылыҡ дәрәжәһе лә берҙәй уртаҡ. Атай - ғаиләлә төп терәк, таяныс, уға бик ҙур бурыстар йөкмәтелә. Уның иңенә ғаиләһен ашатып-эсереү, кейендереү генә түгел, балаларына лайыҡлы тәрбиә биреү ҙә йөкмәтелгән."Бер ата ла үҙ балаһына күркәм холоҡтан да яҡшыраҡ нәмә бирә алмаҫ",- тиелә хәҙистәрҙең береһендә. Күңелемдә иман нуры уятып, яҙмышымды дини мөхиткә бағышлауым менән мин дә атайыма - Мәғәфүр Әбделғәни улына бурыслымын. Ул бик иманлы, дини кеше ине. Уның биргән иман һабаҡтары, Бәйғәмбәребеҙ ғәләйһис сәләмдең ғүмер өлгөһө, мосолман мөхите һәм, ғөмүмән, дөйөм кешелек донъяһы ҡиммәттәре хаҡындағы әңгәмәләре ағайым менән икебеҙҙең дә бәләкәйҙән үк күңелебеҙҙе яуланы һәм тормош рәүешебеҙгә әүерелде. Ә атайыбыҙ үҙе тәүге һабаҡтарҙы заманында Троицкиҙағы "Рәсүлиә" мәҙрәсәһендә уҡып ҡайтҡан данлыҡлы имам Мөжәүир хәҙрәт Сиражетдиновтан ала. Атайым Темәстә педучилище, Ырымбурҙа педтехникум тамамлап, балалар уҡыта. Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, үҙе теләп, яуға китә. Башҡорт кавалерия дивизияһы сафтарында дошманға ҡаршы үлемесле яуҙарҙың береһендә ҡаты яраланып, госпиталгә эләгә. Снаряд ярсыҡтарын ғүмер буйы тәнендә йөрөтөргә тура килһә лә, беҙҙе уҡытып, аяҡҡа баҫтырыу, әҙәм итеүгә бөтөн көсөн һалды. Хеҙмәткә өйрәтеүсе лә ул булды. Заманында атайым менән бергәләп, сыбыртҡы һөйрәп, көтөү көтөргә лә тура килде минә. Әйтеүемсә, атайым беҙҙең рухи донъябыҙ бөтөнлөгөн дә ҡайғыртты. Әлегеләй хәтеремдә, беҙҙе ул ғәйет көндәрендә Сибайҙан үҙенең һәм бөйөк Мөжәүир хәҙрәтебеҙҙең тыуған ауылы Манһырға алып йөрөй торғайны. Мөжәүир хәҙрәт ҡатнашлығындағы сараларҙа йөрөп, беҙ ошо дини мөхиттән сикһеҙ тәьҫораттар менән ҡайта инек. Совет армияһы сафына хеҙмәткә китер алдынан да атайым мине Манһырға Мөжәүир олатайға алып барҙы. Шулай итеп, уның фатихаһын алып сыҡтым сәфәргә. Ғөмүмән, сабый саҡтан да, егет ҡорона инеп, армияла йөрөгәндә лә, унан аҙаҡ Бохарала, Ташкентта, Сүриәлә Ислам дине буйынса уҡыу йорттарында һабаҡтар алғанда ла һәм бөтә ғүмерем буйы атайым тәрбиәһен, Мөжәүир хәҙрәттең рухи мөхитен һәм тәьҫирен тойоп, улар фатихаһы менән йәшәйем һәм эшләйем, әлхәмдулиллаһ!

**(Дауамы 2-се биттә).**

"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 15 ЙЫЛ

# ЗӘҺӘР ШӘП!

**"Киске Өфө" гәзите ҡулыма осраҡлы рәүештә килеп эләкте. Бер әхирәтемә барғайным, өҫтәлдәрендә "Киске Өфө" тигән гәзит ята, атаһы алдыра икән. Ҡыҙыҡһынып, нимә тураһында яҙалар икән, тип, асып уҡыным. Шунан "Бәй, был бит минең гәзит!" тип, ҡайҙа, нисек яҙылырға икәнен һорашып, тиҙ генә почтаға йүгерҙем.**

Шулай итеп, 2010 йылдан алып бер ҙә ҡалдырмай яҙылам, һәр һанын йыйып, төпләмә эшләп барам. Былтыр өс йылдың төпләмәләрен Бүздәк районында йәшәгән ҡыҙыма биреп ебәргәйнем, ауыл буйлап йөрөтөп уҡыйҙар, ти. Быйыл ҡыҙым балалар менән дәрес әҙерләгәндә файҙалы китаптар һорағайны, китап урынына йәнә үҙем яратып, һәр битен ентекләп уҡыған "Киске Өфө" гәзитен биреп ҡайтарҙым. Ейәндәргә дәрес әҙерләгәндә лә кәрәге тейер, ҡыҙыма ла фәһемле мәҡәләләре табылыр, тим. "Киске Өфө" гәзитендә бөтәһе лә ҡыҙыҡ һәм фәһемле минең өсөн. Айырыуса "Заман башҡорто" рубрикаһын яратам, шундай алдынғы ҡарашлы, уңышлы йәштәр тураһында белеп ҡалам. Унан инде, "Аҡыл - ҡаҙна" рубрикаһында баҫылған йор һүҙҙәр, халыҡ мәҡәлдәре һәм ҡыҫҡаса кинәйәле һәм ғибрәтле хикәйәләрҙе яратып уҡыйым. "Ҡомар" рубрикаһында баҫылған повесть-хикәйәләрҙе һандан-һанға көтөп алам. Үҙем халыҡ дауаһы менән ҡыҙыҡһынғас, "Шифа" тигән махсус бит сығарыла башлауын ҡыуанып ҡаршы алдым. Башҡорт халҡының милли кейемдәре, йолалары тураһында баҫылған мәҡәләләр ҙә бик урынлы һәм кәрәкле. Бына шулай, "Киске Өфө" гәзите менән бик күп йылдар дуҫмын, милли рух тәрбиәләгән баҫмаларҙың береһе ул. Зәһәр шәп гәзит, тип әйтер инем.

**Илдуса ЛОТФРАХМАНОВА.**
**Дәүләкән районы Сапай ауылы.**



12+

✓ *Атаһынан күргән - уҡ юнған, тигәндәй, мин бәләкәй генә саҡтан уҡ атайым - Салауат Хәкимйән улының уҡ юнғанын, төрлө араларға тоҫҡап атып, күнекмәләр үткәргәнен күреп-күҙәтеп үҫтем. Аҙаҡ үҙем дә ылығып киттем.*



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# СӘНҒӘТ АША...
## үҙенсәлектәребеҙҙе һаҡлайыҡ!

***Риф ҒӘБИТОВ, Ф. Ғәскәров исемендәге Дәүләт халыҡ бейеүҙәре ансамбленең художество етәксеһе, Башҡортостандың халыҡ артисы, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты:*** Һәр халыҡтың йөҙөн бейеүе, йыр-моңо, музыка уйын ҡоралдары, кейеме, ауыҙ-тел ижады билдәләй. Башҡорт халҡын башҡа милләттәрҙән айырып торған үҙенсәлектәр бихисап һәм улар быуаттар төпкөлөнән, быуындар аша күсә килеп, ошо көндәргәсә һаҡланып ҡалған. Әлбиттә, һәр замандың үҙ заңы, шуға ла кешенең зауығы ла гел бер төрлө генә булып, үҙгәрешһеҙ ҡалмай. Бөтә нәмәгә мода үҙгәреп тора, кейемдәргә генә түгел, йыр-бейеүҙең дә яңыһы килеп сығып тора. Сөнки сәнғәт - ул музей экспонаты түгел, ул заманға ярашлы ла тыуҙырыла. Әммә шул уҡ ваҡытта, иҫкелек ҡалдығы, тип, халыҡтың асылын, тарихын, тамырҙарын сағылдырған боронғо мираҫты онотоРға ярамай.

Әле бына беҙ йәштәрҙең милли кейемдәр, сәнғәт, әҙәби мираҫ менән ҡыҙыҡһыныуын, төрлө тарихи осорҙа йәшәгән башҡорт шәхестәренең яҙмышы, көнкүреше менән танышыуын күрәбеҙ. Йәйләп ҡына ошо тенденция көс ала бара, ауылдарҙа ғына түгел, ҡалала йәшәгән милләттәштәрҙең дә башҡорт халҡының милли кейеменә иғтибары арта төшә. Йәштәр боронғо кейемдәрҙең ҡайһы бер биҙәктәрен алып, заманса кейем текһә, ололар хәс элеккесә матур итеп үҙенә милли костюмдар тектереп кейә башланы. Донъя ағышында юғалып ҡалмаҫ, тамырыңды һәм тарихыңды онотмаҫ өсөн бына шулай эшләү бик яҡшы күренеш.

Бөгөн ҡурайҙа уйнаған йәштәребеҙ күп, донъя кимәлендә лә билдәлелек яулаған егеттәр бар. Ә бит ҡасандыр Лениндың 100 йыллығын үткәреү өсөн бөтә республиканан йөҙ ҡурайсыны берәмләп тигәндәй йыйып алып, артабан ошо ҡурайсылар мәктәбен булдырыу йүнәлешендә эшләгән шәхестәрҙең фиҙаҡәр эш һөҙөмтәһе булмаһа, оҫта ҡурайсылар шулай уҡ һирәк булыр ине. Бына шуға, замандан артта ҡалмайым, тип, башҡаларҙан беҙҙе айырып, әммә шул уҡ ваҡытта башҡалар менән тиң итеп йәшәткән боронғо рухиәтебеҙҙе онотмаһаҡ ине. Һәр баланың күңеленә бәләкәйҙән үк үҙебеҙҙең йыр-моңға, бейеүҙәргә, ауыҙ-тел ижадына ҡарата ихтирам тәрбиәләп, быларҙың мөһимлеген аңлатып үҫтерергә кәрәк. Милләтте һаҡлау сере - нәк һәр беребеҙҙең тамырын, рухиәтен, асылын иҫендә тотоуҙа һәм киләсәк быуындарға ошоно аңлатып үҫтереүҙә.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Иртәгә илдә атай көнө билдәләнә, ошо айҡанлы атайҙарыбыҙ тәрбиәһе тураһында һөйләшеп алайыҡ әле...



**(Башы 1-се биттә).**

***Динис ЮЛБИРҘИН, Бөрйән районы Яңы Мөсәт ауылы:*** Ауылыбыҙҙа урта мәктәп бөтөрөлөп, туғыҙ класс ҡына ҡалдырылыу сәбәпле, мин Иҫке Собханғолда уҡып йөрөйөм, быйыл унынсыны тамамланым. Спорт менән шөғөлләнәм: бик йыш волейбол, теннис уйнайбыҙ. Айырыуса уҡ атыу оҡшай миңә. Был төр спорт менән ҡыҙыҡһыныуымда туранан-тура атайымдың йоғонтоһо ҙур. Атаһынан күргән - уҡ юнған, тигәндәй, мин бәләкәй генә саҡтан уҡ атайым - Салауат Хәкимйән улының уҡ юнғанын, төрлө араларға тоҫҡап атып, күнекмәләр үткәргәнен күреп-күҙәтеп үҫтем. Аҙаҡ үҙем дә ылығып киттем был спорт төрөнә. Атайым төп эшенән буш ваҡыттарында (ул район электр бәйләнеше узелында - водитель) үҙе традицион уҡ атыу буйынса бик күптән шөғөлләнә. Ауыл, район һабантуйҙарында даими ҡатнашып, бер туған ағаһы Сынбулат олатай менән гел призлы урындарҙы икәү-ара бүлешәләр. Уҡсыларҙың республика ярыштарында ла беҙ бергәләп ҡатнашабыҙ һәм һынатмаҫҡа тырышабыҙ. Әйтеүемсә, ян һәм уҡтарҙы үҙебеҙ эшләп алабыҙ, был йәһәттән дә мин атайымдан оҫталыҡ серҙәренә өйрәнәм. Уҡһаҙаҡ, ат кеүек үк, башҡорт ир-егетенең айырылмаҫ юлдашы, яуҙашы булған. Был яу ҡоралы ғына ла түгел, уның менән башҡорт һунар иткән, ғаиләһен аҫыраған. Уҡ-һаҙаҡ миндә башҡорт халҡының боронғо тарихы менән тәрәнерәк ҡыҙыҡһыныу теләге уятты. Өсөнсөнән, уҡ атыу, әйтеүемсә, спорт төрө лә. Ул кешелә мәргәнлек, таҫыллыҡ кеүек сифаттар тәрбиәләй, иғтибарҙы тупларға ярҙам итә. Былар уҡ атып ҡына тик йөрөй икән, тип уйламағыҙ, атайым ялҡауҙарҙы бер ҙә ратмай, шуға ла ул беҙҙең - балаларының (ғаиләбеҙҙә минән башҡа ағайым менән апайым һәм ике ҡустым бар) йорт-хужалыҡ эштәрендә әсәйем менән икеһенә ярҙамлашып йүгереп йөрөүебеҙҙе талап итә. Һуҙылыбыраҡ, иренеп кенә тотонһаң, атайҙан әләгеүе лә бар, шуға күрә, мин әйткәнде лә көтөп тормайым, үҙем белеп эшләйем. Ҡурҡҡандан да түгел, ә атай менән әсәйҙең күңелдәрен рәнйетмәҫ өсөн. Бына тиҙҙән бесән мәле етә. Элек ҡул көсө менән эшләп ала инек, хәҙер уны күбеһенсә техника башҡара. Атай менән бесәндә косилка машинаһы ярҙамында сабабыҙ ҙа, йыябыҙ ҙа. Уҡыуҙы ла тырыштырырға тура килә, юғиһә, атай был яҡтан да һөйрәлгәнде ене һөймәй, тикшереп кенә тора. Тырышып уҡыуҙың улар өсөн генә түгел, иң тәүҙә үҙем өсөн кәрәклеген бик яҡшы аңлайым һәм шуға ла атайым менән әсәйемде борсолдорғом килмәй.

***Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА, яҙыусы, Ш. Бабич исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәре:*** Әсәй йөрәге менән ярата, атай аҡылы менән ярата, тигән әйтемгә тартым фекерҙе ишеткәнем бар һәм был бик тапҡыр, дөрөҫ әйтелгән, тип уйлайым. Психологтар шундай ҡыҙыҡлы күҙәтеүҙәр ҙә килтерә: әсә кеше, мәҫәлән, сабыйын ҡулына алғанда, ун тапҡырҙың туғыҙында уны ҡулдарында гел бер төрлө генә хәлдә генә тотоп ғәҙәтләнһә, атай кеше, киреһенсә, ун осраҡтың туғыҙында баланы төрлөсә хәлдә, ҡайһы саҡ хатта баштүбән килеш тоторға ла, һикертергә, һауаға сөйөргә лә ҡурҡмаясаҡ. Ябай ғына күренеш тойолһа ла, атайҙың ошо ғәҙәте баланы бәләкәйҙән тормоштоң үҙгәреп тороусан шарттарына әҙерлеклеген, төрлө хәлдәргә яраҡлаша алыу һәләттәрен үҫтерә икән. Бынан сығып, шуны әйтергә була: атайҙар бала шәхесен үҫтереүгә күберәк һәм киңерәк иркенлек, үҙаллылыҡ бирә һәм бының менән унда ҡыйыулыҡ сифаттары тәрбиәләй. Атай йоғонтоһо баланың үҙ-үҙенә ышаныс тойғоһон нығытырға ярҙам итә, ти психологтар. Ә бит тормошта был, ысынлап та, тап шулай. Ҡартатайым репрессияға эләккәс, ғаилә өсөн яуаплылыҡ атайым Фәтих Далха улы иңенә бик иртә ята. Шул арҡала унда бәләкәйҙән үҙаллылыҡ, яуаплылыҡ тойғоһо көслө үҫешә. Атайым мәктәптә химиянан уҡытһа ла бар булмышы менән тарихсы ине. Әҙәбиәтте ратты. Өйгә ҡосаҡ-ҡосаҡ гәзит-журнал яҙҙырып алып уҡый ине. Беҙ ҙә шуға бәләкәйҙән баҫма һүҙгә, белемгә, китап һәм матбуғат баҫмаларына айырым бер ҡыҙыҡһыныу, ихтирам тойғоһо менән үҫтек. Минең тәүге әҙәби әҫәрҙәремде уҡып, фатихаһын биреүсе тап атайым булды. Улай ғына ла түгел, һәр ваҡыт кәңәштәрен биреп, яңынан-яңы темалар ҙа тәҡдим итә торғайны атайым. Аң-белем даирәһе бик киң ине уның, ауыл мөхитендә уның менән тиң кимәлдә әңгәмә алып бара алыусы ла булмағандыр, моғайын, тимен хәҙер. Сөнки ауылға берәй уҡымышлы кеше: тарихсымы, яҙыусымы килеп төшһә, һөйләшеп, фекерләшеп туя алмайҙар ине. Бик күп тарихи мәғлүмәттәр менән хәбәрҙар булды, эҙләнде, уҡыны ғүмер буйы. Заманында 1921 йылда "Вокруг света" журналында баҫылып сыҡҡан "Комбриг Мортазин" тигән мәҡәләне (авторы генерал Лизюков) табып алыусы ла ул булды бит. Артабан уҡыһа, ғилми дәрәжәләргә эйә профессиональ тарихсы булыр ине мотлаҡ, тик атабабалары ерен ташлап киткеһе килмәне, туғандарымды ла ситкә ебәрмәне. Районда ҙур абруй менән файҙаланды атайым, кеселекле, сабыр, ғәҙел булды. Икенсенән, ана шул энциклопедик белемгә эйә булыуы, тәрән фекерләү ҡеүәһе менән дә уҡыусылары, райондаш һәм ауылдаштары ихтирамын ҡаҙанды. Әле булһа яҡташтарымдың, хатта рус милләтле ерҙәштәрҙең дә атайымды юҡһынып һағышланыуҙарын йыш ишетергә тура килә. Шуныһы ғына бер аҙ йыуаныс бирә күңелгә: әсәйем менән атайым үҙҙәренең гүзәл сифаттары йоғонтоһонда матур тәрбиә биреп, бөтәбеҙгә лә был тормошта үҙ урыныбыҙҙы табырға һәм тәғәйенләнешебеҙҙе аңлап йәшәргә ярҙам итте.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - Хөкүмәт Аппараты етәксеһе Илшат Тажетдинов етәкселегендәге республика делегацияһы IV "ЭКСПО-2017" Рәсәй-Ҡытай форумында ҡатнаша. Форум төньяҡ-көнсығыш Ҡытайҙағы Хэйлунцзян провинцияһының административ үҙәге Харбинда 28-се Харбин халыҡ-ара сауҙа-иҡтисади йәрминкәһе менән бер ваҡытта бара. Республикабыҙ вәкилдәре Сычуань провинцияһының вице-губернаторы Жчу Хэсинь етәкселегендәге рәсми делегация менән осрашты.

✓Башҡортостанда сәсеү кампанияһына йомғаҡ яһалды. Республиканың Ауыл хужалығы министрлығында хәбәр итеүҙәренсә, яҙғы сәсеү һауа шарттары арҡаһында ғәҙәттәгенән ике аҙнаға һуңыраҡ башланһа ла, оптималь агротехник срокта үткәрелде. Быйыл яҙғы сәсеү эштәре 2,2 миллион гектарҙа башҡарылды. Әле Стәрлетамаҡ һәм Мәләүез райондары мал аҙығы әҙерләүгә төшкән.

✓Тәүге имтихандарҙың йомғаҡтары буйынса Башҡортостанда 15 уҡыусы Берҙәм дәүләт имтиханын 100 балға яҙған. Информатиканан - 13, профилле математика һәм географиянан берәр кеше иң юғары балл йыйған. Уҡыусыларҙың күпселеге үрҙә әйтеп үтелгән имтихандарҙы тапшырып, минималь сикте үтте. Ләкин һынауҙы бирә алмағандар ҙа булды.

✓Өфөлә Салауат Юлаев проспектында баш ҡаланың Октябрь районында иҫтәлекле урынға әйләнгән арт-объекттар ҡайтты. Һыуһар һыны һәм декоратив арба-сәскәлек яңыртылды, һауа шарттарына бирешмәҫлек итеп эшләнде. Арба элекке заманға ҡайтарып буятылған, ә һыуһар махсус тышҡы быяу менән ҡапланған. Яңыртыу эшен рәссам Артур Мөхәмәтов башҡарҙы, тип хәбәр иттеләр баш ҡала хакимиәтендә.

✓Өфөлә "МЕГА" сауҙа комплексы биләмәһендә йәй буйына фермер йәрминкәһе эшләйәсәк, тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығында. Сауҙа комплексының үҙәк майҙанындағы стилләштерелгән кибет-йорттарҙа республиканың төрлө төбәктәренән шәхси фермер хужалыҡтарында етештерелгән аҙыҡ-түлек ҡуйылған. Улар - ҡымыҙ, бал, ҡайнатмалар, урындағы сыр эшләүселәрҙең сыры, башҡа аҙыҡ-түлек. Ризыҡтарҙы һатып алыр алдынан тәмләп ҡарарға ла мөмкин.

✓ *Унда беҙҙең өсөн донъя малынан бер нәмә лә кәрәкмәйәсәк, беҙ тик үҙебеҙҙең тереклектә ҡылған һәм ҡылмаған, изге һәм гонаһлы ғәмәлдәребеҙ менән генә тороп ҡалабыҙ. Ахирәттә фәҡәт ана шулар өсөн генә яуап бирәсәкбеҙ.*



*АҢЛАҒАНҒА - ИШАРА*

# ДҮРТЕНСЕ ҠИММӘТ НӘМӘ - ШӨКӨР, ТИГӘН...

**"Туйғансы икмәк ашар көндәр тыуырмы бер ҡасан...", йәиһә, "Илдәр байығас, тик икмәк бешереп кенә күрше-күләнде ҡунаҡҡа саҡырып һыйлар инем..." тип ҡасандыр хыял иткән атай-әсәйҙәребеҙҙең хәтирәләрен тыңлап үҫкәндәр вәкиленән булараҡ, бына ошо хаҡта бер аҙ фекер итеп алырға булдым.**

Аталары утыҙынсы йылдарҙа золом ҡорбаны булған, етемлектә үҫкән ҡайным мәрхүмдең һәр саҡ: "Икмәк етерлек булғас, башҡа нимә кәрәк инде беҙгә. Бына шуныһы өсөн Аллаһы Тәғәләгә һәр саҡ шөкөр итеп йәшәргә кәрәк", - тигән һүҙҙәре һаман хәтеремдә. Ысынлап та, хәҙерге көндә беҙ барына риза булып йәшәйбеҙме һуң? Тирә-яғыбыҙға күҙ һалайыҡ. Кемде бөгөнгө көндә икмәк мәсьәләһе борсой? Ундай кешене илебеҙҙә көн-төн эҙләһәк тә таба алмаясаҡбыҙ! Ул ғына ла түгел, урам буйында йыш ҡына кемдер ашап бөтмәй ташлаған икмәк һыныҡтарына юлығабыҙ. Бөгөнгө көндә икмәк тураһында һүҙ йөрөтөү хатта уңайһыҙ ҙа һымаҡ. Ә шулай ҙа был хаҡта ғүмеребеҙ буйы иҫләргә кәрәктер ул, ә?..

Телевизорҙа күрһәтелгән сит ил хәл-ваҡиғаларын ҡарап ултыра торғас: "Аллаға шөкөр, беҙҙең Башҡортостаныбыҙҙа һуғыштар, ер тетрәүҙәр, цунами кеүек нәмәләр, ҡоротҡос елле осһоҙ-ҡырыйһыҙ сүллектәр юҡ. Африка илдәрендәге крокодилдар, дүртәр метрлыҡ варандар, үлемесле кобралар, кеше балаһын йоторҙай анакондалар ҙа юҡ", - тигәйне бер заман хәләл ефетем. Төптәнерәк уйлап ҡараһаң, ысынлап та, беҙ Ер шарының иң-иң яҡшы урынында йәшәйбеҙ бит, йәмәғәт! Африка, Ғәрәбстан илдәрендә халыҡ ҡоролоҡтан, аслыҡтан интеккән мәлдә, һәр төрлө һуғыштарҙан, йоғошло сирҙәрҙән меңәрләп ҡырылған осорҙа, беҙҙең илебеҙҙә - хөрриәт! Тик йыш ҡына кешеләрҙең теге йәки был нәмә менән риза булмай "бурылдағанын" ишетергә тура килә. Кемгәлер һалҡын оҡшамай, кемдер, киреһенсә, көндөң эҫе булыуы менән ҡәнәғәт түгел, кемдәрҙер ямғырҙың артыҡ күп, йәиһә аҙ яуыуы менән килешеп етмәй. Көнкүреш мәсьәләһенә килгәндә лә бәғзеләрҙе хәҙер үҙебеҙҙә сыҡҡан "Жигули"ҙар мөрхәтһендермәй, "Москвич" йәиһә "шестерка" хаҡында әйтеп тораһы ла юҡ, ҡайһылар хатта "корейский" менән дә хушһынмай. Ауыл урамы буйлап китеп барһаң, бик һирәк (ул да булһа, яңғыҙ әбейҙәр йәшәгән) өйҙәрҙең генә гаражһыҙ булыуын күрәһең. Фатирыбыҙ ике бүлмәле икән, беҙ өстө теләйбеҙ, ә өслө икән - ике ҡатлы коттедж хаҡында уйлана башлайбыҙ. Берниcә йыл ҡулланған өй йыһаздарыбыҙ, телевизор, һыуытҡыстарыбыҙ ҙа иртә "иҫкерә". Кешеләрҙән ҡалышҡыбыҙ килмәй, "кредит" тип аталған ифрат та гонаһлы бурыстар ҡармағына (процентҡа биреү генә түгел, ә алыу ҙа күҙ уңында тотолған, оло гонаһҡа сәбәп булырҙай бындай нәмә диндә "риба" тип атала) үҙ иркебеҙ менән барып инәбеҙ. Кейемдәребеҙ ҙә туҙмай, ә тик "моданан сыға"... Һәр кемебеҙҙең тиерлек өҫтәле төрлө ашамлыҡтарҙан һығылып торған ошо дәүерҙә (тапҡан-таянғанын хәмергә әйләндереп, хәйерселеккә төшкәндәр хаҡында һүҙ бармай, әлбиттә) башта иҫкә алған икмәк тураһында ниҙер һөйләү, ысынлап та, урынһыҙ һымаҡ.



Тәрәнерәк фекерләй башлаһаң, беҙҙән дә бәхетле кешеләр юҡ ошо донъяла. Беҙ бит ошо Ер шарының экологик яҡтан иң таҙа, иң ҡулайлы өлөшөндә урынлашҡанбыҙ. Иң матур тәбиғәт тә - беҙҙеке. Иң саф һауа, һыу, ризыҡ үҙебеҙҙең республикабыҙҙа. Иң ябай, эскерһеҙ, әҙәпле, ихлас күңелле халыҡ та беҙҙә бит! Беҙҙең халыҡ, милләткә ҡарамай, барса кешеләргә хөрмәт итеүсәнлеге менән айырыла. Хаталаныуым да мөмкин, әммә яҡташтарыбыҙ башҡа халыҡтарҙы хатта үҙебеҙҙекенән дә нығыраҡ ихтирам иткән һымаҡ тойола миңә. Әллә әлеге "көнсөллөк" тигән насар нәмә шундай хистәргә этәреп, эсте көйҙөрә микән... Ҡунаҡсыл халҡыбыҙ, ысынлап та, бүтән яҡтан килгәндәр алдында өлтөрәп торған һымаҡ. Ә шулай ҙа халыҡ-ара дуҫлыҡ тойғолары тик бер яҡлы, йәғни, беҙҙә генә түгел, ә башҡа милләт вәкилдәрендә лә булыу мотлаҡ икәнен дә онотоп ебәрмәйек.

"Шөкөр" тигән һүҙ ғәрәпсәнән урыҫсаға "благодарность", тип тәржемәләнә. Ә беҙгә ул һүҙ шул көйөнсә, динебеҙ менән бергә килеп ингән, тип уйлау кәрәк. Шуның өсөн дә халҡыбыҙ башҡортсалап "Аллаға шөкөр", тип әйтер булған. Раббыбыҙға шөкөр итеү һүҙҙәрен "Әлхәмдүлиллаһ", тип тә әйтәләр, йәғни, барса маҡтау - Аллаһҡа. Изге Ҡөрьән аяттарында Аллаһы Тәғәлә кешеләргә Үҙе биргән һанһыҙ ниғмәттәр хаҡында йыш ҡына иҫкәртә һәм аҙағынан: "...ә фә лә йәшкүрүн", йәғни, "шөкөр ҡылмаҫтармы ни улар", тип ҡуя. Бәйғәмбәребеҙ ғәләйһиссәләм бер хәҙисендә: "Әҙәм балаһына бер тау алтын бирһәң - уның нәфсеһе икенсеһен теләр, ә икенсе тау алтын бирһәң - өсөнсөһөн теләр. Ысынында, кешене тик ер генә туйҙыра ала..." - тип әйтә. Йәғни, был донъя артынан күпме генә ҡыуһаҡ та, һәммәбеҙ ҙә иртәме-һуңмы ер ҡуйынына биреләбеҙ. Унда беҙҙең өсөн донъя малынан бер нәмә лә кәрәкмәйәсәк, беҙ тик үҙебеҙҙең тереклектә ҡылған һәм ҡылмаған, изге һәм гонаһлы ғәмәлдәребеҙ менән генә тороп ҡалабыҙ. Ахирәттә фәҡәт ана шулар өсөн генә яуап бирәсәкбеҙ. Унда беҙҙе донъя малы һис ҡотҡара алмаясаҡ. Беҙгә тик Аллаһы Тәғәләгә килтергән иманыбыҙ, ҡылған намаҙ, ураҙа һәм башҡа ғибәҙәттәребеҙ, Уның ризалығына өмөт итеп атҡарған яҡшы эштәребеҙ, Уға әйтелгән зикерҙәребеҙ, доғаларыбыҙ ғына ярҙам итәсәк. Мәшһүр Аҡмуллабыҙ әйтмешләй:

*...Тар ләхеттә мул малың*
*Юлдаш булыр тиһеңме;*
*Бер имандан башҡаһы*
*Моңдаш булыр тиһеңме...*

"Шөкөр итеп" йәшәүҙе донъялағы һәр нәмәгә битараф булып, "арҡыры ятҡанды буйға һалмай", вайымһыҙ ғүмер кисереүгә тиңләү кәрәкмәй, Аллаһ һаҡлаһын! Һәр нәмәгә объектив баһа биреп, төҙәтергә тейешле нәмәләрҙе үҙ ваҡытында төҙәтеп, хәлеңдән килгәнсе етеш, яҡшы йәшәргә тырышыу, әлбиттә, һәммәбеҙҙең бурысы. Тик, һәр кемебеҙ үҙебеҙҙең ҡаҙаныштарыбыҙ менән ҡәнәғәт булып, күршебеҙҙең тауығын "күркәләй итеп күрмәй" генә, үҙебеҙгә бирелгән һәр нәмә өсөн, оло ниғмәтебеҙ - ғүмеребеҙ өсөн, балаларыбыҙ өсөн тик бер Аллаһы Тәғәләгә шөкөр итеп, һәммәбеҙгә иң кәрәк булған иман байлығын Унан һорап, был донъяла ғына түгел, ахирәттә лә бәхет биреүенә өмөт итеп йәшәйек.

Хәленән килгәндәрҙең байып, йыллыҡ килеменең бер өлөшөнән мохтаждарға зәҡәт биреп йәшәүе, әлбиттә, бик яҡшы. Әммә байығыуҙы ғына үҙмаҡсат итеп ҡуйыу ярамай. Аҡсаһы күп булғандар ғына түгел, ә барына риза булып йәшәгәндәр ҙә был донъяла ысын бәхет таба. Иң мөһиме - Раббыбыҙҙың биргәндәренә ризалыҡ ҡылып, донъя йыйыуҙы бер аҙ икенсе планғараҡ күсереп, әлеге Аҡмулла олатай әйтмешләй, "төҙ юл менән йүгер"ергә ашығып, тере сағыбыҙҙа шуға өлгөрөп ҡалырға тырышырға тейешбеҙ. Шулай итәйек!

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

*ИҒТИБАР!*

## МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2017 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылыу дауам итә. Республикабыҙҙың һәр районы-ҡалаһында, иң төпкөл ауылдарҙа ла 50665 индекслы "Киске Өфө"гә - 559 һум 56 тингә, 50673 индекслыһына (ойошмалар һәм предприятиелар өсөн) - 589 һум 56 тингә, ә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары өсөн - 447 һум 64 тингә яҙыла алаһығыҙ.**



● Уҡыусыларыбыҙ гәзитебеҙҙе - үҙе бүләк ул, тип ҡабул итһә лә, даими рәүештә дәртләндереү, бүләкләү саралары ла тәҡдим итеп тороуыбыҙҙы беләһегеҙ. Гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер, ғәҙәттәгесә, матур китаптарға лайыҡ буласаҡ. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!

● Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru. Электрон почта: kiskeufa@mail.ru.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Республика Хөкүмәте ҡарары менән Башҡортостанда Агросәнәғәт профилендә юғары һәм урта профессиональ белем биреү учреждениеларының өҫтөнлөклө йүнәлештәрен билдәләү буйынса координация советы ойошторола. Проектты әҙерләүселәрҙең фекеренсә, уны ойоштороу аграр белем биреү һәм эшкә урынлаштырыу системаларын камиллаштырыу буйынса ҡуйылған бурыстарҙы ведомство-ара кимәлдә хәл итергә мөмкинлек бирәсәк. Иң мөһиме - эш биреүселәр һәм мәғариф учреждениелары араһында үҙ-ара эшмәкәрлекте һәм партнерлыҡ мөнәсәбәттәрен көйләү.

✓Башҡортостанда Рәсәйҙә ҡурсаулыҡ системаһының 100 йыллығына арналған "Ҡурсаулыҡ урындары буйлап" I төбәк-ара экология марафоны уҙҙы. Марафонда ҡатнашыусылар Белорет, Бөрйән, Күгәрсен һәм Мәләүез райондарында булды, Көньяҡ Урал һәм Башҡортостан дәүләт ҡурсаулыҡтарын, "Ирәмәл" һәм "Мораҙым тарлауығы" тәбиғәт парктарын, шулай уҡ "Башҡортостан" милли паркын күрҙе. Балалар өсөн махсус маршрут әҙерләнгәйне. Улар "Асылыкүл", "Ҡандракүл", "Мораҙым тарлауығы" тәбиғәт парктары һәм "Башҡортостан" милли паркының хозурлығын күреп һоҡланды.

✓13-21 июндә Башҡортостанда "Бурыслы" операцияһы үткәрелә. ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙған өсөн штрафтарын түләмәгән водителдәрҙе һәм йәйәүлеләрҙе асыҡлай. Штрафтар буйынса бурыстары булған водителдәр асыҡланған осраҡта, закон буйынса уларҙы административ яуаплылыҡҡа йәлеп итеү тураһында ҡарар ҡабул ителә. Уларҙың 15 тәүлеккә тиклем административ ҡулға алыуға тарттырылыуы ихтимал. Йәиһә штраф ике тапҡырға арта.

✓Башҡортостан гәзит-журналдарға яҙылыу ун көнлөгө йомғаҡтары буйынса иң яҡшы биш төбәк иҫәбенә инде. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, был ваҡытта Рәсәй почтаһы һәм баҫмалар һиҙелерлек ташламалар тәҡдим итә. Дөйөм алғанда, ошо 10 көндә рәсәйҙәр өҫтәмә рәүештә өс миллион тиерлек, Башҡортостанда йәшәүселәр иһә 156 мең гәзит-журналға яҙылған. Был уҙған йылдың яҙғы декадаһына ҡарағанда 27 процентҡа күберәк.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Башҡортостандың баш ҡалаһы илдең конгресс майҙансыҡтары, уңайлы транспорты һәм логистикаһы, яңы отелдәре менән тейешле инфраструктураға эйә яңы конгресс үҙәге тип танылa.*



БАШ ҠАЛАМ

# ЙӘШЕЛЛЕККӘ КҮМЕР ИНЕМ...

**"ВДНХ-Экспо" майҙансығында ике көн дауамында "Экология. Технологиялар. Тормош" тип аталған Халыҡ-ара экологик форум һәм махсуслаштырылған күргәҙмә үтте. Уның эшендә Рәсәйҙең 12 төбәгенән 80-дән ашыу компания ҡатнашты. Белгестәр һәм йәмәғәтселек ҡурсаулыҡтарҙы, йәшел иҡтисадты үҫтереү, экологик туризм, экологик белем мәсьәләләре менән бер рәттән, ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары, эсәр һыу сифаты һәм башҡа мәсьәләләр буйынса фекер алышты. Ошо йәһәттән баш ҡалала йәшәүсе Айрат ҮТӘГӘНИҙән баш ҡала, уның экологияһы буйынса фекерен белештек.**

**➔ Беренсе тапҡыр килгән һәм күргән Өфөгөҙ менән бөгөнгөһө араһында ниндәй айырма бар?**

- Баш ҡалаға тәүге тапҡыр килеүем бала саҡҡа тура килһә лә, хәтерҙә ныҡлы уйылып ҡалған. Дүртенсе синыфты тамамлағас, 1979 йылда Өфөләге 1-се республика интернат-мәктәбенә уҡырға килдем. Урамдарҙың таҙалығы, йәшеллек һәм күҙҙең яуын алып ултырған сәскәләр аптыратты, Октябрь проспектынан шаулап йөрөгән трамвайҙар ҙа яңы күренеш булды. Бөгөн дә ҡалала йәшелләндереү буйынса алып барылған эшмәкәрлек күңелгә яҡын, Өфө йәшеллеккә күмелә, быны баш ҡалаға килгән ҡунаҡтар ҙа билдәләй. Ҡарт, кеше ғүмере һәм сәләмәтлеге өсөн хәүеф тыуҙырған ағастар даими ҡырҡылып, улар урынына яңылары, йәш үҫентеләр ултыртыла. Хакимиәт башлығы ла ҡырҡылған бер ағас урынына ике ағас ултыртыуҙы ошо йүнәлештәге эшмәкәрлектең төп маҡсаты итеп ҡуя.

**➔ Бөгөнгө ҡаланың экологияһы һеҙҙе ҡәнәғәтләндерәме?**

- Үкенескә күрә, экологик проблемаларҙың хәл ителеше, транспорт һәм логистика мәсьәләләре, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ мәсьәләләре ҡала кешеһенең ихтыяждарын ҡәнәғәтләндермәй. Бер яҡтан, ҡалала йәшәү өсөн уңайлыҡтар булдырырға тырышыла, икенсе яҡтан, ул йәшәү өсөн уңайлы мөхит булыуҙан алыҫлаша, быны сәбәптәре күп һәм, әлбиттә, бөтөн донъяла барған урбанизация, глобалләшеү үҙ ролен уйнамай ҡалмай. Экологияға ғына килгәндә лә, белгестәр уны яҡшы, тип күрһәтергә тырышһа ла, бойондороҡһоҙ эксперттар һәм электән ошо проблема менән шөғөлләнеп, бөгөн хаҡлы ялда булыусылар баш ҡала экологияһының катастрофик хәлдә булыуын, һөҙөмтәлә төрлө сирҙәрҙең артыуы менән бер рәттән, ирҙәр түлһеҙлегенең, ауырыу балалар тыуыу күрһәткестәренең арта барыуын, демографияның насарайыуын билдәләй. Ғөмүмән, Башҡортостан Рәсәйҙең имен булмаған экологик хәл-торошло төбәгенә инә. Һауа һәм һыу бассейндарының, тупраҡтың бысраныуы һәм башҡа сәбәптәр яман шеш сирҙәренең артыуына килтерә.

**➔ Әгәр шундай мөмкинлек бирелһә, баш ҡалала нимәне үҙгәртер, нимәгә өҫтөнлөк бирер инегеҙ?**

- Башҡортостандың баш ҡалаһы булараҡ, Өфөнөң үҙенә генә хас стиле, һыҙаттары, милли рухты сағылдырған үҙенсәлектәре юҡ кимәлендә. Әгәр шундай мөмкинлек бирелһә, баш ҡалаға килгән сит ил, сит төбәк ҡунаҡтарын алып барырлыҡ башҡорт милли ресторандары, туҡланыу объекттарын булдырыр, башҡорттарҙың тарихы, мәҙәниәте, әҙәбиәте, көнкүреше һ.б. тураһында мәғлүмәттәр бер ҡыйыҡ аҫтында тупланған үҙәк булдырыр, шул уҡ ваҡытта Өфө ҡалаһын заманса технологиялар нигеҙендә үҫеш алған, ябай кешеләр өсөн киң мөмкинлектәр булдырылған, уңайлы, хәүефһеҙ һәм йәшеллеккә күмелгән мегаполис итергә тырышыр инем.

**Земфира ХӘБИРОВА яҙып алды.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# БЕҘҘӘ ҠУНАҠТА - ҠЫРҒЫҘҘАР



**Ошо көндәрҙә Өфөлә эш сәфәре менән Ҡырғыҙстандан Бишкәк ҡала кәңәше Рәйесе Канатбек Музуралиев етәкселегендәге делегация булып китте.**

Ҡунаҡтар беренсе көндә "Ҡаланы йәшелләндереү хужалығы" һәм "Ҡаланы таҙартыу буйынса махсус автохужалыҡ" коммуналь предприятиелары эше менән танышты, шулай уҡ ҡайһы бер инфраструктура объекттарында, шул иҫәптән былтыр сафҡа индерелгән яңы Затон күперендә һәм Дуҫлыҡ монументы эргәһендәге Ағиҙел йылғаһы яр буйының икенсе сираты төҙөлөшө майҙансығында булды. Ҡунаҡтарҙы бигерәк тә ҡаланы йәшелләндереү тәжрибәһе ҡыҙыҡһындырҙы. Хеҙмәткәрҙәрҙең шәхси әҙерләмәләре менән берлектә төҫлө һәм ландшафт биҙәлеше уларҙа һоҡланыу тыуҙырҙы. "Ҡаланы таҙартыу буйынса махсус автохужалыҡ" базаһында делегация предприятиеның автопаркы һәм контейнерҙар паркын яңыртыу муниципаль өҫтәмә программаһын тормошҡа ашырыу барышы менән танышты. Өфөнөң ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтарын йыйыу, айырыу һәм утилләштереү тәжрибәһе ла ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы.

Эш сәфәре сиктәрендә Өфө һәм Бишкәк ҡалалары араһында сауҙа-иҡтисад, фәнни-техник йүнәлештәр, мәҙәниәт, мәғариф, спорт һәм йәштәр сәйәсәте буйынса хеҙмәттәшлекте үҫтереү йүнәлешен күҙаллаған Протоколға ҡул ҡуйылды.

- Өфөлә һеҙҙең делегация килеүен бик көттөк, сөнки көнсығыш йүнәлешен, шул иҫәптән яҡын сит илдәр менән бәйләнештәрҙе үҫтереүгә йүнәлеш алғанбыҙ. Суверенлы дәүләт вәкилдәренең килеүе беҙҙең өсөн бик абруйлы. Өфө ҡунаҡтарға һәр саҡ шат һәм асыҡ. Төрки халыҡтарының ҡунаҡсыллығы тап шунда сағыла ла инде, - тип һыҙыҡ өҫтөнө алды осрашыу барышында баш ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов.

Бишкәк ҡала кәңәше рәйесе Канатбек Музуралиев баш ҡала үҙен өйөндәге кеүек тойоуын, ҡала предприятиелары эше менән танышҡандан һуң Өфө тәжрибәһенең Бишкәк өсөн дә файҙалы буласағын билдәләне.

Бишкәк кәңәше депутаттарының Өфөнө һайлауы осраҡлы түгел. Ике дәүләттең үҫешендә оҡшашлыҡтар күп. Ике баш ҡала ла әүҙем төҙөлә, Бишкәк халҡы миллионға етеп килә, транспорт инфраструктураһын модернизациялау бурыстары тора. Өфө кеүек үк, Бишкәк әүҙем тышҡы иҡтисади эшмәкәрлек алып бара. Ә Протокол иһә ике ҡала араһында яңы мөнәсәбәттәр булдырырға, һөҙөмтәле хеҙмәттәшлеккә, бәйләнештәрҙең яңы кимәленә сығырға юл асасаҡ.

# ЯҠШЫ ИСЕМЛЕКТӘБЕҘ

**R&C Күргәҙмә ғилми-тикшеренеү үҙәге төҙөгән рейтинг буйынса Өфө ҡалаһы Рәсәйҙең ваҡиғалар ҡеүәте юғары булған 20 ҡалаһы араһында 11-се урын биләй.**

Бындай тикшеренеү 2014 йылдан алып даими уҙғарыла һәм рейтинг төҙөгәндә төбәктең ивент-индустрияһын ҡылыҡһырлаған мөһим аспекттар: матди-техник базаның үҫеш кимәле, күргәҙмә-йәрминкә һәм конгресс эшмәкәрлегенә ярҙам итеү буйынса алып барылған төбәк сәйәсәте, әһәмиәтле саралар үткәреү тәжрибәһе, төбәкте туристик территория сифатында характерлаусы төп күрһәткестәр иҫәпкә алына. Былтырғы тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһе буйынса, Өфөнөң ҡеүәте нығыныуы билдәләнә. Төбәк индустрияла ҡатнашыусыларҙың етди иғтибарын йәлеп итә, сөнки Башҡортостанда хәҙер матур тәбиғәт ҡосағында ҡышҡы һәм йәйге әүҙем ял менән бер рәттән, теләһә ниндәй форматтағы, кимәлдәге, масштабтағы эшлекле һәм корпоратив саралар үткәреү мөмкинлеге бар. Башҡортостандың баш ҡалаһы илдең конгресс майҙансыҡтары, уңайлы транспорты һәм логистикаһы, яңы отелдәре менән тейешле инфраструктураға эйә яңы конгресс үҙәге тип танылa. Төбәк менән танышырға теләүселәр өсөн Өфөлә "Офис-группа" АНО-һы базаһында Башҡортостандың Конгресс-бюроһы ойошторолған. Быға са ул бер нисә йыл милләт һәм халыҡ-ара хеҙмәттәшлекте үҫтереү буйынса сараларҙы әҙерләү һәм тормошҡа ашырыу менән шөғөлләнә. 2015 йылда уҙғарылған ШОС һәм БРИКС саммиттары - уның эше һөҙөмтәһе.

Рейтингта беренсе урында - Санкт-Петербург, икенсе урында - Екатеринбург, өсөнсөлә Сочи килә.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Әҙәбиәт, сәнғәт һәм архитектура өлкәһендәге Шәйехзада Бабич исемендәге республика дәүләт йәштәр премияһына эштәр ҡабул итеүгә ярты айҙан әҙерәк ваҡыт ҡалды. Эштәр 1 июлгә тиклем түбәндәге адрес буйынса ҡабул ителә: 450000, Өфө ҡалаһы, Ленин урамы, 10, 24-се бүлмә - талантлы йәштәргә һәм йәштәрҙең башланғыстарына булышлыҡ итеү бүлеге. Белешмәләр өсөн телефон: (347) 218-03-08. Электрон почта: kuptcova.ar@bashkortostan.ru

✓Башҡортостан юлдаш телевидениеһы тамашасыларын "Шүлгәнташ мәмерйәһе - сәнғәт сәңгелдәге" ғилми-популяр фильмының премьераһы көтә. Телевидениела фильмды 18 июндә киске 11-се яртыла күрһәтәләр. "Был - Башҡортостан юлдаш телевидениеһының ғилми-популяр фильмы. Ул Рус география йәмғиәте грантының аҡсаһына төшөрөлгән. Таҫма Европаның иң боронғо мәмерйәләренең береһендә - Шүлгәнташта илебеҙ һәм сит ил ғалимдарының һуңғы тикшеренеүҙәре хаҡында һөйләй.

✓Өфө дәүләт нефть техник университеты, Өфө дәүләт авиация техник университеты һәм Башҡорт дәүләт университеты Рәсәйҙең иң яҡшы 100 юғары уҡыу йорто исемлегенә инде. Рейтингты ғәҙәттәгесә RAEX (рейтинг агентлығы эксперты) әҙерләгән. Республика вуздары араһында алдынғылыҡты Өфө дәүләт нефть техник университеты биләй, ул 57-се урында. Унан һуң 92-се урында - Өфө дәүләт авиация техник университеты һәм 95-се баҫҡыста - Башҡорт дәүләт университеты.

✓Республика балалар клиник дауаханаһында Башҡортостандағы тәүге Донор күкрәк һөтө банкы асылды. Проект халыҡтың иғәнәләренә "Беҙҙең балалар" хәйриә фонды менән берлектә ойошторолған. Донор күкрәк һөтөн махсус лабораторияла йыйып һаҡлау һәм медицина күрһәткестәре буйынса уға мохтаж яңы тыуған сабыйҙар араһында бүлеү ҡаралған. Донор әсәләр клиниканың неонаталь бүлегендә ятыусылар араһынан һайлап алына.

✓Башҡортостан Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитеты ҡала һәм райондарҙа бер квадрат метр торлаҡтың уртаса баҙар хаҡы күрһәткестәре тураһында бойороҡ сығарҙы. Был күрһәткестәр торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаждарға социаль түләүҙәр иҫәпләү өсөн ҡулланыла. Мәҫәлән, Өфөлә йәш ғаиләләргә бүленә торған субсидиялар иҫәпләү өсөн квадрат метрҙың хаҡы 36 132 һум күләмендә раҫланған. Башҡа граждандар категорияһына субсидиялар иҫәпләү өсөн күрһәткес - 37 200.

✓ *Гәзиттәр электрон вариантта сыға башлағас, Көнбайыш илдәрендә лә ҡағыҙ баҫмаларҙың данаһы кәмеп китә бит. Ләкин хәҙер ҡағыҙ баҫмаларға яңынан ҡайтыу күренеше күҙәтелә.*



ТӨРЛӨҺӨНӨН

# СПОРТСЫЛАР БЫНДА ӘҘЕРЛӘНӘСӘК!



**Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Затон биҫтәһендә Спорт әҙерлеге үҙәген төҙөүҙе тамамлау мәсьәләһе буйынса эш кәңәшмәһе үткәрҙе.**

Төҙөлөш майҙансығында булғанда тиҙ арала бөтөрөүҙе талап иткән бер нисә етди етешһеҙлек асыҡланды, тип билдәләне республика Башлығы. Был тәү сиратта төҙөлөш мәҙәниәтенә, биләмәне төҙөкләндереүгә ҡағыла. Спорт әҙерлеге үҙәге төҙөлөшө 2010 йылда башланғайны. Уның дөйөм майҙаны 37 мең квадрат метрҙан ашыу тәшкил итә. Атап әйткәндә, ул үҙ эсенә 3 мең урынлыҡ трибуналар менән 8,5 мең квадрат метр майҙанлыҡ спорт-күрһәтеү комплексын, 500 урынлыҡ трибуналар менән 13,7 квадрат метр майҙанлыҡ йөҙөү бассейндарын, шулай уҡ сәләмәтлекте тергеҙеү үҙәген, кафе һәм 200 урынлыҡ ҡунаҡхананы ала. Төҙөлә башлаған комплекс Рәсәйҙә ошондай типтағы берҙән-бер ҡыйыҡлы үҙәк буласаҡ. Бында спортсы-паралимпиясыларҙың күнекмәләре өсөн шарттар булдырыу күҙаллана. Үҙәктә Рәсәй һәм халыҡ-ара спорт ярыштарын ҡабул итергә, спорттың төрлө төрҙәре, шул иҫәптән фехтование, теннис, күпбөйгө, бокс, еңел атлетика буйынса илдең йыйылма командалары күнекмәләрен үткәрергә мөмкин.

# ҺАЙЛАУҘАР ЯҠЫНЛАЙ...



**Һайлауҙар тураһында федераль һәм төбәк ҡануниәтенә ярашлы, яңы составтағы Үҙәк һайлау комиссияһына хәл иткес тауышҡа эйә 12 ағза инә. Республика һайлау комиссияһы ағзаларының яртыһын - Дәүләт Йыйылышы, икенсе яртыһын Башҡортостан Башлығы тәғәйенләй.**

Башҡортостан Башлығы үҙенең указы менән Үҙәк һайлау комиссияһының алты ағзаһын тәғәйенләне: Башҡортостан Республикаһы Үҙәк һайлау комиссияһының ғәмәлдәге рәйесе Хәйҙәр Вәлиев, Марат Ғәҙелов, Ләйсән Ғарипова, Илдар Кәримов, Геннадий Шабаев, Руслан Ямалетдинов. Башҡортостандың Дәүләт Йыйылышы депутаттары ла Башҡортостан Үҙәк һайлау комиссияһының хәл иткес тауышҡа эйә алты ағзаһын һайланы. Рейтинг тауыш биреү йомғаҡтары буйынса төбәктең Үҙәк һайлау комиссияһы ағзалары итеп түбәндәгеләр һайланды: Рөстәм Бикмәтов, Марина Долматова, Игорь Ермолаев, Таһир Закиров, Вадим Садиҡов, Елена Суфиянова.

# ЭШ ХАҠЫНА ӨҪТӘМӘ



**Быйыл Башҡортостанда бюджет өлкәһе хеҙмәткәрҙәренә эш хаҡы арттырыла. Башҡортостан Хөкүмәтендә асыҡлыҡ индереүҙәренсә, документҡа ярашлы, хеҙмәт хаҡының артыуы бюджет өлкәһе учреждениелары хеҙмәткәрҙәренең түбәндәге категорияларына ҡағыла:**

- мәктәп уҡытыусыларына; балалар баҡсаларындағы педагогия хеҙмәткәрҙәренә; балаларға өҫтәмә белем биреү педагогтарына; һөнәри белем биреү учреждениелары уҡытыусыларына һәм производствола уҡытыу мастерҙарына; юғары һөнәри белем биреү уҡытыусыларына;
- мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренә;
- ғилми хеҙмәткәрҙәргә;
- табиптарға; урта медицина персоналына; кесе медицина персоналына;
- социаль хеҙмәткәрҙәргә; етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балаларға социаль хеҙмәттәр күрһәткән педагогия хеҙмәткәрҙәренә.

Күрелгән саралар мәғариф, мәҙәниәт, һаулыҡ һаҡлау, фән һәм халыҡты социаль хеҙмәтләндереү өлкәләрендә эшләгән 142 меңдән ашыу хеҙмәткәрҙең матди хәлен яҡшыртырға мөмкинлек бирәсәк.

# ПЛЯЖДАР ӘҘЕР ҘӘ УЛ...



**Быйыл Өфөлә йәй эшләйәсәк һыу инеү урындарының исемлеге билдәле булды. Тейешле ҡарар ҡала округы хакимиәтенең рәсми сайтында баҫылған.**

Өфөләр һәм ҡала ҡунаҡтары өсөн һыуҙа 11 ял урыны эшләйәсәк:
- "Кояшлы", Ағиҙел йылғаһы, Киров районы;
- "Бельский", Ағиҙел йылғаһы, Киров районы;
- "Кояш яры", Ҡариҙел йылғаһы, Октябрь районы;
- "Сипайловоларғы Сочи", Ҡариҙел йылғаһы, Октябрь районы;
- "Комло", Ҡариҙел йылғаһы, Калинин районы;
- "Шарлауыҡ", Ҡариҙел йылғаһы, Калинин районы;
- "Карьер", Дим районы;
- "Матур", Дим районы;
- "Кашҡаҙан", Октябрь районы;
- "Гольфстрим" Йылы күлендә, Калинин районы;
- "Ожмах яры" Йылы күлендә, Калинин районы.

Документҡа ярашлы, пляждар 1 июндә асылды. Шул ваҡытҡа ял итеү урындары талпандарҙан эшкәртелде һәм кәрәк-яраҡтар менән йыһазландырылды. Йәйгелеккә "Ҡотҡарыу хеҙмәте 112" штатына өҫтәмә 55 ҡотҡарыусы алынды, улар ял итеүселәрҙең хәүефһеҙлеген тәьмин итәсәк.

# УРТАСА ПЕНСИЯ ШУЛАЙ



**2017 йылдың 1 ғинуарына ҡарата республикала уртаса пенсия 11 806 һум тәшкил иткән. Был хаҡта, Рәсәй Пенсия фондының Башҡортостан бүлексәһе мәғлүмәттәренә һылтанып, Башҡортостанстат хәбәр итә. Сағыштырыу өсөн: 2016 йылдың 1 ғинуарында ул 11 420 һумға тиң булған.**

Статистар хәбәр итеүенсә, әле төбәктә 1,164 миллиондан ашыу пенсионер иҫәпләнә, былтыр иһә 1,148 миллион кеше. Шуларҙың 1,065 миллиондан ашыуы страховка пенсияһы ала. Уларҙың уртаса пенсияһы 12 080 һум тәшкил итә. Ошондай пенсионерҙарҙың дөйөм һанынан 970 мең самаһы кешегә ҡартлыҡ буйынса пенсия тарала. Башҡортостанда уның уртаса күләме 12 466 һум тәшкил итә. Инвалидлыҡ буйынса пенсияның уртаса күләме - 7980, ҡараусыһын юғалтҡан осраҡта 8317 һумға тиң. Бынан тыш, республикала дәүләт пенсия тәьминәте буйынса пенсия алған 99 мең пенсионер иҫәпләнә. Уларҙың уртаса пенсияһы 8863 һум тәшкил итә, тип белдерҙе статистар.

ӘЙТӘГҮР!

# НИҢӘ ЙӘШТӘР ГӘЗИТ УҠЫМАЙ?

**14 июнь көндө Башҡортостан Республикаһының Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәрҙәре көнө билдәләнде. Ошоға бәйләп, йәштәрҙең гәзит-журналдарҙы уҡыу-уҡымауы менән ҡыҙыҡһындыҡ. Иғтибарығыҙға Башҡорт дәүләт университеты магистранты Зәлиә Шәмсетдинованың яуабын тәҡдим итәбеҙ.**

- Башҡортостан матбуғат баҫмаларының тиражы кәмегәндән-кәмей бара, хатта республиканың иң төп гәзиттәре лә уҡыусы иғтибарынан ситтә ҡала, тип беләбеҙ. Шул уҡ ваҡытта алдынғы Европа илдәрендә гәзит-журналдар ҙур тираж менән, 100-әр битлек булып баҫыла икәнен дә ишеткәнебеҙ бар. Улар, күрәһең, беҙҙең киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы әлеге осорҙо үткән, сөнки гәзиттәр электрон вариантта сыға башлағас, Көнбайыш илдәрендә лә ҡағыҙ баҫмаларҙың данаһы кәмеп китә бит. Ләкин хәҙер ҡағыҙ баҫмаларға яңынан ҡайтыу күренеше күҙәтелә. Был хаҡтағы һорауҙарға европалылар, ташҡа баҫылғанға ышанырға мөмкин, тип яуап биргән. Ысынлап та, электрон сығанаҡтарҙа яҙылған бөтә мәғлүмәт тә дөрөҫлөккә тап килмәҫкә мөмкин. Ләкин минең тиҫтерҙәремә, ысынлап та, был сығанаҡтарҙы уҡыуы уңайлы, үҙем дә яңылыҡтар менән интернетта танышам, әммә бөтәһенә лә ышанып бөтмәйем.

Гәзит алдырып уҡымаған кешеләр күп, был хаҡта һораһаң, улар аҡса йә ваҡыт юҡлыҡҡа һылтана. Баҫма гәзиттәргә яҙылырға аҡсам юҡ, тип әйтә алмайым, әммә яҙылмайым. Бының сәбәбе - гәзит уҡып өйрәнмәгәнмен. Өйрәнмәгәс, унда ниндәй мәғлүмәт баҫылыуын да белмәйем, ҡыҙыҡлымы ул, әллә юҡмы икәнен дә күҙ алдына килтермәйем. Тиҙ генә ҡарап сыға торған, һүрәттәр менән тулы, ялтыр ҡағыҙҙа баҫылған журналдар иғтибарҙы йәлеп итә итеүгә. Йәштәрҙең матбуғат баҫмаларын үҙ итеү-итмәүе тураһында һөйләгәндә, бының сәбәбен гәзит-журналдарҙа ҡыҙыҡлы мәғлүмәт булмауына йәки йәштәрҙең уҡырға теләмәүенә генә ҡайтарып ҡалдырыу дөрөҫ түгелдер, тим. Төп сәбәптәрҙең береһе - беҙгә бала саҡта бәрәү ҙә гәзит-журнал уҡыу өлгөһө күрһәтмәне. Бик һирәк кенә ғаиләләрҙә ата-әсәләр республика баҫмаларына яҙылалар, балалар өсөн сығарылған гәзит-журналдарҙы алдыралар. Бала сағымда әсәйем "Аҡбуҙат", "Мурзилка" журналдарына яҙыла торғайны, ләкин үҫә төшкәс, гәзит-журналдар уҡыу ғәҙәте ҡанға һеңдерелмәне. Сит ил киноларында уңышлы кешеләрҙе иртән иртүк физик күнекмәләр эшләй, ҡәһүә эскән саҡта ҡулына гәзит тотоп ултыра, тип күрһәтәләр. Тимәк, уңышлы кеше уҡый, эшкә барыр өсөн иртә тора тип беләбеҙ. Ә беҙ ни өсөн шулай эшләмәйбеҙ, тигән һорауға, беҙҙә эшлекле кеше уҡырлыҡ гәзит-журналдар бармы ул, тип яуаплайбыҙ. Ә үҙебеҙ хәҙер матбуғат баҫмаларында ниндәй мәғлүмәт баҫылыуын да белмәйбеҙ. Йәштәр ҡыҙыҡһынһын, уҡыһын өсөн әйҙә, күҙ алдында ниндәй булһа ла гәзит йә журнал ятырға тейеш бит.

**Сәриә ҒАРИПОВА** яҙып алды.

**Әйткәндәй, матбуғат баҫмаларына ҡарата бар йәштәрҙең дә фекере ошолаймы икән? Әллә башҡа төрлө уйлағандар ҙа бармы? Фекер алышыуға саҡырабыҙ.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Һалҡын тейһә

❖ Һаҡланып йөрөмәһәң, йәй ҙә һалҡын тейә. Был мәлдә эсе торманы әрсеп, ваҡ итеп турарға, өҫтөнә шәкәр һибергә һәм 2 сәғәт мейестә бешерергә, барлыҡҡа килгән ҡатнашманы һығып алырға ла, шешәгә һалып ҡуйырға. Балғалаҡты эҫе һыуға тығып йылытып, 1-әр балғалаҡлап эсергә.

## Арҡа ауыртһа

❖ 1 ус ваҡланған мәтрүшкәне 0,5 л көнбағыш йәки зәйтүн майына һалып, 10 сәғәт төнәтергә. Төнәтмәне һөҙөп, мәтрүшкәнен һығып алырға ла, майҙы арҡаға һөртөргә.

## Мускулдар ауыртһа

❖ 1 ҡалаҡ ҡурай еләге япраҡтары һәм һабаҡтарын 1 стакан ҡайнар һыуға һалып, һүрән утта 5 минут тоторға, 30 минут төнәтеп, көнөнә 3 мәртәбә ашарҙан ярты сәғәт алда 3-әр ҡалаҡ эсергә.

## Эремсек һыуы

❖ Ҡул йәки аяҡ быуындары шешһә, эремсек һыуына тығып ултырырға кәрәк.

## Миндек - дауа

❖ Миндек бәйләр мәл дә етеп килә. Ерек миндеге - һыуыҡты ҡыуа, үпкәләге лайлаларҙы сығара, быуындар һыҙлауын баҫа, артыҡ йыйылған көстән дә арындыра.

❖ Кесерткән миндеге йылылыҡ бирә, бил, ултырыш һөйәктәре һыҙлауын баҫа.

❖ Йүкә, ҡайын, имән, артыш миндектәре кешенең көсөн, егәрлелеген уята, шуға күрә уларҙы иртәнге мунсала ҡулланалар. Улар кешегә хәрәкәт дәрте бирә. Миндектәрҙе артыҡ ныҡ киптереү кәрәкмәй. Бәйләнгән генә сағында улар үтә лә шифалы.

## Эт тырнағы

❖ Эт тырнағы сыҡмаһын өсөн күберәк кальцийлы ризыҡтар, сардина һәм сөләймән балыҡтары, сәтләүектәр ашарға.

❖ Тамырҙарҙағы ҡан йөрөшө яҡшырһын өсөн көн дә 10 минут бармаҡтарҙы ҡайнар һыуға тығып ултырырға һәм тырнаҡтарға балыҡ майы һөртөргә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ ***Баҙыян һауытта тоҙ ҙа, шәкәр ҙә ҡатмай. Быяла, фарфор-фаянс һауыттарҙа улар таш булып ҡата ла ҡуя бит. Ағас һауыт тоҙҙо дымланыуҙан һаҡлай. Шул яғы менән баҙыян һауыттар практик әһәмиәткә лә эйә.***



*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

## Хәҙисә

605 йылда Мәккәлә бик ҙур һәм әһәмиәтле сара уҙғарыла - ҡөрәйш аҡһаҡалдары Ҡибланың емерелә башлаған диуарын һүтеп, яңынан һалырға тигән ҡарар ҡабул итә. Был эш, күптән үк эшләргә уйланылһа ла, төрлө сәбәптәр арҡаһында йылдан-йыл кисектерелә килә. Тик бер ҡараҡ был сараны тиҙләтеп ебәрә - диуарҙың серегән бер өлөшөн һүтеп инеп, Ҡибланың ҡиммәтле әйберҙәрен алып китә. Ул саҡта һаҡ булмай, шуға ла Мәккә кешеләренең бер өлөшө ҡараҡты үҙ белдеге менән эҙләргә тотона. Һәм күп тә үтмәй, уны, елкәһенән тотоп, аҡһаҡалдар менән ырыу башлыҡтары янына килтереп тә еткерәләр. Дөвәйк исемле был ҡараҡты ғәрәптәрҙең шул замандағы ҡанундары буйынса хөкөм итәләр - урлашҡаны өсөн уң ҡул суғын киҫәләр, изге урынды мыҫҡыллауы өсөн ҡаланан ун йылға ҡыуып сығаралар.

Шунан һуң Мәккә халҡы Ҡибланы төҙөкләндерергә тотона. Һәр абруйлы ырыуға Ҡибла диуарының бер өлөшө бүлеп бирелә лә, уны тулыһынса һүтеп, яңынан һалалар. Бөтөнөһөнә лә бер талап ҡуйыла - Ҡибла электән ниндәй булһа, шулай ҡалырға тейеш. Күмәкләп тотонғас, эш тиҙ эшләнә. Тик изге Ҡибла ташын урынына һалыу ваҡыты еткәс, бәхәстәр башлана. Һәр ырыу был эшкә үҙен лайыҡлы һанай. Бәхәс ҡыҙғандан-ҡыҙа бара. Ә ике ырыу кешеләре - Әҙи менән Әбд Әд-Дар, үҙ ҡарарҙарының етдилегенә бөтөнөһөн дә төшөндөрөү өсөн, боронғо ғәрәп йолаһы буйынса, һауыттарға тултырып ҡан алып киләләр һәм барыһы алдында ҡулдарын шул ҡанға буяп, Ҡибла ташы урынлаштырыуҙа уларҙы лайыҡлы тип танымаған хәлдә, бөтөн Мәккәне ҡанға батырасаҡтары тураһында белдерәләр.

Мәккә башлыҡтары ни эшләргә белмәй. Ниндәй генә ҡарар сығарылмаһын, аҙағы һуғыш менән тамамланасаҡ. Әйткәндәй, был башлыҡтарҙың да һәр береһе фәҡәт үҙ ырыуын лайыҡлы һанай. Был ҡыҙыу мәлдә аҡһаҡалдар менән ырыу башлыҡтары янына Мөхәммәт килеп инә лә, ҡатмарлы мәсьәләне сисеү юлын әйтә. Был тәҡдимде бөтөнөһө лә шатланып ҡабул итә - Ҡибла ташын ҙур сепрәккә һалып, уны төрлө яҡлап һәр ырыуҙың иң абруйлы кешеләре тотоп, урынына урынлаштырырға тейеш була. Шулай эшләргә килешеп, бөтөнөһө лә ҡәнәғәт булып өйҙәренә таралыша.

Бер нисә йылдан һуң ҡоролоҡ башлана. Мөхәммәттең Әбү Талиб олатаһы ауыр хәлдә ҡала. Туғандары Әбү Талибҡа ярҙам итеп тора, ул ғына ла түгел, Мөхәммәт унының кесе улы Ғәлиҙе, ә Ғәббәс - уртансы улы Джәфәрҙе үҙҙәренә алып ҡайта. Әбү Талибтың хәле һәйбәтләнеү менән улдары өйҙәренә кире ҡайтырға тейеш була, тик Әбү Талиб эштәрен башҡаса яйға һала алмай.

Хәлимәләрҙең хәлдәре үтә лә мөшкөл була. Етмәһә, ҡыҙҙары ҡоллоҡҡа эләгә. Мөхәммәт уларға ла ярҙам итеп тора, ә ҡыҙҙарын ҡоллоҡтан һатып алып, ата-әсәһенә тапшыра.

Ошо ваҡытта уҡ Хәҙисә Мөхәммәткә Зәйет исемле ҡол егетте бүләк итә. Зәйет - ҡөрәйштәр яҡлы булған бер ырыуға ҡаршы һуғышта әсиргә эләккән яугир була. Мөхәммәт Зәйетте улы кеүек ярата. Зәйеттә лә көндән-көн Мөхәммәткә ҡарата ихтирам тойғоһо арта бара. Күпмелер ваҡыт үткәс, улын юллап, Мәккәгә Зәйеттең атаһы килеп етә лә, Мөхәммәткә улы өсөн бик күп аҡса тәҡдим итә. Мөхәммәт Зәйетте саҡырып алып, өс шаһит алдында рәсми рәүештә ҡоллоҡтан азат итә, ә унының өйөнә ҡайтыу-ҡайтмау мәсьәләһен үҙ иркенә ҡуя - әгәр ҡайтырға теләһә, ҡайта, Мөхәммәт унының өсөн атаһынан аҡса алырға теләмәй. Тик Зәйет үҙенең Мөхәммәт менән ҡалыу теләген белдерә. Мөхәммәт шунда уҡ уны рәсми рәүештә уллыҡҡа ала.

Ғәли менән Зәйетте Мөхәммәт бала саҡтан уҡ донъя ҡуйған улдары кеүек күрә. Әйтергә кәрәк, Мөхәммәттең был ҡарарҙарына Хәҙисә бөтөнләй ҡаршы булмай.

**(Дауамы бар).**

*ЕТМЕШ ҺӨНӘРЛЕ...*

# БАҘЫЯН МЕНӘН ҺӨЙӘН...

## йәки, Боронғо ағас ҡырыу станоктарыбыҙ ҡайҙа булған?

**Хөснә өләсәйемдең: "Самауырҙар ҡайнай, сәйҙәре бешә баҙыян сәйнүктәрҙең эсендә", - тип йырлағанын күп тапҡырҙар ишеткәнем булһа ла, уның эстәлеге тураһында уйланғаным булмаған икән. Ҡолаҡҡа килеп ингән ят һүҙ - баҙыян сәйнүктең ниндәй икәнен белмәй инем. Әле килеп, Бөрйән районы Яуымбай ауылы ир-уҙаманы, ағас һырлау, ағас эшкәртеү оҫтаһы Рәил Мирза улы ЛАТИПОВтан "баҙыян" тигән һүҙҙе ишеттем һәм үҙем өсөн уның мәғәнәһен асыҡланым. Рәил Мирза улы ул көндө Өфөләге "Өфө-ладъя" халыҡ һөнәрселәре күргәҙмәһендә ҡатнаша ине. Әңгәмәбеҙ танышыуҙан башланды.**



**➔ Рәил Мирза улы, был кәсеп менән ҡасандан алып шөғөлләнәһегеҙ?**

- Мин оҙаҡ йылдар Яуымбай урта мәктәбендә рәсем, һыҙма, хеҙмәт дәрестәрен алып барҙым. Әле, илдә иҡтисади көрсөк башланып, мәктәптәр ябылғас, эшһеҙ ҡалдым. Мәктәптә эшләгән сағымда халҡыбыҙҙың боронғо кәсептәрен тергеҙеү маҡсатында үҙем төҙөгән программа менән түңәрәктәр алып барҙым. Әлеге көндә ете уҡыусым ошо йүнәлештә уңышлы ғына эшләп йөрөй. Уларҙың икеһе - үҙҙәре лә ошо һөнәрҙән белем биреүсе уҡытыусы булып етеште, бынан тыш, өс улымдың өсөһө лә ошо өлкәне һайланы. Учалы ҡалаһында уҡып йөрөүсе бер уҡыусымдың, ҡыҙ кешенең ағасты һырлап, хохлома рәүешендә эшләгән һүрәтен хатта Учалылағы музейға ҡуйҙылар. Әлбиттә, хаҡын да түләнеләр. Шулай, әлеге көндә бер ҡайҙа ла эшләмәгәс, өйҙәге эштәрҙән, ваҡ мәшәҡәттәрҙән бушаған арала күңел тартҡан шөғөлөмә ваҡыт бүләм. Әлбиттә, оҫтахана кеүек киң уңайлыҡтарым менән маҡтана алмайым, барыһы ла өй шарттарында ғына атҡарыла.

Нимәләр эшләйемме? Ошо ерлеккә бәйле тауарҙар етештерәм мин: Бөрйәнемдең балын һалыу өсөн һөйәндән, йәғни кипкән йүкә ағасынан ҡапҡаслы батмандар ҡырам. Станокта һауытты ҡырам да, һаҡ ҡына итеп уға халҡыбыҙҙың милли биҙәктәрен, айыу, бал ҡорто һүрәттәрен, "башҡорт балы" тигән яҙыу һалам. Һүрәттәр кипкәс, саң ултыртмай ғына, әлиф йә лак һөртәм. Был айырыуса иғтибар, бөхтәлек талап иткән эш. Яңы ҡырылған ағасҡа майлы ҡулдарың менән тотондоңмо, эҙе ҡала. Беҙҙең халыҡ ҡыҙыҡ бит - тотоп ҡарамайынса, ышанмай. Ҡайһы берҙә, эш өҫтөндә берәй танышың килеп инә лә, иҫе китеп, эшләнеп бөтмәгән һауыттарға ташлана. "Теймә, теймә!" тип әйтеп өлгөрәһең дә бит, ул барыбер: "Ҡул таҙа ул минең", - ти. Таҙалыҡҡа таҙалыр ҙа ул, әммә ағаста тиреләге төктәрҙән бүленеп сыҡҡан май эҙе ҡала... Лак һөртөр алдынан бүлмәңдә туҙан күтәрҙеңме - эшеңдең сифаты кәмей, тигән һүҙ. Боронғо оҫталар, әгәр улар диңгеҙгә яҡын йәшәгән икән, һүрәттәрен даръя эсендә лаклаған. Беҙҙең Бөрйәндә ундай мөмкинлек "самалы", үҙегеҙ беләһегеҙ. Шулай ҙа, заказ биреүсенең талаптарына тап килерлек, итальян оҫталары эштәренән кәм күренмәҫлек итеп бал батманы, ҡымыҙ өсөн семәрле ижау, тоҙ, шәкәр һала торған баҙыян һауыттар эшләргә тырышып ятҡан көнөбөҙ. Ағас һауыттарҙы боронғолар баҙыян, тип атаған.

**➔ Һеҙ был һауыттарҙы ниндәй сығанаҡтарҙан өйрәнеп тергеҙәһегеҙ?**

- Бәхеткә күрә, беҙҙең эргә-тирәләге ауылдарҙа XVIII быуат урталарында йәшәгән оҫталар эшләп ҡалдырған һауыттар һаҡланған. Шуларға ҡарап тергеҙәм. Әлбиттә, ҡайһы бер үҙгәрештәр ҙә инеп китәлер инде. Шунһыҙ булмай. Әйтәйек, бер танышым: "Ә ниңә тирмә формаһында һауыт эшләп ҡарамайһың?" - тип һорағайны, ул идеяны күңелемдә йөрөтөп-йөрөтөп, тирмә формаһындағы баҙыян һауыт килтереп тә сығарҙым. Хәҙер ул да ҙур ҡыҙыҡһыныу менән файҙалана. Һауыттарҙың тышына боронғо тамғаларҙы ла һуғам. Һәр ырыуҙың, һәр араның үҙ тамғаһы булған, улар быуындан-быуынға тапшырыла килгән. Бөгөнгө фәнгә улар билдәле, уларҙы эҙләп табыу ҙа ҡыйынлыҡ тыуҙырмай. Шунлыҡтан, заказ биреүсенең ырыуын, араһын белеп алып, уның һауытына әлеге әйткән тамғаны ла һуғыу бер ни тормай. Был тамғалар көнкүреш әйберҙәре араһына килеп индеме, тимәк, заманға ла үтеп инде, тигән һүҙ. Уларҙы балалар китаптан өйрәнһә, хәтерендә ҡалдырмаҫҡа ла мөмкин. Ә инде, өҫтәлдә тоҙ, шәкәр, бал һауыты булып хеҙмәт иткән һауыт тышында көн дә күрһә, хәтеренә ныҡ итеп киртеп ҡуя. Әйткәндәй, баҙыян һауытта тоҙ ҙа, шәкәр ҙә ҡатмай. Быяла, фарфор-фаянс һауыттарҙа улар таш булып ҡата ла ҡуя бит. Ағас һауыт тоҙҙо дымланыуҙан һаҡлай. Шул яғы менән баҙыян һауыттар практик әһәмиәткә лә эйә.

**➔ Борон башҡорттарҙа хәҙерге станоктар булғанмы, әллә батмандар ҡул менән ырып эшләнгәнме?**

- Ағасты ҡыра торған станоктар элек тә булған. Боронғо, аяҡ менән баҫып, тәгәрмәсен быуын ярҙамында әйләндерә торған теген машинаһын күргәнегеҙ барҙыр. Шул рәүешле ағас ҡырыу станоктарын боронғолар үҙҙәре эшләп алыр булған. Мин бәләкәй саҡта ундай станоктар беҙҙең ауылда ла булған, тиҙәр. Техника, фән үҫешеп, ағас ҡорамалдарҙың көнкүрештә кәрәге ҡалмағас, улар менән ҡыҙыҡһыныусы кеше лә юҡ. Мин ҡыҙыҡһынһам да, минең малайҙар ҡыҙыҡһынмаһа, мәҫәлән, ул өйҙә кәрәкмәй ултыра-ултыра ла, соланға, унан тышҡа сығарыла. Ҡояш, ямғыр аҫтына эләктеме, ағас йәйлап юҡҡа сыға. Беҙҙең яҡтарҙа ошондай һуңғы станок Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Вәлитов Хәсән апа мәрхүмдә булған, тиҙәр...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Беҙ бөгөн баҙыян һауыт, һөйән, боронғо ағас ҡырыу станогы тураһында һәм Бөрйән районы Яуымбай ауылында ғәжәйеп оҫта мөғәллим йәшәүен белдек. Оҫталар һәр ваҡыт камиллашыу юлында. Ғөмүмән, камиллыҡҡа ынтылмаған кеше бармы икән? Рәил Мирза улы ла: "Был күргәҙмәгә килеп, үҙем өсөн әллә күпме файҙалы мәғлүмәт алдым. Ҡайһы бер оҫталарҙан эштәремә ҡарата әйтелгән тәнҡит һүҙҙәрен дә ишеттем, улары айырыуса файҙалы", - тигәйне. Әгәр кеше үҙгәрештәргә яраҡлашмай, хаталанмай, билдәһеҙлек алдында ҡаушауын еңеп, батырлыҡтар ҡылмай, яңылыҡҡа ынтылмай икән, беҙ һаман да мәмерйәләрҙә йәшәгән булыр инек. Рәил Мирза улы Латипов һымаҡ эшһеҙ ҡалыусылар бик күп икәнлеге һәр кемгә билдәле. Иртәнге көн шул тиклем билдәһеҙ заманда йәшәйбеҙ. Һәм ошо үҙгәрештәр килтереп һуҡҡан саҡта, ең һыҙғанып, яңы эшкә тотона алған кешеләргә һоҡланмау мөмкинме һуң!**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**әңгәмәләште.**

✓ ***Башҡорт уҙаманы буҫтауҙан ҡыҙыл ҡалпаҡ, күк камзул, күн итек кейгән, ҡылыс таҡҡан. Эшләү техникаһы - алтын ялатылған, биҙәлгән фарфор, тиелгән. Антропологик тибына килгәндә, йөҙ бик таныш кеүек тойола.***



*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

**Бынан бик күп йылдар әүәл оло әһәмиәткә эйә һәм дәүләт ҡарамағындағы музей фондтарында мәңге һаҡланырға тейеш тип табылған әйберҙәр тураһында бөгөн һүҙ. Рәсәйҙең төрлө музейҙарындағы әллә күпме экспонаттар араһында XIX быуатҡа ҡараған башҡорт ир-егетен һынландырған скульптураларҙы ла осратырға була. Шуларҙың ҡайһы берәүҙәренә айырым туҡталып китәйек.**

# БЫЛ ҺЫНДАР НИ ҺӨЙЛӘЙ?



"Башҡорт".



"Башҡорт".

Мәскәү ҡалаһындағы Керамика дәүләт музейының "Рәсәй халыҡтары" исемле балсыҡ әйберҙәр коллекцияһында ҙур булмаған "Башҡорт" скульптураһы һаҡлана. 25 сантиметр бейеклектәге төҫлө һын 1880 йылдарҙа Мәскәүҙән 90 саҡрым алыҫлыҡтағы Вербилки ҡасабаһындағы фарфор заводында эшләнгән. Инглиз сауҙагәре Гарднерҙың фарфор заводы шул ваҡытта уҡ һауыт-һабаһы менән бар донъяға билдәле була. Заводта Рәсәйҙең тиҫтәләгән башҡа халыҡтарының да һындары эшләнгән. Башҡорт уҙаманы буҫтауҙан ҡыҙыл ҡалпаҡ, күк камзул, күн итек кейгән, ҡылыс таҡҡан. Эшләү техникаһы - алтын ялатылған, биҙәлгән фарфор, тиелгән. Антропологик тибына килгәндә, йөҙ бик таныш кеүек тойола. Ул рәссам П. Захаровтың әлеге мәлдә күсермәһе киң ҡулланылған "Башҡорттар" картинаһындағы ир-егеткә оҡшаған. Ул рәсем тәүге тапҡыр Рәсәй этнографы, сығышы буйынса немец Г. Паулиҙың "Рәсәй халыҡтары" тип аталған төҫлө иллюстрациялы хеҙмәтендә 1862 йылда Санкт-Петербургта баҫылып сыға. Гарднер заводы рәссамдары тап ошо картинаны ҡулланып эш итеүе лә бар.

Тағы бер "Башҡорт" статуэткаһы иғтибарға лайыҡ. XIX быуат аҙағында - XX быуат башында Рәсәйҙең фарфор-фаянс сәнәғәте өлкәһендәге иң мәртәбәле ойошмаларҙың береһе Тверь губернаһы Конаково заводында ла һауыт-һабанан тыш, ҙур булмаған скульптуралар етештергәндәр. Был бәләкәй һындың төп нөсхәһенең һаҡланыуһаҡланмауын асыҡлайһы бар. Ә бына 1990 йылдарҙа эшләнгән күсермәһен (сәнғәттә ҡабатлау тип атала) интернет селтәре аша бер әҙәм һатыуға ҡуйған. Һындың бейеклеге 28 сантимер. Башҡорт ир-егете шулай уҡ XIX быуатҡа хас тула ҡалпаҡ, камзул кейгән. Тик был осраҡта кейеме һоро төҫтә сағылдырылған.



"Башҡорт. Ҡапыл иҫкән ел".



"Йылҡы көтөүсе башҡорт".

XIX быуатта 38 йыл ғүмере эсендә билдәле рәссам булып танылған, иҫ киткес матур, зауыҡлы бихисап сәнғәт өлгәләре ҡалдырған Евгений Александрович Лансереның эштәре араһында кәмендә өс һыбайлы башҡорт скульптураһы бар. Тамбов губернаһы Моршанск ҡалаһында француз ғаиләһендә тыуып үҫкән Евгений Лансере Петербург университетының юридик факультутында белем ала. Йәштән үҙаллы әүәләп әйберҙәр яһау менән шөғөлләнә. Сәнғәттең был йүнәлеше менән айырыуса ҡыҙыҡһына. Скульпторҙарҙың оҫтаханаларында йыш була. 1867, 1876 йылдарҙа Парижда бронзанан (аҡ ҡурғаш ҡушылған баҡыр иретмәһе) ҡойоп әйберҙәр яһауҙы өйрәнә һәм музейҙарҙа һаҡланған сәнғәт өлгөләре менән таныша. Йыл һайын Урта һәм Көньяҡ Рәсәй, Украина, Кавказ, Ҡырғыҙстан, Ҡырым һәм Башҡортостан буйлап сәйәхәт итә. Лансереның бар эштәре үҙенә генә хас милли-тарихи, этнографик колорит менән башҡарылған. Махсус белеме булмаһа ла, натураны, һындарҙы шул тиклем тәрән тойомлаған тәбиғи һәләте булған уның. Евгений Лансере сюжетлы пластик миниатюра оҫтаһы булараҡ, бөтә донъя күргәҙмәләрендә - Лондонда, Венала, Парижда һәм башҡа ҡалаларҙа танылыу яулай. Тау, дала халыҡтарының аттарын да, үҙҙәрен дә бик килешле һынландыра. Уның эштәре, әйтерһең дә, туҡтаған бер мәл, ысынбарлыҡ. "Башҡорт. Ҡапыл иҫкән ел", "Ҡамсы тотҡан башҡорт", "Йылҡы көтөүсе башҡорт" эштәре нескә һәм нәфис башҡарылған. Милли кейемдәге ир-егет бына-бына хәрәкәтен дауам итер кеүек тойола. Башҡорт аттарын да, башҡа төбәктәрҙәкенән айырмалы рәүештә, нисек бар, шулай һынландырған оҫта. Кәүҙәгә ҡайтыш, талымһыҙ, арығыраҡ улар, барыһы ла йүгәнләнгән. Скульптураларҙың бейеклеге 22-26 см. "Башҡорт. Ҡапыл иҫкән ел" скульптураһында ҡолаҡсын, камзул кейгән әйәр өҫтөндәге ир-егетте күрәбеҙ. Ул ҡоралланған - ҡылыс таҡҡан, һырланған ҡалъяһында йәйәһе бар. "Ҡамсы тотҡан башҡорт" эшендә лә һыбайлы ир-егет күрһәтелгән. Кинәт кенә атын туҡтатып, ҡамсыһы менән киҙәнгән ул. Лансереның өсөнсө "Йылҡы көтөүсе башҡорт" статуэткаһында һыбайлы ҡулына оҙон арҡан тотҡан. Рәссамдың бронзанан ҡойоп, һырлап яһалған әйберҙәренең күсермәләре XIX - XX быуаттарҙа алдынғы заводтарҙа, Ф. Шопен, Н. Штанге, А. Моран, К. Бертондың шәхси оҫтаханаларында һәм Уралдағы суйын иретеү заводтарында күпләп эшләнгән.



"Ҡамсы тотҡан башҡорт".

Тышҡы ҡиәфәттән тыш, милли характер, хатта этник психологияны өйрәнеү йәһәтенән был сәнғәт әҫәрҙәренең мәҙәни һәм тарихи әһәмиәте, һис шикһеҙ, бөгөнгө көндә лә актуаль булып ҡала.

**Зилә НИҒМӘТУЛЛИНА.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

### Ҡыпсаҡтар

Һары ҡыпсаҡтарҙың хакимлыҡ осоро хаҡында далалар ҡургандарындағы таш һындар һөйләй. Улар "таш ҡатындар" тип аталһа ла, асылда, ҡыпсаҡтарҙың яу батырҙарын һынландырған. Ғәрәп һәм көнбайыш сығанаҡтары иҫбатлауынса, ҡыпсаҡтар (ҡомандар-һары ҡыпсаҡтар-бәшәнәктәр) мәрхүмдәрҙе ҡургандарҙа ерләгән. XII-XIV быуаттарҙа көньяҡ урыҫ далаларын берҙән-бер халыҡ - һары ҡыпсаҡтар биләгән.

Ҡыпсаҡ миграцияһы Волга-Урал төбәгендә, Башҡортостанда төрки халыҡтар миграцияһының иң ҡеүәтлеһе һанала, ул ике быуат буйына (XIII- XIV) бара.

Ҡыпсаҡтарҙың ырыу-ҡәбилә составы хаҡында ғәрәп ғалимы Әхмәт әт Динден (1235-1318) һәм әд Димашкиҙың (1301-1349) яҙмаларында тәфсирләп әйтелә. Унда ҡыпсаҡтарҙың көнсығыш олоҫына 16 этнокомпоненттың инеүе хаҡында мәғлүмәт бар. Уларҙың 8 ҡәбиләһе төп ҡәбиләләр, ҡалған 8 ҡәбиләһе ваҡ берәмек булып һаналған. Улар араһында боронғо төрөк, Урта Азия сығышлы тоҡсабаны айырып әйтергә була. Артабан имәктәрҙең эре ҡәбиләһе ҡимаҡтар иҫәпләнә. Шул уҡ ваҡытта XI быуаттың уртаһына тиклем боронғо башҡорт теле, Мәхмүт Ҡашғари билдәләүе буйынса, ҡимаҡ теленә яҡын торған. XI быуатҡа ҡыпсаҡтар ҡимаҡтар араһында айырыуса үҫеш ала һәм "ҡимаҡ" атамаһы яйлап-яйлап "ҡыпсаҡ" атамаһына әүерелә. Мәхмүт Ҡашғари ҡыпсаҡ һәм имәк ҡәбиләләре менән бер рәттән, ике боронғо башҡорт ҡәбиләһен атай: базанак (бәшәнәк), баджна һәм башҡорт ҡәбиләләре. Был ҡәбиләләр һәм ҡыпсаҡтар киләсәктә башҡорт халҡын тәшкил итә. Шулай уҡ Волга түбәнендә Бошман (Баһман) хан етәкселегендәге баш бирмәҫ ҡыпсаҡ ҡәбиләләре лә башҡорттарға ҡушыла. Уларҙың ихтилалы ҙур көстәр тарафынан аяуһыҙ баҫтырыла, иҫән ҡалған ҡыпсаҡтар Уралға ҡасып, башҡорттарға барып ҡушыла. Был ваҡиға Рәшит әт Динден яҙмаларында сағылыш таба. Бошман ҡыпсаҡтарҙың Уралға күсеүе башҡорт халҡы составында яңы этнонимды барлыҡҡа килтерә.

Төньяҡ-көнбайышта ҡыпсаҡтар Волга буйы һәм Урал алды халыҡтары менән этноменҙәни һәм сәйәси бәйләнешкә инә. Кама буйында төйәкләнергә төбәктең сауҙа өсөн уңайлы булыуы йәлеп иткән. Көнбайышҡа күсенгән саҡта ҡыпсаҡтар үҙҙәренең боронғо ватанын онотмаған. "Бөрйәндәр хандар заманында" риүәйәтендә көньяҡ Уралға килгән ҡыпсаҡтар хаҡында һүҙ бара, был хаҡта Р.Ғ. Кузеев яҙып үтә. Ул йылан ырыуы башҡорттарын боронғо төрки ҡәбиләһенең варисҭары тип иҫәплләй, йыландар көнбайышҡа күсенгән сағында ҡыпсаҡтарҙың составына инә. Ҡыпсаҡ ҡәбиләһенең аҡ ҡыпсаҡ, һары ҡыпсаҡ, һыуын ҡыпсаҡ, бошмаҫ ҡыпсаҡ, ҡара ҡыпсаҡ, сәңкем ҡыпсаҡ, кирәй ҡыпсаҡ ырыуҙары Башҡортостандың көньяғында иң таралғаны булып иҫәпләнә.

Көнбайыш Себер һәм көнсығыш Европа уйһыулыҡтарында урынлашҡан Ҡыпсаҡ дәүләте (ҡыпсаҡ-ҡомандар) Сығатайға (Төркөстан) ҡарағанда тотороҡлораҡ һаналған. Мәңге ярһыу урыҫтарҙы буйһондороп тотоу, Польша, Византия менән көрәш был халыҡтың боронғо яугир рухын нығытҡан. Ҡыпсаҡ дәүләттәре баштта өләшләтә Сыңғыҙхандың улы Джучи (Юлсы), һуңынан Батый тарафынан буйһондорола.

**(Дауамы бар).**

**✓ *Ғөмүмән, "әҙәбиәттә төп көс", тигән төшөнсә менән килешеп етмәйем. Донъяны төрлө ағастар биҙәгән кеүек, әҙәбиәттә лә "имәндәр", "ҡарағайҙар", "ҡайындар", "йүкәләр"... үҫә. Берәүҙәренең ғүмере оҙон, икенселәренең - ҡыҫҡа.***

# ЗАМАНДАН АЛДА АТЛАУ...

## үҙ дәүерендә хәҡиҡәтте яҡлау ул

**Башҡорт әҙәбиәтендә ижады менән уҡыусыларҙы арбаған яҙыусы-шағирҙар хаҡында һүҙ барғанда күптәр иң беренселәрҙән булып Салауат Әбүҙәрҙең исемен телгә ала. Был арттырыу ҙа, шаштырыу ҙа түгел. Ә ябай тәбиғилек кенә. Сөнки шағирҙың бар ижады ла ана шул ябайлыҡҡа, ихласлыҡҡа ҡоролған. "Сөнки" тимен тағы ла, ул үҙе лә шиғырҙары кеүек үк - эскерһеҙ, әммә тәрән, бер ҡатлы, һиҙгер, баҫалҡы, көслө рухлы. Был кеше бер ваҡытта ла үҙен "Мин - шағир" тип килеп танытмаясаҡ, бер ерҙә лә иғтибар үҙәгендә булырға ынтылмаясаҡ, дан артынан ҡыумаясаҡ, китап һаны менән маҡтанмаясаҡ. Хатта әлеге һөйләшеүгә лә беҙ уны көскә күндерҙек. Донъяла, шул иҫәптән әҙәбиәт сәхнәһендә лә, әрһеҙлек һәм йылтырлыҡ хөкөм һөргәндә, ошондай кешеләрҙе осратыу һәм аралашыу бер таҙа һулыш кеүек булып китә. Ысын.**

**Салауат, ниндәйҙер ижади процесс башланған һәм уның башланыуына сәбәпсе булған ваҡиғалар, ғәҙәттә, кеше яҙмышында ҙур роль уйнай. Нисек уйлайһығыҙ, һеҙҙең ижадҡа килгән осор менән бөгөнгө әҙәбиәт араһындағы айырма ҙурмы? Һәм ул айырмалыҡты нисек баһалайһығыҙ?**

- Был һорауың менән, Миләүшә, мине артҡа боролоп ҡарарға мәжбүр итәһең. Үкенескә ҡаршы, беҙ әләгә-йығыла ҡайҙалыр ашығабыҙ, тормоштан нимәләр алырға ынтылабыҙ: кешенең нәфсеһе ҙур ул, быныһы булһа, тегенеһе етмәй... Ә артҡа, үткәндәренә боролоп ҡарарға, ҡылған гонаһтарың, хаталарың тураһында уйлап ҡарарға форсат юҡ. Туҡталып, уйҙа ғына булһа ла үткәндәрҙә "йөшөп" ҡараһаҡ, бәлки, алдағы ғүмер юлы бер аҙ яҡтыра төшөр ине. Тәүге шиғырым 4-се класта уҡыған саҡта "Башҡортостан пионеры" гәзитендә баҫылып сыҡты. Ижад шишмәһе башындағы беренсе тамсы ине ул. Тамсынан күл йыйыла, тигәндәй, шунан алып "тамсылар" тыпылдап ҡына торҙо. Күл үк булмаһа ла, күләүек хасил булды, шикелле. Мәғрүр ҡарағайҙарҙың ғүмер башында тубырсыҡтар ятҡан кеүек, минең дә ижадым ана шул тәүге шиғырҙарҙан бөрөләнгән. Шуға ла мин уларҙы, ижадҡа килеү осоро, тип атар инем. Асыҡлабыраҡ әйткәндә, мәктәптә уҡыған йылдарҙа әҙәбиәт менән мауығыу осоро был. Ул саҡта башҡорт, татар, урыҫ, сит ил яҙыусыларының (исемдәрен атап тормайым, күпкә китер) әҫәрҙәрен кинәнеп уҡый торғайным.

Һинең һорауыңа килгәндә, тормош туҡтап ҡалһа ғына айырма булмаҫ ине. Аллаға шөкөр, ҡояш нурын һибә, уның тирәләй ер шары әйләнә. Һәр минут, сәғәт, көн... ниндәй ҙә булһа үҙгәреш алып килә. Быуаттарға һуҙылған башҡорт әҙәбиәте лә заман йоғонтоһонан азат түгел. Әйтәйек, төрлө сикләүҙәр, тыйыуҙар менән ҡоршалған совет дәүерендәге әҙәбиәтте бөгөнгө менән сағыштырыу ахмаҡлыҡ булыр ине. Бөгөн һүҙ азатлығы: нимә теләйһең, шуны яҙ. Хәҙерге яҙыусыларҙың, шағирҙарҙың, драматургтарҙың яҙғандары совет осоронда аҡҡа төшкән булһа, күпме баштар китер ине икән!..

Әҙипте заман тыуҙыра, ләкин ул замандан алдараҡ атларға тейеш, тибеҙ. Был һүҙҙәрҙе мин шулайыраҡ аңлайым: алдараҡ атлау өсөн яҙыусы һәр саҡ хәҡиҡәт яҡлы булырға тейеш. Хәҡиҡәтте яҡлап сыҡҡан Аҡмулла, Бабич, Рәми үҙҙәрен аямай дәүерҙең алғы сафына баҫҡан, илем, халҡым, телем тип янған. Бөгөн нисек һуң? Еребеҙ талана, байлығыбыҙ ситкә оса... ләкин өндәшмәйбеҙ. Әлбиттә, унда-бында "мыжыу" тауыштары ишетелеп ҡала, шунан ары киткән юҡ әле. Халҡының яҙмышы өсөн ут йотоп йәшәгәндәр юҡ, тип әйтмәйем, иң үкенеслеһе, уларҙың һүҙҙәренә ҡолаҡ һалыусылар һирәк. Был - милли фажиғә! Бер аҙ ситкә китеберәк булһа ла, һорауыңа яуап бирҙем, шикелле. Нимә генә тимәк тә, әҙәбиәттә заман сағыла, заман әҙәбиәтте тыуҙыра. Әйткәнемсә, замандан алда атлау - үҙ дәүерендә хәҡиҡәтте яҡлау ул.



**Бөгөнгө йәшегеҙ, тәжрибәгеҙ, ижади багажығыҙ менән үҙегеҙҙе башҡорт әҙәбиәтендә төп көстәрҙең береһе итеп тояһығыҙмы?**

- Юҡ! Минең әҫәрҙәремдең көсөн уҡыусы тойһа, шул бәхет. Тимәк, уларға аҙ генә булһа ла рухи көс бирә алғанмын. Ғөмүмән, "әҙәбиәттә төп көс", тигән төшөнсә менән килешеп етмәйем. Донъяны төрлө ағастар биҙәгән кеүек, әҙәбиәттә лә "имәндәр", "ҡарағайҙар", "ҡайындар", "йүкәләр"... үҫә. Һәр береһенең - үҙ бурысы. Берәүҙәренең ғүмере оҙон, икенселәренең - ҡыҫҡа. Тиҫтәләрсә китап сығарғандар ҙа, бер китап менән халыҡ хәтерендә ҡалғандар ҙа бар. Быны, талант эйәләре Рәйес Түләк, Ҡол-Дәүләт йәшләй генә арабыҙҙан китте. Уларҙың ижады, күләм йәһәтенән ҙур булмаһа ла, әҙәбиәтебеҙҙә бөгөн дә төп көс. Ә Рәшит Назаров! Әгәр ул урыҫ булһа, исемен бар донъяға яңғыратырҙар ине. Ни өсөн урыҫ булһа, тим, сөнки әҙ һанлы милләттәргә донъя әҙәбиәтенә түгел, Рәсәй киңлектәренә сығыу мөмкинлеге сикле. Миҫал өсөн генә әйтәм, Шолоховтың "Тымыҡ Дон"ы бар илдәргә тиерлек таралған. Ошондай әҫәрҙәр башҡорт әҙәбиәтендә юҡмы ни? Һәҙиә Дәүләтшинаның "Ырғыҙ", Яныбай Хамматовтың "Төньяҡ амурҙары" романдарын ғына алайыҡ. Был әҫәрҙәр буйынса һоҡланғыс фильмдар төшөрөп булыр ине... Әҙәбиәт "арба"һын "төп көс"тәр генә тарта алмай, әллә ни көсәнмәһә лә, егелеп барғандар ҙа кәрәк уға. Дөйөм көс кенә ул ауыр "арба"ны хәрәкәткә килтерә. Килешәм, ҙур таланттар бар, уныһы - Аллаһы Тәғәләнең бүләге. Башҡалар уларҙың кимәленә ынтылырға, һәр хәлдә, яуаплылыҡ тойоп ижад итергә тейештәр.

**Кеше үҙ ғүмерен ниндәйҙер буленештәрҙә ҡабул итә. "Бәхетле-бәхетһеҙ", "Уңышлы-уңышһыҙ" тип тә атай уларҙы. Һеҙҙең иң уңышлы мәлегеҙ ҡайһы осор?**

- Уңыштар уңышһыҙлыҡтар аша яулана. Был яҙғаным килеп сыҡманы, тип күңел төшөнкөлөгөнә бирелергә ярамай. Ышҡыла-ышҡыла таш шымара, эшләй-эшләй кеше оҫтара. Әлбиттә, һәр кемгә лә яҙыу-һыҙыу һәләте бирелмәгән, ләкин шул ҡөҙрәткә эйә кеше күп эшләргә тейеш, минеңсә. Бында томтом китап сығарыуҙы күҙ уңында тотмайым, халыҡҡа иң-иңдәрен генә тәҡдим итергә кәрәк. Башҡорт дәүләт университетында биш йыл буйына ижад иткән бер дипломат шиғыр-поэмаларым юҡҡа сыҡты. Йәйге ялға ҡайтып киткәндә курсташ ҡыҙҙар, беҙ Өфөлә булабыҙ, бында эшләйбеҙ, тигәс, ошо ҡәҙерле дипломатты уларҙың бүлмәһенә ҡалдырып торғайным. Ялдан килгәйнем, шаҡ ҡаттым: бүлмәләрҙең ишеге шар асыҡ - ятаҡта ремонт эшләгәндәр. Ҡыҙҙар ҙа ауылдарына ҡайтып киткән. Бүлмәләренә инеп ҡараһам, дипломат бысаҡ менән телеп асылған, эсендә бер нәмә лә юҡ. Ремонт эшләүселәр сүплеккә сығарып түккәндер инде. Бер ни тиклем ваҡыт үткәс, шул яҙмаларҙан ҡалған "Йөрәк" исемле бер шиғырҙы килтереп бирҙеләр. Бер мөйөштә ятҡан булған. Был юғалтыу уңышһыҙлыҡ булһа ла, ул яҙмалар мине күп нәмәгә өйрәткәндер, тим. Үткән юлымда ижади уңыштарым байтаҡ ҡына булды. Шиғри китаптарҙан тыш, пьесаларым буйынса спектаклдәр ҡуйылды. Шулай ҙа быйыл "емеш"тәр мулыраҡ шикелле. Иң беренсе ҡыуанысым - улым тыуҙы. Мәсеткә барып, уға Арыҫлан тип исем ҡыҫҡырттыҡ. Шулай итеп, дүрт балаға атай булдым. "Ғәмәл дәфтәре" тигән шиғырҙар китабым баҫылып сыҡты, Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театрында талантлы режиссер Вадим Ғилманов "Йәшлеккә ҡайтыу" пьесаһы буйынса спектакль ҡуйҙы. Үкенес, үҙем бара алманым, ләкин, әйтеүҙәренә ҡарағанда, бик уңышлы килеп сыҡҡан. Халыҡ эркелеп йөрөй, тиҙәр. Быйыл миңә 50 йәш тулды. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы "Ал да нур сәс халҡыңа" миҙалы менән бүләкләне. Был ҙур бүләк йөрәккә оло яуаплылыҡ һала.

Ғафури районының Красноусол ҡасабаһында, Имәндәш ауылында юбилей саралары гөрләп үтте. Районның Жәлил Кейекбаев исемендәге премияһын тапшырҙылар. Яҡташтарыма рәхмәтем ҙур! Быйыл тиргән "емеш"тәрем бына шулар. Аллаһы Тәғәлә һаулыҡ һәм ғүмер бирһә, киләсәктә лә ижади ҡомар һүрелмәҫ тип өмөтләнәм. Ҡояш тирәләй 50 тапҡыр урап сыҡһам да, ул ара күҙ асып-йомған мәл һымаҡ ҡына икән. Шуныһына ҡыуанам: йән рәхәте биргән ижадтан айырылманым. Байтаҡ шиғыр-поэмалар яҙылды, Сибай драма театры ғына өс пьесамды сәхнәләштерҙе, шулай уҡ әҫәрҙәрем Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт драма театрында, Ырымбур өлкәһендә, Татарстанда, үҙебеҙҙең халыҡ театрҙарында ҡуйылды. Тамашасылар менән осрашҡан саҡта уларҙың йылы һүҙҙәре күңелгә ҡанат ҡуя. Шиғырҙарым хаҡында Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев, Татарстандың халыҡ шағиры Роберт Миңнуллин мәҡәлә яҙып сыҡты. Уларҙың һүҙе минең өсөн бөтә премияларҙан да юғары.

**Һәр әҫәрҙең үҙәгендә мөхәббәт булырға тейеш, тиҙәр. Килешәһегеҙме?**

- Әҫәрҙә генә түгел, ғөмүмән, тормошта мөхәббәт булырға тейеш. Тормошта мөхәббәт булмаһа, әҫәрҙәрҙең үҙәген үлтереш, ҡан ҡойош, яуызлыҡ ялмап ала. Телевизорҙан нимә генә күрһәтмәйҙәр: шуларҙы ҡарап үҫкәндәрҙең, үлтереш кеүек күренештәрҙе күреп, күңеле ҡата, кеше үлтерәү, талау ғәҙәти хәл һымаҡ була башлай. Яман ҡылыҡҡа бәндә тиҙ өйрәнә, күңелендә изгелек, мәрхәмәтлелек тойғолары юҡҡа сыға. Был - иң аяныслы фажиғә! Илебеҙ баҙар юлынан киткәс, матди байлыҡ өҫкә ҡалҡты, рухиәт шул баҙар ҡапҡаһы төбөндә ҡулын һуҙып ултыра. Саманан тыш байлыҡ туплаған етәкселәр халыҡтың йәшәү кимәле тураһында уйлап та бирмәй, уларҙың иркә үҫкән балалары етәксе урындарын биләй, депутат булып һайлана... Күңелендә рухи хазиналар булмаған ул ҡатламдан нимә көтәһең инде?

Ярлы халыҡ рухлы тип әйтмәйем, улар вайымһыҙлыҡҡа бирелеп, күптән ҡул һелтәгән. Бер аҡыл эйәһе әйткән бит әле: "Енәйәтсенән түгел, вайымһыҙҙарҙан ҡурҡығыҙ, уларҙың өнһөҙ килешеүе арҡаһында ерҙә енәйәттәр ҡылына". "Донъяны мөхәббәт ҡотҡарыр", тип тә әйткәндәр. Мөхәббәт - ул ике енес араһындағы ғына мөнәсәбәт түгел, ҡоласы киң уның. Йөрәгендә донъяға килтергән атай-әсәһенә, туғандарына, тәпәй баҫҡан төйәгенә, иленә, теленә, халҡына мөхәббәт йөрөткән кеше бер нисек тә яуызлыҡ ҡыла алмай. Ике аяғында йөрөгән йән эйәһен кеше иткән ошо изге төшөнсәләр күңелдәрҙән юйыла бара. Киләһе быуын ниндәй тормошта йәшәр - шомландырып ҡуя. Шулай ҙа өмөт бар: мөхәббәт - Аллаһы Тәғәлә бүләге. Тимәк, уны юҡҡа сығарырлыҡ башҡа көс юҡ. Ҡыҫҡаһы, киләсәк быуын мөхәббәтле һәм бәхетле булһын!

**Миләүшә ХӘБИЛОВА**
**әңгәмәләште.**

*✓ Хәҙер ҡалалағы башҡорт мәҙәниәте тигеҙһеҙ үҫешә - уның юғары һәм артыҡ талапсан булмаған кешеләрҙе ҡәнәғәтләндерерлек өлгөләре бар, ә уртаса - бер үк ваҡытта киң ҡатламға аңлайышлы һәм сифатлы - проекттар күп түгел.*



**Күптән түгел "Бәйләнештә" селтәрендә Башҡортостан юлдаш телевидениеһында республика тарихы һәм мәҙәниәте буйынса мауыҡтырғыс тапшырыуҙар әҙерләп алып барыусы егет тураһында бик күп маҡтау һүҙҙәре яҙылды. Бәғзеләр хатта, кем балаһы икән, тип тә аптыранды. Ә инде уның тормош юлы менән әҙмәҙ кисешкәндәр белә - ул мәктәптә уҡығанда уҡ үҙенең ораторлыҡ һәләте, аҡылы һәм белем даирәһенең киңлеге, күпте белергә тырышыуы һәм, иң мөһиме, башҡортса ла, русса ла матур итеп һөйләшеүе менән башҡаларҙан айырылып торҙо. Башҡортостанда ЮНЕСКО хәрәкәтенең әүҙем ағзаларының береһе булды. Ҡалала үҫһә лә, мин-минлек сире менән сирләмәне, ябай, ололоҡло һәм кеселекле булып ҡала белде. Бөгөн ул Башҡорт дәүләт университетында студенттарға белем биреү менән бер рәттән, телевизор ҡараусыларҙы матур тапшырыуҙары менән ҡыуандыра. "Өфө башҡорто" рубрикаһының сираттағы ҡунағы - филология фәндәре кандидаты Искәндәр СӘЙЕТБАТТАЛОВҡа бер нисә һорау менән мөрәжәғәт иттек.**

# БАШҠОРТ ТЕЛЕ МИҢӘ...

## киң донъя асты



**➔ Милләтте сығышы (ауыл, ҡала), белеме (урта, юғары), дине (динде, динһеҙ), ырыуы һәм башҡа күрһәткестәр менән бүлгеләргә ярамаһа ла, ҡулланылышҡа "Өфө башҡорто" тигән термин килеп инде. Һеҙҙең өсөн кем ул Өфө башҡорто?**

- Өфө башҡорто - Рәсәйҙең ҙур ҡалаларының типик вәкиле. Ҡала халҡына, ҡала йәмғиәтенә һәр ваҡытта ла һәр илдә ҡатмарлы структура хас: кешеләр бер-береһенән милләте, туған теле менән генә түгел, иҡтисади хәле, һөнәре, сәйәси ҡараштары, белеме һәм мәҙәни кимәле, теге йәки был субкультураға ҡарауы менән айырыла, шуға күрә Өфөнөң бөтә башҡорттарын бер-ике һөйләм, хатта бер нисә битлек текст эсендә тасуир итеү мөмкин түгел.

Икенсе-өсөнсө быуын Өфө башҡорттары өсөн ҡала - тәбиғи йәшәү мөхите, ауыл ерлегендә барлыҡҡа килгән ҡайһы бер мөнәсәбәттәр һәм мәҙәни өлгөләр улар өсөн бөтөнләй ят. Уларҙың милли тематикаға мөнәсәбәте күп осраҡта ғаиләлә алынған тәрбиә һәм милли мәктәптә уҡыуы-уҡымауы менән тығыҙ бәйле. Милли белем алғандар, ғәҙәттә, үҙҙәренең башҡортлоғо тураһында күберәк уйлана. Күпселек өсөн иһә милләт кешенең күп һыҙаттарының береһе генә булып тора.

Минең атай-әсәйем икеһе лә Өфөлә үҫкәнлектән, туған телдә тик көнкүрештә ҡулланырлыҡ кимәлдә үҙләштергән. Мин 2-се синыфҡа тиклем башҡортса бөтөнләй аралашмай инем. Һигеҙ йәшемдә әсәйем мине өйөбөҙҙөң эргәһендә генә асылған яңы 144-се Башҡорт гимназияһына уҡырға бирергә ҡарар итте, башҡорт телен шунда ғына өйрәндем. Башҡортса уҡыу ҡыйын булды, тик ваҡыт үтеү менән - 13-14 йәшемә, кеше аңларлыҡ итеп һөйләшә башланым. Өлкән синыфтарҙа тағы ла мәктәпте алмаштырырға тура килде һәм унда башҡорт теле бары тик дәүләт теле булараҡ ҡына уҡытылды. Башҡорт мәктәбенән килгәс, башҡорт теленән олимпиадаларҙа ҡатнашып, беренсе урындар алып йөрөнөм. Әммә бөгөн дә башҡортса иркен һөйләшәм, уны һыу кеүек эсәм, тип әйтә алмайым.

15 йәшемдә беренсе тапҡыр ауылға барҙым. Олатайҙар төйәге менән тәүге танышыу миңә енел бирелмәне. Хәҙер иһә йылына бер-ике тапҡыр шунда йөрөп киләм, туғандарым менән аралашып торам. Олатайым, билдәле ғалим, профессор, филология фәндәре докторы Ғәли Сәйетбатталов мин белгәндән һәр саҡ эш менән булды. Шулай ҙа мәктәп йылдарында ул миңә китаптар һайларға ярҙам итә, аҡыллы кәңәштәрен бирә ине.

**➔ Башҡортостан Республикаһы - уға исем биргән халыҡтың тыуған ере, берҙән-бер аҫаба төйәге. Уның баш ҡалаһы ла берәү генә һәм унда ла милли рух, милли үҙенсәлек күҙгә салынып торһон өсөн нимә эшләргә кәрәк?**

- Өфөнөң тышҡы күренешендә башҡорт тематикаһы менән символикаһы хәҙер ҙә ярайһы күп урын ала, әммә уны йәнләндерергә кәрәк. Урамдарҙа башҡорт теле яңғырамаһа, алтаҡталарҙан, милли биҙәктәрҙән, архитектура формаларынан ни файҙа бар? Шуға күрә, үҙен башҡортмон тип һанаған һәр кем башҡортса һөйләшергә тейеш, тип уйлайым. Мин башҡорт телен камиллаштырыр өсөн башҡортса китаптар (тәү сиратта, З. Биишева, Ж. Кейекбаев, Н. Мусин, Я. Хамматов, Р. Ғарипов кеүек бай телле яҙыусыларҙың әҫәрҙәрен) уҡыйым, гәзит-журналдарҙы күҙәтеп барам, спектаклдәргә, кино фестивалдәренә йөрөргә тырышам. Дөрөҫөн әйткәндә, телде белеү миңә башҡорт әҙәбиәтенең, шиғриәтенең, сәнғәтенең сикһеҙ киң донъяһын асты.

**➔ Бөгөн ҡала башҡорт мәҙәниәте ниндәй кимәлдә?**

- Ҡала башҡорттарының мәҙәниәте, минеңсә, ҙур үҫеш алдында тора. Башҡорттар һаны күбәйә һәм артабан да күбәйер, Өфөнө "үгәй әсәй" тип түгел, берҙән-бер туған мөхит тип күреүселәр тәбиғи рәүештә артыр, был иһә ҡала мәҙәниәтен (ҡалала йәшәү, аралашыу, ваҡыт үткәреү рәүешен) актуаллаштерер, тип уйлайым. Хәҙер ҡалалағы башҡорт мәҙәниәте тигеҙһеҙ үҫешә - уның юғары һәм артыҡ талапсан булмаған кешеләрҙе ҡәнәғәтләндерерлек өлгөләре бар, ә уртаса - бер үк ваҡытта киң ҡатламға аңлайышлы һәм сифатлы - проекттар күп түгел. Ә хәҙерге мәҙәниәтте нәҡ улар билдәләй. Шуныһы ла мөһим: ҡалала урыҫ телле, башҡорт үҙаңлы кешеләр бик күп, әммә уларҙың теләктәренә тап килгән мәҙәни саралар етерлек түгел.

**➔ Өфө башҡорттарында милли үҙаң үҫтереүҙә интернет-ресурстарҙың әһәмиәтен нисек баһалайһығыҙ?**

- Интернет селтәре бөгөнгө кешегә иң кәрәкле әйбергә әйләнде. Интернетта булмаған нәмәләр донъяла ла юҡ, тип әйтеп тә була. Селтәрҙә яңы проекттарҙың барлыҡҡа килеүе, уның башҡорт телле өләшөнөң үҫешә, ҡатмарлана, тәрләнәнә барыуы ҡыуандыра. Интернет ярҙамында Башҡортостандан ситтә булған башҡорттар ҙа республикалағы хәлде шул уҡ минутында белеп тора, Башҡортостан телевидениеһы һәм радиоһы тапшырыуҙарын ҡарай, тыңлай ала.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

---

ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ



# ҒҮМЕР БУЙЫ ЭҘЛӘЙЕМ...

**Ошо рубрикала фекер алышыр темалар бик күп бит инде ул. Әлбиттә, хаталанмаһам, дөрөҫ эшләргә икәнде ҡайҙан белер инем, тигән аҡыл да бар барлыҡҡа. Әммә тормош хаталары арҡаһында үкенесле, фажиғәле мәлдәре лә бихисап бит әҙәм балаларының. Әйҙәгеҙ әле, шул мәлдәр тураһында ла һөйләйек бер-беребеҙгә. Бәлки, һеҙҙең ғибрәтле яҙмалар әле хаталанырға өлгөрмәгәндәр ҡолағына ла инер ҙә, уларҙы уйландырыр, һабаҡ бирер, ете ҡат үлсәп, бер ҡат киҫергә өйрәтер. Әйҙәгеҙ... Ә хәҙергә бер уҡыусыбыҙҙың ошо яҙмаларын тәҡдим итәбеҙ иғтибарығыҙға.**

Ҡыҙ күңелендә иң тәүгеләрҙән булып бөрөләнгән сер, хыял - ул, әлбиттә, һөйгәненең һыны булыр. Был һын уҡыған китап, ҡаралған кинофильмдағы геройҙар образына оҡшағанараҡ була. Һәм һин оҙаҡ ҡына ошоға тап килгән йәнкәйеңде эҙләйһең. Йә табаһың, йә таба алмайынса, ғүмер буйы ҡаңғыраһың. Минең кеүек.

Эйе, мин уны, идеалымды, ғүмерем буйы эҙләнем. Иң тәүҙә ул күңелемә Рәсәй киноактерҙары Ланової, Тараторкин, һинд киноһындағы Радж Капур кеүек, бик матур, оҙон буйлы егет булып инеп уйылды. Ул ғәҙеллек өсөн көрәшеүсе, намыҫлы, тәртипле. Ул юғары белемле, интеллигент, ыҫпай, ҡупшы кейенергә ярата. Ул һине һөйгәне, ҡатыны, балаларының әсәһе булараҡ тәрән хөрмәт итә, яратып туймай. Бына шул һын. Тәү ҡарашҡа, беҙҙән быуын ҡатын-ҡыҙҙары ир-атҡа ул ҡәҙәре юғары талап та ҡуймаған һымаҡ. Ләкин был тәү ҡарауға ғына шулай. Намыҫлы, гүзәл, әхлаҡлы ирҙе табып ҡара әле һин! Хәҙерге ҡыҙҙар, ана, иң тәүҙә "Бай булһын, машиналы, фатирлы булһын" тигән талап ҡуя, ысын һөйөү хисен әллә ни һанлап та бармай. Ә беҙ матди байлыҡ тураһында уйламаныҡ. Уныһы гәйепләнә ине бит инде ул...

Мин тап ана шул үҙемдең идеалыма тап килгән Алпамышамды осрата алмай ҡартайып киләм. "Ул!" тип ҡапыл ташланған, утҡа бешкән саҡтарым да булды. Кейәүгә сығыуымдың да бик тиҙ "ауыҙ бешеү" икәнлеге асыҡланды. Ғаилә тормошом килеп сыҡмауының беренсе сәбәбе, моғайын, ана шул идеалыма табыныу, иремде идеалымдағы кешегә оҡшатып тәрбиәләргә маташыуым булғандыр. Уға артыҡ ҙур талаптар ҡуйыуҙан булғандыр.

Тағы бер ҙур сәбәп - ата-әсәләребеҙҙең, мәктәптең беҙҙе ғаилә тормошона әҙерләмәүе, тәрбиәләмәүе булғандыр, тим. Ғаилә, ир менән ҡатын мөнәсәбәттәре тураһында һөйләшеү беҙҙең заманда оятҡа һаналыр ине. Ә күреп, фәһем алып өйрәнер яҡшы өлгөләр юҡҡа сыға башлағайны. Өлгөләр булһа, уларға ҡарап, идеалына "төҙәтмәләр" индерергә мөмкин булыр ине. Хәҙерге тәжрибәм, аҡылым ул саҡта булһа, моғайын, иремде идеалымдағы сүрәткә индерә яҙыр инем, тип тә уйлайым.

...Ғүмер буйы көттөм уны, Алпамышамды. Иллене артылдым инде, һаман көтәм.

**Сәрүәр ҮЛМӘҪҠОЛОВА.**

***✓ Бетерәм... Минең кендек ҡанын йыуған изге һыуым. Балалыҡ шатлыҡтарымды уртаҡлашыусы, үҫмерлек тойғоларымды кисерешеүсе, һөйөү серҙәремде тыңлаусы, ҡайғы-хәсрәттәремде һыпырып алыусы йылғам.***




Нисәнселер көн ошолай сыҡҡандарында, яр башында ҡапыл ҡаҙаҡ бала-сағаһы пәйҙә булды. Улар ниմәләрҙер, тип, ҡысҡырышып, эләкләп, таш яуҙыра башланы. Таштарҙы итәктәренә йыйып алғандар, ҡәһәр төшкөрҙәре. Асыҡлыҡтағы ҡатындар йәшеренер урын тапмай йүгереште, балаларҙы әрләп-ҡарғап, йоҙроҡ күрһәтте. Тик тегеләр ҙә мәргән, таштар ябыҡ арҡаларға, баштарға шаҡ-шоҡ итеп кенә ҡала. Һаҡсыларға мәрәкә, һаһылдашып күҙәтеп, ситтә тәмәке көйрәтәләр.

Хәтирә күл ситенә инеп үк баҫҡан ине. Балаларҙың шулай ҡанһыҙ булғанына хайран булып тора. Шул саҡ бер таш уның эргәһенә, һыуға, сәп итте. Батты ла, төшкән ере нисектер ағарып, боламыҡланып китте. Был ни булды әле, тип, теге ташты һәрмәп алһа - ҡорот. Ҡорот бит был! Тышы ыҫланғандан ғына ҡара!

Ҡатын ризыҡты бер генә эйелеп сайҙы ла, ҡытырлатып тешләп бүлеп алды. Күҙҙәрен йомоп ебәреп һурҙы. Э-эй, тәмлелеге! Ожмах ризығымы ней!

Унан, иҫенә килеп, яр буйлап боҫошҡан ҡатындар араһына инеп шыбырланы:

- Был - ҡорот! Ҡорот был, таш түгел.

Аңламағандарға ҡулындағы "ташын" ялап, кимереп күрһәтте. Бер аҙҙан ҡатын-ҡыҙҙар иплап кенә йөрөп теге таштарҙы йыя башланы, ҡулдарына элэгеү менән ҡамыш араһына инеп йәшеренеп, йыуып ашарға керештеләр. Илай-илай, рәхмәттәрен уҡый-уҡый ашанылар.

Тағы бер нисә айҙан, таш сығара барғандарында ла шул ҡылыҡтарын ҡабатланы ҡаҙаҡ балалары. Үҙәктә туңҡанлап йөрөгән ҡатындарҙы тағы өҫтән килеп "таш" менән бәргеләп, үсекләп, һаҡсыларҙы ышандырыу өсөн осаларын асып күрһәтеп, мыҫҡыллап ташланылар. Аҫтағы ҡатындар ҙа күтәреп алды "уйынды". Әрләп, һыҙғырып, ҡысҡырышып ҡалдылар. Балалар ҡапыл хасил булды ла, ҡапыл юғалды. Ә ҡылған изгелектәре әле әллә нисә көн мәхлүк ҡатындарҙың кеҫәһен йылытып, үҙәген ялғап йөрөнө.

* * *

Килгәндә тирә-яҡты байҡар хәл дә, теләк тә булмағанғамы, үҙенең тап ҡайһы тирәлә икәнлеген дә белмәй ине Хәтирә. Тора-бара күнеккәс, адресын һорашып алды, ата-әсәһенә хат яҙып һалды. Башта нисек кенә был хәлен белдерергә теләмәһә лә, һағыныуы шул саҡлыға етте - ғорурлығын еңде. Етмәһә, улар ҙа йөҙ төрлө һүҙ ишетеп, алйышып ултыраларҙыр бит.

Хатҡа тотонғайны, күҙ йәштәрен тыя алмаҫ булды ла китте, әле тыйылып ҡына йөрөгән икән. Илай-илай яҙғандарын уҡыһа - шиғыр әллә. Бәй, ул шиғыр сығарып ҡуйған бит. Яҙып ултыра, ҡойолоп тора, һыҡтай-һыҡтай ҙа тағы яҙа. Шулайтып, ике табаҡты тултырып ташланы. Уны күҙәтеп ятҡан күршеһе Зинаида-Зинка өндәшә:

- Ирка, һин поэма яҙаһың түгелме?

Хәтирә йәш пәрҙәһе аша ҡарап уны аңламай:

-Ә?..

Хәтирәнән "Ира" яһап алған карауатташ күршеһе өҫкө ҡаттан башын һәлендереп көлөп ята:

- Илай-илай мөхәббәт хаты яҙаһыңмы?

Эй, ошо бошона белмәҫ Зина! Уға былдай зар танышмы?

-Мөхәббәт һиңә...

Шул саҡ йөрәге семетте. "Мөхәббәт" тигән һүҙҙәнме, шул һүҙ ниմәнелер иҫенә төшөрөүҙәнме. Был бит уның теләндә ғүмерҙә лә әйтелмәгән һүҙ. Тойолған, әммә әйтелмәгән. Тойолған, әммә тыйылған, тонсоҡтороп үлтерелгән. Шулай тип уйлай ине. Ә ул... ул үлмәгән, ахыры. Үлгән булһа... күҙ алдына килер инеме ул йөҙ? Иң ауыр, иң хәсрәтле мәлдәрҙә? Күҙ алдында йөҙө торор инеме лә, шул күренешкә әүрәп, тирә-яғын, ауыртыу-һыҙланыуҙы, кәмһетелеүҙе, йәбер-золомдо тоймаҫ-күрмәҫ инеме? Үлгән булһа... ул тойғо?

Хәтирәләге үҙгәреште һиҙгән оҫҡор Зина "һә" тигәнсе аҫҡа төшөп тә ултыра. Яҡынлап алып уҡ битенә төбәлә:

- Ирка, йә инде, һөйлә шул тарихты миңә? Һөйләһәң еңелерәк булып ҡала. Мин бит һиңә тормошомда булғандарҙы бушҡа һөйләмәйем, күңел бушатыу өсөн. Йә?

- Нимә һөйләйем инде мин... - ҡатын йыуаш йылмая. - Һөйләһәм дә һин яҡшылап аңламаҫһың, руссам икмәк-тоҙлоҡ ҡына.

- Аңлайым мин үҙемә кәрәген, - яңы әхирәте ҡуямы инде ул. Бик үткен ҡатынҡай ул, шундай сая. Иректә йәшәгәнендә врач булдым, ти, ире лә ғалиммы - кемдер. Икеһен дә берберартлы ҡулға алғандар, уныһының ҡайҙа икәнен дә белмәй, төрлө төрмәләргә хаттар яҙып эҙләүенә инде йылдан ашыу икән. Шул хәлендә лә һәр кемгә ярҙам итергә ынтылып тора. Хәтирәне бөтөнләй үҙ итте, русса ла ул өйрәтә.

- Минең ауылым урман-тауҙар араһында ята... ҡарағай урманы эсендә. Күрһәң, матурлығына иҫең китер... Ауыл ҡаршыһында ғына тау бите... Тау итәгендә йылға ағып ята. Бетерә... исеме йылғаның... - битенән юлаҡлаған йәштәренән оялмай ине ул инде. - Бәләкәс кенә йылға, шаршылы. Шаршылары ваҡ таштар өҫтөнән йүгерә лә йүгерә...

- Шунда һинең мөхәббәтең йәшәйме?

- Мөхәббәтем... йәшәйҙер... күрәһең, - был асышты үҙенә лә тәүгә асыуы, тәүгә шулай асыҡтан-асыҡ әйтә алыуы ине Хәтирәнең.

- Белмәйһеңме хәҙер?..

- Белмәйем. Һуғышталырмы, терелерме - белмәйем.

- Минең кеүек икән һин дә... Нисек осраштығыҙ, нисек хушлаштығыҙ, ниндәй һүҙҙәр әйтте һиңә? - Зина һөйләшеүҙе аһәңле юҫыҡҡа күсермәксе.

- Хушлашырға... минең уның менән осрашҡаным да булманы.

- Бәтәс! Ә мөхәббәт һүҙҙәре?

- Булманы ундай һүҙҙәр ҙә, бер ни ҙә...

- Кит, һеҙҙә сәпсим! Егет менән күрешергә лә ярамаймы ни?

- Ярамай шул. Тик теләгәндәр күрешә. Беҙ бер-беребеҙҙе аңлап етмәй, өлгөрмәй ҡалдыҡ.

- Һуғышҡа алындымы?

- Юҡ. Мин кейәүгә сығып киттем.

- Кейәүгә? Башҡаны яратҡан көйгәме?

- Шулай була, күрәһең...

- Ирка, һин комсомолкамы, юҡмы? Ул ниндәй мещандар заманы хәбәрен һөйләйһең!

-Мещандар тип... Беҙҙә шулай. Намыҫ бөтә нәмәнән дә юғары. Һөйөүҙән дә, бәхеттән дә... хатта үлемдән дә...

* * *

Бөйөк Еңеүҙе ошонда ҡаршыланы Хәтирә. Оло шатлыҡтан ҡосаҡлашып иланылар, яулыҡтарын күккә сөйҙөләр, таҡмаҡ әйтеп, биҙрә төбө сиртеп бейештеләр. Шул көндән башлап барыһы ла үҙгәрер, ҡапыл бөтөн хәлдәр тик яҡшыға юл алыр ҙа, донъя таҙарып, яҡтырып ҡалыр кеүек булғайны... Тик улар өсөн бер нәмә лә үҙгәрмәне. Шулай уҡ ҡара таңдан торҙолар ҙа, дежурный ҡысҡырып һанап сыҡҡандан һуң, һоро ярма өйрәһен шөрпөлдәттеләр ҙә, һарайҙарына таралыштылар һәм шуларҙан ҡараңғыһыҙ ҡайтып инә алманылар. Мал аҙығы еҫе тәндәренә үтәнән-үтә һеңеп, башҡа еҫте айырмаҫ булдылар. Хәҙер инде, алты йыл ағымында, ҡул-беләктәренә ныҡлы көс ултырған Хәтирәгә лә егерме биш-утыҙ һыйырҙы сажлатып һауып алып тапшырыу артыҡ ауырлыҡ тыуҙырмай. Үҙенекеләрҙе тәрбиәләп бөтөп, хәлһеҙерәк, яйыраҡ булғандарға ярҙамға йүгерә әле. Күҙ алдында кемделер туҡматыу ауыр уға. Бигерәк тә быуындары ла ҡатып етмәгән, аяҡ-ҡулдары ептәй генә булған йәш ҡыҙҙарҙы, һыйырҙы тәүгә күреп хайран булған ҡала ҡатындарын. Шулай булғаны өсөн яраталар ҙа үҙен. Өлгөрлөгөн, эште һыпыра һуғып башҡара белеүен күҙәтеүселәр ҙә, етәкселек тә аңғарып алды. Баракта ла уның һүҙенә ҡолаҡ һала, кәңәштәрен тыңлай торған булып киттеләр. Ниндәй генә ҡаты һәм аяуһыҙ замандар булып, рәхимһеҙ тормош кисергәндә лә, кешелеклекте берәү ҙә юҡҡа сығара алмай ине шул.

Азат ителеү хәбәрен дә артыҡ осонмай, хатта моңһоҙораҡ булып ҡабул итте Хәтирә. Өмөт тигән нәмәнең, янып-янып та, утын һалыусыһы булмаған усаҡ шикелле, инде ялҡынһыҙ һәм йылыһыҙ ғына быҫҡыуынан инеме был.

- Ҡайтыр ерең юҡмы? - Любовь Гавриловна, төрмә начальнигы урынбаҫары, башҡалар таралып бөткән рәттә һаман ҡатып ҡалған ҡатын ҡатарында өндәшеп уҙҙы. Үҙе яуапты көтөп тә торманы. Уныһы кәрәк тә, мөһим дә түгелдер инде. Илдә миллиондарса халыҡтың ҡайтыр урыны юҡ. Төрөмшиктәр ҡайғыһымы? Шулай ҙа был айнытып ебәрҙе Хәтирәне.

- Урыным... бар... Бар... минең ҡайтыр ерем, - башта атланы, унан барагына ҡарай йүгерә үк башланы, - Бар... бар... минең ауылым... Бетерәм бар...

Юлда, поездан-поезға күсеп ултырып, вагондарға ҡыҫылышып ингәндә, проводницаларға күрһәткән ҡағыҙҙарынан оялһа ла, ҡырын-мырын ҡараған ҡараштарҙы тойоп ут йотһа ла, күкрәгендә елпегән күбәләктәй генә бер нәмә тотош тәнен йылытып, йәненә рәхәтлек биреп тик торҙо. Был тойғо ауылына етә барған һайын ҙурайҙы, үҫте һәм тора-бара уны башлыса солғап алды. Шул шауҡымда өс тиҫтәләй йәйәү саҡрымлауынан арыу ҙа тойманы. Бына ул көҙгә һоро саңға батҡан ауыр һалдат ботинкаларын сисеп, оло аяҡ кейеме эсендә еҫләнеп ҡатҡан ойоҡтарын һалғас, тупаҫ буҫтыйҙан тегелгән, ҡасандыр ҡара төҫтә булып та, күп йыуыуҙан буҙарып-уңып бөткән күлдәк итәктәрен бер ситенән бөрә тотоп, яланаяҡлап йылғаға төштө. Сентябрҙең офоҡҡа ҡолап барған һаран ғына ҡояш нурҙарында уйнап, иркәләнеп йымылдаған шаршының үтә күренеп ятҡан ваҡ ҡырсыны ҡытыҡлатып аяҡтарын күмде. Һыуы һалҡынайған. Улай тиһәң, был йылғаның холҡо миҙгелгә ҡарап артыҡ үҙгәрмәй. Ул йәй-ҡыш та һөйәккә үтерлек итеп өтә белә.

Бетерәм... Минең кендек ҡанын йыуған изге һыуым. Балалыҡ шатлыҡтарымды уртаҡлашыусы, үҫмерлек тойғоларымды кисерешеүсе, һөйөү серҙәремде тыңлаусы, ҡайғы-хәсрәттәремде һыпырып алыусы йылғам. Ҡан тамырым минең... Туҡтауһыҙ шылтырап ағып, шаршыларыңда бәрҙе ҡарпытып, сөмдәреңдә күкте сағылдырып, күҙ алдымдан китмәйенсә, тарттың да торҙоң. Һинең тартыу көсөңдө шул ҡәҙәр тойҙом... Гүйә, йөрәгемә тулҡын-тулҡын булып һуғылыусы, уны эшләтеп тороусы ла һин инең. Минең кеүек нисә балаң һиңә ошолайтып ҡайтып, ялтыр көҙгөңдә үҙ һүрәтен күргәнсе текәлде лә, әсе күҙ йәштәренә һыуыңды ҡушып йыуынманы икән... Бетерәм... Тыуған ерем, ғәзиз төйәгем минең.

Серегән йүкәһендә саҡ эләгеп торған артҡы ҡапҡанан үтте ҡатын. Күрәһең, был яҡҡа сығыусы мал күптән юҡтыр, шуға ла был юл ҡулланылмайҙыр ҙа. Оло өй яғына күҙ һалһа ла, аласыҡ яғына атланы. Был ваҡыта ауыл халҡы әле аласыҡта көн итә. Өрөп сыҡҡан эт тә юҡ. Быныһы ла йортта ир кеше булмауы билдәһе. Ир булһа, ихатала эт тә була, ат та була. Ирһеҙҙәрҙә, тимәк, ошолай ҡоймалар хәл өҫтөндә, ҡайҙа ауып, ҡайҙа ҡыйшайып, ишек-ҡапҡалар һәлберәшеп, һикәлтәләр сереп-ҡарайып тора. Тыранса аласыҡ алдына еткәс, әллә нишләп эскә үтер ҡыйыулыҡ тапманы, шунда торған, ҡасандыр атаһы ҡунаҡлар булған, йышылып йылтыраған бүкәнгә сүгәләне. Күпме ултырғандыр шулай, берәү аласыҡ урындығын шығырлатып тороп, килеп ишекте эстән төртөп ебәрҙе:

- Кем булдың шу? Нишәп үтмәйең?

Әсәһенең тауышынан һиҫкәнде лә, һүренке генә йылмайҙы:

- Үттем, әсәй. Үтеп ултырам.

Сәғиҙә "Ах!" итте. Ямаулы йөнойоғо өҫтөнән ҡатыр калушын һыйҙыра алмай сәбәләнде лә, уларын туҙҙыраһынан ситкә тибеп, ойоҡсан көйө тупһа ашатланы:

- Балам!.. Балаҡайы-ым... - алға һуҙылған ҡулдары килеп етеп, ҡыҙын ҡосҡансы түгелеп илап та ебәрҙе. - Күрһәтмәй үлтерер был мине, тигәйнем би-ит... баламды күрһәтмәҫ инде тигәйне-ем...

Ҡасандыр йоморо ғына булған әсәһе бөтөнләй ябығып, ҡоро һөйәккә ҡалып, бала шикелле генә булып түшенә һырынған. Эй, әсәкәйем!.. Күпме хәсрәттәр йотторҙом һиңә...

**(Дауамы бар).**

✓ *Шиғыр һөйләүселәргә Өфө башлығы Ирек Ишмөхәмәт улы Ялалов та ҡушылды. Ул Мостай Кәримдең "Ҡайын япрағы тураһында" шиғырын һөйләп ишеттерҙе. Ҡойоп ямғыр яуыуы ла шиғыр һөйөүселәргә ҡамасауламаны.*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ДУҪЛЫҠ БАЙРАМЫ

**Ошо көндәрҙә республикабыҙҙың "Берҙәмлек" Халыҡ-ара милли мәҙәниәттәр фестивален ҡабул итеүе тураһында хәбәр иткәйнек инде. Быйылғы фестивалдең төп үҙенсәлеге шунда булғандыр - ул 2020 йылда Башҡортостанда үтәсәк Бөтөн донъя фольклориадаһына әҙерлек сиктәрендә CIOFF - Фольклор фестивалдәре һәм традицион сәнғәттәр ойошмалары халыҡ-ара советы яҡлауы аҫтында үтте.**

Үҙ ҡорона 11 илдән 200-гә яҡын ҡунаҡты йыйған фестивалде асыу тантанаһы Дыуан районы үҙәге Мәсәғүттә булды. Ҡытай, Эстония, Көньяҡ Корея, Сербия, Һиндостан, Көньяҡ Африка, Шри-Ланка, Колумбия, Мексика, Иран һәм Ҡаҙағстандан килгән ижади коллективтар милли кейемдәрҙә урам буйлап үтте, этно-ауылды ҡараны. Икенсе көндө фестивалде Ҡыйғы районы ҡаршыланы. Ҡунаҡтарҙы бауырһаҡ, ҡымыҙ менән ҡаршы алдылар. Театрлаштырылған тамаша ла, традицион башҡорт кәсептәре өлгөләре - кейеҙҙән, иләнгән йөндән һуғылған кейемдәр, балаларҙың ҡул эштәре, умартасылыҡ продукцияһы, ҡымыҙ, милли аш-һыу менән таныштырған этно-ауыл да барыһының да күңеленә хуш килде. "Ҡыйғыр юлы" этнофестиваленең еңеүселәре лә тап ошо көндө билдәләнде. Был фестивалдә республиканың иң яҡшы этно төркөмдәре ҡатнашты. "Елмерҙәк" этно-рок төркөмө (Белорет районы), "Етегән" ҡумыҙсылар халыҡ ансамбле, "Юлдаш" вокаль-инстументаль ансамбле (Салауат районы), "Алпамыша" халыҡ этно төркөмө (Учалы районы), "Дәрт" этно төркөмө (Межгорье ҡалаһы), "Мәрйен" халыҡ фольклор ансамбле (Стәрлетамаҡ ҡалаһы), "Сал Урал" этно-инструменталь ансамбле (Пермь ҡалаһы), шулай уҡ ҡыйғыларҙың "Әйле-Ҡатай" халыҡ этно төркөмө һәм "Тарпан" төркөмөнөң йәш артистары сараның йәменә әүерелде. Уларҙың иңиңдәре "Берҙәмлек" фестивалендә ҡатнашыусылар менән бер сәхнәлә сығыш яһаны.

9 июнь фестиваль Мәсетле районына күсте һәм һабантуйҙа ҡатнашты. Һабантуйҙың абруйлы ҡунаҡтары араһында 2012 йылда Көньяҡ Корейла Бөтөн донъя фольклориадаһын үткәреү буйынса дирекция ағзаһы Джон Наен да булды. Быйыл мәсетлеләр беренсе тапҡыр "Һомай" Асыҡ республика башҡорт костюмы фестиваль-конкурсын да ҡабул итте. "Һомай" фестивалендә оҫтаханалар, төрлө үҙәктәр, мода театрҙары коллективтары, рәссам-модельерҙар, уҡыу йорттары педагогтары, сәнғәт белгестәре, этнографтар ҡатнашты. Унда Сәймә Хәсәнованың авторлыҡ салон-ательеһынан "Ҡайтауаз" костюмдары коллекцияһы "Ҡотлау" этностилендәге йәштәр һәм эксперименталь костюм номинацияһында Гран-при яуланы. Һигеҙ костюм да тап ошо конкурсҡа бағышлап тегелгән, улар араһында бәрхәт һәм ебәк күлдәктәр, туй күлдәге һәм бер ир-егеттәр костюмы булды. "Этник стилгә мөрәжәғәт итеп, беҙ халҡыбыҙҙың тарихына яңынан әйләнеп ҡарайбыҙ һәм заманса кейемдәрҙә боронғо биҙәктәрҙе, орнаменттарҙы ихлас ҡулланабыҙ", - ти Сәймә Хәсәнова.

Мәсетлелә "Берҙәмлек" фестивале сиктәрендә тағы ла бер матур сара - Халыҡ-ара ҡумыҙсылар һәм өҙләүселәр бәйгеһе үтте. "Ҡумыҙ моңо - дуҫлыҡ һәм мөхәббәт моңо", - тине мәҙәниәт министры урынбаҫары Рәнис Алтынбаев һәм ҡумыҙҙың башҡорт халҡының рухи мәҙәниәтендә ҙур урын алып тороуын телгә алды. Быйыл унда Башҡортостан, Саха Якутия, Татарстан, Хакасия республикаларынан, Пермь крайынан, Һамар, Свердловск өлкәләренән 152 кеше ҡатнашты. Баһалама ағзалары белдереүенсә, быйылғы бәйгелә ҡатнашыусыларҙың әҙерлек кимәле күпкә юғары булған. Гран-при Өфө ҡалаһынан Заһир Зәйнетдиновҡа тапшырылды. Был конкурсҡа башланғыс һалған Роберт Заһретдиновтың ҡыҙы Айһылыу Заһретдинова үҙенең бүләген булдырып, еңеүсегә көмөш ҡумыҙ бүләк итте.

Балаҡатайҙар ҡунаҡтарҙы урыҫ йыры, таҡмаҡтары һәм бейеүҙәренә арналған фестиваль менән ҡаршы алды. Ул быйыл республикала 28-се тапҡыр үтә. Халҡыбыҙҙың милли батыры Салауат Юлаевтың тыуған төйәгендә лә булды "Берҙәмлек" фестивале ҡунаҡтары. "Салауат йыйыны" фольклор байрамы ҡунаҡтарҙы халҡыбыҙҙың милли йолалары, шөғөлдәре, йыр-моңо менән таныштырҙы. Спорт төрҙәре лә күп ине - "Салауат уғы" традицион уҡ атыу буйынса асыҡ район турниры, милли көрәш, ат сабышы уларҙың иң сағыуҙары булды. Сарала CIOFF - Фольклор фестивалдәре һәм традицион сәнғәттәр ойошмалары халыҡ-ара советы вәкиле Алехандро Камачо Гонсалес, Рәсәй дәүләт халыҡ ижады йортоноң Халыҡ-ара мөнәсәбәттәр бүлеге етәксеһе Андрей Беляев ҡатнашты. "Берҙәмлек" фестивале Өфөлә - Ҡала көнө байрамында ҡала халҡына ҙур концерт тәҡдим итте. Шуның менән ул республиканың мәҙәни тормошондағы тағы ла ҙур һәм сағыу сараларҙың береһе - "Евразия йөрәге" Халыҡ-ара сәнғәттәр фестивалено старт бирҙе.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Ҡала көнөндә башҡа бик күп саралар менән бергә Өфөнөң Мостай Кәрим исемендәге скверында Шиғриәт байрамы үтте. Ул Рәсәй көнөнә, Салауат Юлаевтың тыуыуына 263 йыл тулыуға, Өфө ҡәлғәһенә нигеҙ һалыныуға 443 йыллыҡҡа арналды.**

**Был сарала Башҡортостан шағирҙары һәм яҙыусылары, Йәш тамашасы театры артистары, республика шиғыр һөйләү бәйгеләре лауреаттары һәм дипломанттары, китапхана хеҙмәткәрҙәре ҡатнашты. Шиғыр һөйләүселәргә Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ишмөхәмәт улы Ялалов та ҡушылды. Ул Мостай Кәримдең "Ҡайын япрағы тураһында" шиғырын һөйләп ишеттерҙе. Ҡойоп ямғыр яуыуы ла шиғыр һөйөүселәргә ҡамасауламаны. Был көн Өфөлә Шиғриәт көнөнә әүерелһен ине, тигән теләктәр ҙә белдерелде.**
















ИНТЕРНЕТТАН



## АСЫҒЫУ СТРЕСТАН ҺАҠЛАЙ

■ Көньяҡ Калифорния университетында үткәрелгән яңы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ирегеттәр йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренә ныҡыраҡ бирешә икән. Белгестәр фекеренсә, шулай ҙа һуңғы тиҫтә йыл эсендә йөрәк ауырыуҙары сирҙәренә дусар булыусылар һаны күпкә кәмегән, был дөрөҫ туҡланыу, инфекциялы ауырыуҙарҙы ваҡытында иҫкәртеү һәм башҡа факторҙар менән бәйле. Тик барыбер ҙә профилактика күберәк гүзәл затка яҡшыраҡ тәьҫир итә, 13 илдә йәшәүселәрҙе тикшереп, ғалимдар шундай һығымтаға килгән. Был ир-егеттәр араһында тәмәке тартыусылар күп булыу менән бәйле, ти улар.

■ Ниндәйҙер йөрәхәт алған кешелә кортизол кимәле юғары икән, ул был хәлде иҫенә төшөргән һайын, хәтерендә уны яңынан кисерәсәк. Бына шуның өсөн дә йәрәхәттән һуң стресс кисереүселәр насар хәтирәләр менән оҙаҡ яфалана. Бохумдағы Рур университеты белгестәре тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусыларға геометрик фигуралар күрһәткән. Ҡайны бер фигураларҙы күрһәткәндә еңелсә электр тогы һуҡҡан. Икенсе көнөнә һынауҙарҙа ҡатнашыусыларҙың яртыһына - кортизол, икенсеһенә составында бер ниндәй ҙә матдә булмаған "буш" таблеткалар биргәндәр. Өсөнсө көнгә белгестәр ҡатнашыусыларҙың нисә геометрик фигураны хәтерендә ҡалдырғанын асыҡлаған. Һөҙөмтәлә, кемдәр кортизол ҡабул иткән, ток һуҡҡан фигураларҙы айырыуса яҡшы иҫләгән. Уларҙың тиреһенең токты үткәреү сифаты ла күтәрелгән, был иһә эмоциональ кисерештәрҙең юғары булыуы тураһында һөйләй.

■ Канзас медицина үҙәге ғалимдары кешенең баш мейеһе эшмәкәрлегенә һөт яҡшы тәьҫир яһай, тип белдерә. Һөттөң кешенең баш мейеһендә булған тәбиғи антиоксидант - глутатион менән бәйләнеше бар. Кеше һөт эскәс тә, уның баш мейеһендәге ошо антиоксидант күләме күтәрелә. Һөттөң биологик матдәләре баш мейеһе эшмәкәрлегенә лә ыңғай йоғонто яһай. Һөҙөмтәлә, Альцгеймер һәм Паркинсон ауырыуҙары хәүефе түбәнәйә. Тик һөттө күп эсеү зарарлы, ул ашҡаҙан әселеген арттыра, был иһә ашҡаҙан сирҙәренә алып килә. Һөттө күп ҡулланғанда ул һөйәктәрҙән кальцийҙы "йыуып" сығара.

■ Йоҡоһоҙлоҡ - организм һәм психика өсөн етди һынау. Йоҡоноң сифатына күп факторҙар, мәҫәлән, стрестан башлап генетик ауырыуҙарға тиклем тәьҫир итә, әммә нисек туҡланыуға ла иғтибар итергә кәрәк, ти ғалимдар. Йоҡоһоҙлоҡ менән интегеүселәрҙең рационына банан индерергә кәрәк. Уның составында калий менән магний бар. Триптофан тигән аминокислота серотонин синтезында ҡатнаша. Серотонин иһә "йоҡо гормоны" мелатонинға әйләнә. Шуға ла йоҡларға ятыр алдынан банан ашағыҙ. Шулай уҡ аҡһымға бай йомортка, эремсек, тауыҡ ите йоҡлап китергә ярҙам итер. Бер стакан йылы һөт тә тик файҙаға буласаҡ.

■ Америка тикшеренеүселәре билдәләүенсә, асығыу баш мейеһенә ял итергә мөмкинлек бирә. Оҙайлы ваҡыт асығыу һөҙөмтәһендә нейрондар араһындағы берләшмәләр әүҙемлеге кәмей һәм баш мейеһе көс йыйып ала. Һынауҙар емеш-еләк себендәренең ҡарышлауыҡтарында үткәрелгән. Башта себендәргә аҡһым, һуңыраҡ бөтөнләй ризыҡ бирелмәгән. Өс сәғәт үткәс, нейрондар араһындағы берләшмәләр әүҙемлеге 50 процентҡа кәмегән. Туҡлыҡлы матдәләр булмағас, нейромедиаторҙар аҙыраҡ бүленгән, энергия ҡулланыу кәмегән. Белгестәр иҫәпләүенсә, кешеләрҙә был процесс ошолай уҡ бара. Был асыш ғалимдарға эпилепсия кеүек ауырыуҙарҙы дауаларға мөмкинлек бирәсәк. Асығыу шулай уҡ ябығырға, юғары ҡан баҫымын, холестерин кимәлен төшөрөргә ярҙам итә. Бынан тыш, асығыу стрестан һаҡлай.

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ

# ҠӨРЬӘНДЕ ДӨРӨҪ УҠЫУҒА...

## башҡорт теленең ярҙамы ҙур

**Хаҡлы ялға сыҡҡас, Ҡөрьән-Кәримде уҡырға өйрәнәйем, намаҙға ла баҫырмын, тигән изге ниәт менән Мәләүез ҡала мәҙрәсәһенә барҙым. Фроза Мирсаяпова класында уҡыным. Аллаға шөкөр, әллә ни ҡыйынлыҡһыҙ ғәрәп телендә яҙылған Ҡөрьәнде дөрөҫ итеп уҡырға өйрәндек.**



Шуныһы ҡыуаныслы, изге китапты дөрөҫ уҡыуҙа үҙ телебеҙҙе белеү файҙалы булды. Башҡорт булараҡ, уҡытыусыбыҙ яңылыш, хатта бер генә хәрефте үҙгәртеп уҡыу ҙа ҙур гонаһ булыуын аңлатып, *ҙ, ҫ, ҡ, ғ* хәрефтәрен әйтә алмаған шәкерттәрҙе логопед кеүек өйрәтте. Аҙнаһына ике генә сәғәт уҡыһаҡ та, Ҡөрьәндең изге көсө бөтәбеҙгә лә тәьҫир итмәй ҡалманы. Мәҙрәсәгә барған һайын барғы килә. Фроза Сәйет ҡыҙының фәһемле вәғәздәре менән намаҙға баҫтыҡ. Аңлап уҡыу менән аңламай уҡыуҙың айырмаһы, әлбиттә, ҙур. Алған ғилемебеҙҙең сауабын Аллаһы Тәғәлә бөтәбеҙгә лә ике донъяла ла насип итер тигән өмөттәбеҙ.

Фроза Сәйет ҡыҙының вәғәздәре лә күп нәмәгә күҙҙәребеҙҙе асты. Мәҫәлән, милләтенә ҡарамай, бөтә кешеләрҙең дә күҙ ҡараһы бер ҙурлыҡта була икән. Был Алланың үҙ ҡулдарын бер тигеҙ күреүе һәм уларҙың да бер-береһен, кем булыуына ҡарамаҫтан (ярлымы, баймы, ғалиммы), тиң күреүен теләй. Әгәр бөрәү байлыҡтанмы, дан-шөһрәттәнме, яуызлыҡ йә әхлаҡһыҙлыҡ менән шаша икән, Алланан ҡотола алмай: ҡасан булһа ла язаһын алаһаҡ, үҙе булмаһа - балалары, был донъяла булмаһа - теге донъяла.

Аллаһы Тәғәләгә ысын күңелдән ныҡ ышанып, биш ваҡыт намаҙ уҡып, Ҡөрьән уҡып, изгелек менән йәшәһәң, ҙур сауапҡа өлгәшәһең һәм тән ағзаларыңдың сәләмәтлеге ныҡый, ҡан йөрөшө нормаллаша, һимерәйһең. Сәждәгә киткәндә баш мейеһенә 75 процент глюкоза һәм бөтә кәрәк матдә туплана, кеше тынислана, арымай. Шуға күрә, кешенең хәтере юғалмай, белгән гилемен онотмай. Быға элек Ҡөрьән-Кәримде яттан белеүселәрҙең күп булыуы миҫал булып тора. Әле лә ундайҙар бар, тиҙәр.

Доғаларҙың көсөн элек-электән халыҡ белгән һәм дин әһелдәре Алланың ярҙамы менән медицина көсө етмәгән ауырыуҙарҙы өшкөрөп һауыҡтырған. Мәҫәлән, Баймаҡ районынан Мөжәүир хәҙрәт, Күгәрсен районынан Шәмиғол хәлфә хаҡында ишеткәнем, уҡығаным бар. Уларға хатта Мәскәү, Ленинград һәм сит илдәрҙән килеп, һуҡырҙар бер өшкөрөүҙә күреп, атлай алмағандар атлап ҡайтып киткән. Бына ниндәй Алланың ҡөҙрәте! Улар тик Аллаға хеҙмәт иткән, алдан уҡ килеүсенең маҡсатын, ниәтен, уй-хистәрен белеп торған.

Әлбиттә, элекке изге хәҙрәт, хәлфәләрҙе хәҙерге һәр бер дин әһеле менән сағыштырып булмай. Ҡайһы берәүҙәр, бигерәк тә ҡалаларҙа, хаталы транскрипция менән яҙылған бер нисә доғаны ятлап алып, Ҡөрьән-Кәримде ҡулына тотоп ҡарамаһа ла, мулламын, абыстаймын, тип дини мәжлестәргә йөрөй. Нисек кенә йәшәһәк тә, Алла алдында яуап бирәсәкбеҙ, беҙ Уны алдай алмайбыҙ, шуны бер кем дә оноторға тейеш түгел.

Һүҙемде дауам итеп, Башҡортостан Диниә назараты етәкселәренә үтенесемде еткерәм: ни өсөн Ҡөрьән-Кәримде һәм намаҙҙағы доға, аяттарҙы дөрөҫ итеп уҡырға өйрәнерлек һәм өйрәтерлек башҡорт теле транскрипцияһы менән яҙылған "Тәжүид фәне" дәреслеген, "Һәфтиәк шәриф" һәм башҡа дини китаптарҙы Башҡортостан мосолмандарына етерлек итеп сығармайҙар икән? Ҡөрьәнде уҡырға өйрәнгәндә үк, тел уҡытыусыһы булараҡ, аптырауға ҡалдым. Үрҙә аталған китаптар Ҡазанда сығарылған, һәм ғәрәпсә яҙылған доғалар транскрипцияһы хаталы итеп татар телендә бирелгән. Изге Ҡөрьән-Кәримдең бөтә сүрә-аяттарын дөрөҫ итеп уҡырлыҡ башҡорт телебеҙҙә өн-хәрефтәребеҙ була тора, ниңә *"ҙ"* урынына *"з"*, *"ҫ"* урынына *"с"*, *"ҡ"* урынына *"к"*, *"ғ"* урынына *"г"* *"үә"* урынына "вә" тип хаталы яҙылған сүрәләрҙе, аяттарҙы уҡырға, ятларға тейешбеҙ һуң? Етмәһә, шул китаптар бөтә республика районларына таралған. Һүҙҙең бер генә хәрефен үҙгәртһән, нисәмә төрлө икенсе мәғәнәле һүҙҙәр барлыҡҡа килә, ә доғаларҙағы 4 төрлө хәрефтәрҙе үҙгәртеп уҡый, ятлай башлаһаң, ниндәй "изге, сауаплы" доғалар килеп сыға икән? Ҡөрьәнде ғәрәпсә дөрөҫ уҡырға өйрәнеү өсөн хатаһыҙ транскрипция, "Тәжүид фәне" дәреслеге мотлаҡ. Тағы шуға иғтибар итмәү мөмкин түгел, ул китаптарҙа (авторҙары Н. Думави, Ж. Фазлыев) бирелгән алфавитта ғәрәпсә *[ҫә]*, *[ҙәл]* хәрефтәре янына әйтелеше графигына *[саҡау-сә]*, *[саҡау-з]* тип яҙғандар. Уйлап ҡараһаң, ни выждаһың менән, дин әһеле булараҡ, шул һүҙҙе яҙмаҡ кәрәк! Һаҡау хәрефтәр менән яҙылғас, бөйөк Алланың изге китабы - бөтә донъя халҡына тәрбиә биргән Ҡөрьән-Кәрим теле һаҡау булып сыға. Шулай уҡ уларса *ҙ, ҫ* өндәре булған ғәрәп теле, башҡорт теле һәм бөтә донъя халыҡ-ара аралашыу теле инглиз теле лә һаҡау булып сыға бит, әстәғфируллаһ! Кем хәрефте өнгә әйләндереп дөрөҫ әйтә алмай - шул һаҡау. Аҡылың булһа, хәреф - тамға, уның "һаҡау", "һаңғырау" булыуы мөмкин түгел. Кеше үҙе һаҡау, әгәр берәй хәрефте дөрөҫ итеп өнгә әйләндереп әйтә алмаһа, йә һаңғырау - әйткән өндәрҙе ишетмәһә. Ошондай етешһеҙлектәрҙе беҙҙән алда Диниә назаратындағы дин әһелдәре күрергә, белергә тейеш һәм үҙебеҙҙең Башҡортостан мосолмандары өсөн, телебеҙҙең өҫтөнлөгән файҙаланып, дөрөҫ башҡорт транскрипцияһы менән дини китаптарҙы сығарыуҙы күптән юлға һалырға ваҡыт тип уйлайым. Беҙ Мәләүез мәсетендә һәм китап магазиндарында "Башҡортса дини календар"ҙан башҡа дини китаптар күргәнебеҙ юҡ, Ҡаҙандыҡылар ғына һатыла.

Мин ғорурланам башҡорт булғаныма. Бөйөктәрҙән-бөйөк изге Аллаһҡа рәхмәтлемен. Халҡыбыҙҙың ябайлығы, кешелеклелеге, саф күңеле һәм изгелеклеге өсөндәр, мөғайын, беҙгә биргән ожмахтай еребеҙ һәм донъялағы бөтә кешеләрҙе тәрбиәләүсе изге китап Ҡөрьән-Кәримде дөрөҫ, еңел уҡырлыҡ телебеҙ өсөн! Телебеҙ бай, өн-хәрефтәре төрки, инглиз, немец һәм башҡа сит телдәрҙе еңел өйрәнеү мөмкинлеге бирә. Мәҫәлән, бөйөк ғалимыбыҙ Зәки Вәлиди тиҫтәләгән телде яҡшы белгән. Әгәр телебеҙҙең *ҙ, ҫ, ҡ, ғ, ә, һ, ң, ү, ө* өндәре булмаһа, Америка, Бөйөк Британия университеттарында иркен лекциялар уҡый алмаҫ ине, ул бит олоғайғас илдән сығып китә. Бына ҡайҙа башҡорт теленең файҙаһы!

Аллаһҡа маҡтау яуҙырып, сит телдә һөйләшеүсе милләттәштәргә өндәшәм: башҡорт телен яңынан өйрәнеп, балаларыбыҙға, ейәндәребеҙгә өйрәтәйек, үҙ еребеҙҙә үҙ мөхитебеҙҙе һаҡлап, тынислыҡта, татыулыҡта ҡыуанып йәшәйек, изге Ҡөрьән өндәренә тап килгән телебеҙҙә һөйләшәйек!

**Флүрә ЙӘРМӨХӘМӘТОВА-ХӘСӘНОВА,**
**БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП...

# МИНЕҢ ДӘ БАР ҺЫҒЫМТАЛАРЫМ...

**"Киске Өфө" гәзитенең 14-се һандан башлап "Кинәйәне киңәйтеп" рубрикаһы аҫтында төрлө фәһемле хикәйәттәр баҫыуы һәм уҡыусыларҙы ла фекер ҡорона саҡырыуы мине лә уйланыуҙарға этәрҙе. Шул уйланыуҙарҙан һуң тыуған һығымталарым менән уртаҡлашмаҡсы булдым әле.**

## "Ғалим һәм дөйә ҡыуыусы" (№14)

Ошо риүәйәтте уҡығас, элегерәк ололарҙан ишеткән бер хикәйәт иҫкә төштө. Бер бик уҡымышлы кешенән берәү намаҙ уҡырға өйрәтеүен үтенгән. Белемле кеше дөрөҫөн йөшергән һәм: "Аҡ таш, ҡара таш", - тип уҡы тигән. Был кеше ихлас күңелдән ул өйрәткәнсә намаҙ уҡып йөрөгән. Уның доғалары ҡабул булған. Аллаһының бәрәкәте ошо белеме лә булмаған кешегә төшкән. "Ғилем һәм дөйә ҡыуыусы" кинәйәһендәге ҡояш нурҙары - Аллаһ ризалығы, ә ябай таш - саф күңелле, эскерһеҙ кеше. Ғалимлыҡ - Аллаһтан бирелгән хазина. Тик ошо хазинаны тәкәбберлек, артыҡ маһайыусанлыҡ, һауалылыҡ, хәйләкәрлек кеүек гонаһ йөҙәктары менән "бикләһәң", "ҡояш нурҙары"нан мәхрүм булаһың. Уҡымышлы әҙәм дөрөҫ белемен йөшереп, алдашыу гонаһына батҡан.

Ғөмүмән, ни өсөн кешеләр алдашыуға бара һуң? "Ялағас король" әкиәте хәтерегеҙҙәме? Бар кеше ахмаҡ булып күренмәҫ өсөн алдашыуға бара. Тимәк, кеше алдашҡанда үҙ файҙаһын ғына ҡайғырта, алданған кешене уйлап та бирмәй. Король һынлы король ялағас артын бар халыҡҡа күрһәтеп, уны кәмһетеп, үҙен аҡыллыға һанаһындар өсөн ошо юлға бара. Алдашыусы алданған кеше менән файҙалана, уның ышанысын үҙ мәнфәғәтендә тотона, тимәк, урлаша булып сыға. Урлашҡан кеше фашланыуҙан ҡурҡа һәм ҡурҡаҡҡа әйләнә. Бер гонаһ икенсеһенә алып килә. Һөҙөмтәлә, кеше "ҡояш нурҙары" үтмәҫлек гонаһтар зинданына бикләнә.

Кешенең ерҙә йәшәүенең мәғәнәһе - Аллаһҡа яҡынайыу. Быны өсөн исламдың биш фарызын, имандың ете фарызын үтәү кәрәк, дин ҡанундарын боҙмау, күңел сафлығын булдырыу, бар эштәрҙе лә изге ниәт менән башҡарыу, боҙоҡ эштәрҙән йыраҡ тороу. Былар Аллаһҡа яҡынайта, уҡып белмәһәң дә, Аллаһтан һорап, күңел тойоуы менән яуап алырға мөмкинлегең арта. Ошо бәйләнеште булдырыу өсөн күп тырышлыҡ һалырға, тәүәккәл булырға, сәбәбен ҡылырға кәрәк.

## "Табип бәйғәмбәрҙән айырыламы?" (№15)

Әбыл риүәйәтте уҡығас ҡарға һәм һайыҫҡан тураһындағы бер хикәйәтте хәтерләнем. Элекке заманда бер ҡарға һайыҫҡандың бер һикереп, бер атлап йөрөгәненә күңел биреп, унынса атларға өйрәнергә булған, ти. Әммә ни ҡәҙәр тырышһа ла, һайыҫҡан йөрөшөнөң хикмәттәрен, рәүештәрен тейешенсә белмәгәнлектән, унынса йөрөй алмаған. Ахырҙа, булдыра алмаҫын аңлағас, әүәлге үҙ йөрөшөнә ҡайтмаҡсы булған. Әммә бер аҙ өйрәнгән һайыҫҡан йөрөшөн ташлай алмағанлыҡтан, йөрөгәндә үҙ йөрөшөнә һайыҫҡан йөрөшөн ҡушып, ни үҙ йөрөшөнә, ни һайыҫҡан йөрөшөнә оҡшамаған килбәтәйһеҙ аҙымдар менән атлай башлаған. "Ҡарға һайыҫҡан йөрөүен өйрәнәм тип, үҙ йөрөшөн оноткан", тигән мәҡәл ошонан тороп ҡалған.

"Шуға күрә аҡыл эйәләре әйткән: "Шул кеше наҙандар төркөмөнән һаналыр, әгәр ул булдыра алмаған эште булдырырға тырышып йөрөһә". Әммә аҡыллы кеше ундай эш артынан һис йөрөмәҫ". Әбүғалисина - бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәттең (с.ғ.с) һайлап алынған Аллаһ илсеһе икәнен һәм Ул бәндәләргә дин хөкөмдәрен өйрәтер өсөн ебәрелгән тәүге һәм аҙаҡҡы бәйғәмбәр икәнен аңлаусы аҡыллы кешеләрҙең береһелер. Һәм ул һәр кемдең үҙ йөрөшө булыуын, һәр кем үҙ урынында Аллаһ тарафынан йөкмәтелгән бурысты үтәүен бик яҡшы аңлаған ғалимдыр. Кинәйәнең фәһеме шунда - ҡайҙа ғына, кем булып эшләһәң дә, ниндәй генә дәрәжәләргә эйә булһаң да, бер кемде лә ҡабатламай, үҙең булып ҡалыуың шарт.

## "Хәҡиҡәттең өлөшө генә" (№16)

Хужа Насретдин мәҙәктәренән ҡыҫҡаса ғына: "Хужаның ике күршеһе талашҡан, ти. Бер көндө берәүһе килеп күршеһенә зарланған: "Әйтсе Хужа, мин дөрөҫ әйтәмме?" тип һораған. "Эйе, һинең әйткәнең дөрөҫ", - тигән Хужа. Икенсе көндө икенсе күршеһе килеп, ошо уҡ һорауҙы ҡабатлаған. Хужа уға ла: "Һин дөрөҫтө һөйләйһең", - тигән. Был хәлде тыңлап йөрөгән ҡатыны Хужанан: "Бәхәсләшкән ике кешенең икеһе лә хаҡ булып сыға аламы ни?" - тип һораған. "Эйе, һин дә дөрөҫ әйтәһең", - тип яуаплаған Хужа.

Кинәйәләге бәйғәмбәр юлдашының: "Һин ҡапма-ҡаршы фекерле кешеләрҙең икеһенә лә бер төрлө яуап бирҙең. Аҡты ҡара тип әйтеп булмай ҙа инде", - тигәненә: "Эйе, һин дә дөрөҫ уйлайһың", - тип яуаплағы килә. Һәр кемдең үҙ дөрөҫлөгө. Тик уның фекере әлеге мәл өсөн генә әһәмиәтле. Иртәгәһенә кеше фекере тап киреһенә үҙгәреп китеүе лә мөмкин. Аң кимәленең түбән булыуы, белеме етмәүе сәбәпле, яңылышып, хаталанып йөрөүсе алйот, тиҫкәре кешеләрҙең иртәгәһен ыңғай ҡарашлы булып китеүҙәре лә бик ихтимал. Күнелдәренә үтеп инерҙәй аңлатыусылы ғына етмәй торалыр. Берәй вәғәз тыңлағандан һуң, уларҙың ыңғай яҡҡа үҙгәрмәүҙәре мөмкин түгел. Тиҫкәреләрҙең изге күңелле кешеләр булып китеүен күргән, улар тураһында насар ҡараште булған дин әһеленең, ҡалай яңылыш фекерҙә булғанмын, тип, үҙ нәүбәтендә фекере үҙгәреүен дә фаразларға була. Донъяла изгелек тә бар, яуызлыҡ та. Шулай ҙа изгелек күберәк. Ниәттәрең изге булһа, башҡаларҙа күҙгөлә һымаҡ сафлығыңды, кешеләрҙең яҡшы яҡтарын, изгелекле булыуҙарын күрерһең. Ошоларға сәбәпсе бул, тәүәккәллә.

## "Бер ҡыйыҡ башы, ике төрлө донъя" (№17)

Бер уйлағанда, был риүәйәттәге ҡәйнә кире образ һымағыраҡ ҡабул ителә. Ләкин... Донъя һөйөүҙән торалыр. Иң тәүҙә беҙ Аллаһҡа һөйөүебеҙҙе белдерәбеҙ, унан ата-әсәгә, тормош иптәшенә, балаларға, яҡындарға, тыныштарға һәм башҡаларға. Әммә һөйөүҙе фанаттарса тик бер объектҡа ғына йүнәлтеү дөрөҫ түгелдер. Кинәйәләге әсә кеше килене менән улының эргәләрендәге яҡын кешеләрен онотоборaҡ китеп, ололарҙан тартынмай, саманан аштырып, бәлки, шаштырып ебәргән мөнәсәбәттәрен күреп, киленен яратмағандан түгел, киреһенсә, уларға яҡшылыҡ теләп ҡурсалай, тәрбиәләйҙер. Үтә ҡыҙылдың тиҙ унып, ә үтә әҫәлә янып ҡуйыуын бар икәнен иҫкәртәләр. Шул рәүешле балаларының араһын көйләй, тигеҙләйҙер. Килен кеше ҡәйнәһенең, бер ҡараһаң, усалыраҡ та булып күренгән ҡылығына ҡаршылашмай ҙа, сәбәләнмәй ҙә, әрләшмәй ҙә - үҙенсә ризалаша. Аңлы ҡәйнә - аңлы килен.

Ә ҡыҙы менән кейәүенең араһы ни сәбәп менәндер бер аҙ һыуына төшкәнен аңлаған әсә, уларҙы, киреһенсә, бер-береһенә яҡынайта, араларын тағы ла тигеҙләй, күрәһең. Йәш кешеләрҙең үҙ-ара мөсәбәттәрен көйләүсе, килешеп етмәгән ерҙәрен төҙәтеп, тигеҙләүсе, тәрбиәләүсе әсә маҡтауға лайыҡтыр. Кинәйәнең мәғәнәһе шулдыр - ике донъяңды ла тигеҙ алып бар. Мәңге йәшәйем тип, донъя көт, мал тап, балалар үҫтер, йорт һал. Рухи донъяңды ла онотма, иртәгә үлеп ҡуйыуың бар тип, әхирәтте лә ҡайғырт. Дин ҡушҡандың барыһын да үтәү өсөн тырышлыҡ һал, тәүәккәл бул, сәбәбен ҡыл.

## "Үҙ-үҙеңде күңел төрмәһенә бикләмә" (№18)

Батша менән вәзирҙәр тураһындағы кинәйәләге батша - ул Яҙмыш, вәзирҙәр - беҙ үҙебеҙ, кешеләр. Ишек - ул быға тиклем ишетелмәгән, күрелмәгән ниндәйҙер бер яңы эш, шөғөл, ғәмәл, ғилем, белем, рухи үҫеш. Ишеккәге ҙур йоҙаҡ - ошо яңы шөғөлдән сере, башы. Кинәйәнең мәғәнәһе нимәлә һуң? Яҙмыштың һынауында, кешеләрҙе һайлау алдына ҡуйыуында.

Берәй яңы эш тыуып торғанда, ниндәй өлкәлә булһа ла, ҡыҙыҡһыныу менән, ныҡышмаллыҡ, тәүәккәллек, ҡыйыулыҡ, иң мөһиме, изге ниәт менән тотонһаң, баштa ҡатмарлы булып күренгән эштең серҙәре, йоҙаҡтары асыласаҡ. Тырышып, оҫталығыңды арттырып, камиллаштырып, юғары кимәлгә күтәрһәң - ошо була инде кинәйәләге батша вәғәҙә иткән юғары вазифа. Бары тик ҡырҡ һылтау табып, ҡурҡып ҡына ҡалма. Яҙмыш һынауҙарын үткәндә, ҡайһы юлдан барыуың үҙеңдән генә тора. Һиңә һайлау хоҡуғы бирелгән. Һинең һайлау ирекең, ихтыяр ирекең бар. Ошо була инде азатлыҡ.

Ә бына 25 йыл төрмәлә ултырған тотҡондоң бикле мөләндә һайлау ирекe булғанмы? Әлбиттә, булған. Йә үтә ныҡ төшөнкөлөккә бирелеп, үҙенде-үҙең бөтөрөү, йә бар сабырлыҡтарыңды туплап, бер ваҡыт ирекка сығыуыңды ҙур өмөттәр менән көтөү.

Кинәйәләге тотҡон, бәлки, ишектең асыҡ икәнлеген белмәгәндер ҙә. Ни өсөн сығып ҡасмаған? Лира Яҡшыбаеваның "Мөжәүир хәҙрәт" китабында хәҙрәттең төрмәлә ултырған сағында йоҙаҡтарҙы асҡысһыҙ асып, сығып йөрөүе тураһында уҡып беләбеҙ. Мөмкинлеге була тороп, ни өсөн ул ҡасмаған? Сөнки яҙмыш тарафынан бирелгән тотҡонлоҡ имтиханын үтергә тейешлеген һәм, әгәр ҙә ҡасһа, бер тотҡонлоҡтан икенсеһенә - ҡасҡынлыҡ тотҡонлоғона бикләнеүен аңлауҙандыр. Тимәк, эш йоҙаҡтарҙа ғына түгел. Ҡайһы юлдан барыуыңды һайлай белеүҙә. Эш ихтыяр азатлығында. Кинәйәнең фәһеме шундалыр - Аллаһы Тәғәлә кешеләргә юл һайлау хоҡуғын, ихтыяр ирекен биргән. Әгәр кеше ихтыярын яҡшылыҡҡа йүнәлтһә, Аллаһ яҡшылыҡты булдыра, насарлыҡҡа йүнәлтһә, насарлыҡты бар итә. Насип итеүсе - Аллаһы Тәғәлә, сәбәпсеһе кеше үҙе.

**Гөлйемеш БИКЙӘНОВА.**
**Учалы районы Уральск ҡасабаһы.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

## Хаҡлы икәнемде беләм

Ҡыҙыҡмы? Барыбыҙ ҙа донъяны төрлөсә күҙ алдына килтерәбеҙ, әммә шул уҡ ваҡытта үҙебеҙҙең тормош тураһындағы күҙаллауыбыҙҙы дөрөҫ тип уйлайбыҙ. Ни өсөн шулай килеп сыға? Сөнки шулай! Мәҫәлән, кемдер тормош - туҡтауһыҙ көрәш, аҙнаһына 70 сәғәт эшләмәһәң, йәшәп булмай, тип уйлай. Ҡапыл гәзиттә күрше кварталда урынлашҡан офиста эш барлығы тураһында иғлан күреп ҡала: "Һығылмалы график, донъя буйлап сәйәхәт итеү мөмкинлеге, эш автомобиле, ҙур эш хаҡы". "Булыуы мөмкин түгел, бында ниндәйҙер этлек бар", - тип уйлай ул һәм гәзитте артабан аҡтара. Икенсе иғланда офис ҡаланың икенсе осонда, машинала ике сәғәт барырға кәрәк. Эштән машина бирелмәй, сәғәтеминутына тиклем эштә булырға тейешһең, эш хаҡы ла исем өсөн генә. "Белешергә кәрәк", - тип уйлай кеше. Хатта ул һөйләшеүгә барып, шунда эшкә урынлаша. Ни өсөн? Сөнки үҙенең тормош ауырлыҡтары тураһындағы шәхси теорияһын үҙенә һәм башҡаларға раҫларға кәрәк бит. Эйе, ул ауыр йәшәй, хатта үҙенең бәхетһеҙ булыуы менән бәхетле, һәм ул хаҡлы! Бала саҡта һәм үҫмер йылдарында беҙ даими рәүештә уҡытыусыларҙан, ата-әсәләрҙән, дуҫтарҙан: "Математикала - һин ноль. Ҡолағыңа айыу баҫҡан. Яҙыуың тауыҡ тәпәйе менән баҫып сыҡҡан кеүек", - тигән һүҙҙәр ишетәбеҙ. Нигеҙҙә улар беҙгә: "Тормош - ул ауырлыҡ. Һинең бер ваҡытта ла аҡсаң да булмаясаҡ, һәм бында хөкүмәт ғәйепле... Бына һиңә тормош сценарийы. Хәҙер ошо тормошто йәшә!" - ти. Беҙ, театрҙағы актерҙар кеүек, ошо сценарий буйынса йәшәйбеҙ. Уға ышанабыҙ ғына түгел, хатта тормошобоҙҙо емерергә рөхсәт итәбеҙ. Әгәр кешегә ошо йәшәнә тиклем йәшәгән инаныуҙарынан азат булырға кәрәк, тиһәгеҙ, ул көйөп китер. Күптәребеҙ бәхетле булыуға ҡарағанда хаҡлы булыуҙы өҫтөн күрә.

## Мин кем?

Һәр кемебеҙҙең үҙ "легендаһы", йәғни үҙебеҙ теләп таҡҡан "ярлығы" бар. Мәҫәлән, "мин - уҡытыусы", "мин - өләсәй", "мин - прогрессив кеше" һ. б. Был "легенда"лар мейебеҙгә һалынып, компьютер программаһы аша тотош тормошобоҙ менән идара иткән кеүек. Уларҙы бөтөн ергә эйәртеп йөрөтәбеҙ. Төрлө компанияларҙа тирә-яҡтағыларҙы ошо "легенда"лар менән ялҡытып бөтөрәбеҙ... "Ирем ташлап китте", "Бала сағым ауыр булды", "Мин асылымды аңлау юлына баҫтым!" Тормошобоҙ уларға тап килергә тырышып үтә. Ролдәргә тап килер өсөн машина алабыҙ, кейем генә түгел, хатта дуҫтарҙы ла һайлайбыҙ. "Легенда"ға тап килер өсөн үҙебеҙҙе бәхеттән мәхрүм итәбеҙ. Мәҫәлән, минең ярлығым "мәктәп уҡытыусыһы" икән, әгәр мине эштән ебәрһәләр, кем булып ҡаласаҡмын? Әгәр үҙемде "идеаль йорт хужаһы" тиһәм, байрам кисәһендә нимәләр килеп сыҡмаһа йә бөлеш көйөбөрәк китһә, нимә кисерәсәкмен: глобаль һәләкәт! Ә асыл нимәлә. Беҙ - үҙебеҙ уйлап тапмаған тормош тарихы тирә-яҡтағыларҙың береһен дә ҡыҙыҡһындырмай. Беҙ бер ниндәй категорияларға ла ҡарамайбыҙ һәм теге йәки был сорттың әҙер продукттары түгел. Бары тик тормош буйлап төрлө кисерештәр һәм ваҡиғалар араһынан барабыҙ. "Легенда"ны һөйрәп барыуҙан туҡтау менән "унда яҙылған ролде уйнау" зарурлығы ла бөтәр.

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**



## 19 ИЮНЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 03.45 "Наедине со всеми" (16+).
13.20, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Пусть говорят" с Андреем Малаховым (16+).
21.30 "Время".
21.30 "Мажор-2". 51-я серия. Криминальный сериал (16+).
23.25 "Вечерний Ургант" в Санкт-Петербурге"(16+).
23.55 "Познер" (16+).
00.55 Ночные новости.
01.10, 03.05 "Смертельное падение". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Пыльная работа". Детективный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Дед Мороз в гневе". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Плюс любовь". Часть 4-я. Мелодраматический сериал (16+).
23.25 "Специальный корреспондент" (16+).
01.45 "На солнечной стороне улицы". Сериал (12+).

### БСТ

07.00 "Сәләм" (12+).
10.00 "Криминальный роман". Сериал (16+).
11.00 Новости недели.
11.45 "Специальный репортаж" (12+).
12.00 "Счастливый час".
13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).
14.00 "Автограф" (12+).
14.30, 18.30, 22.45 Новости (на башк. яз.).
14.45, 16.45, 19.00, 21.00 "Интервью" (12+).
15.00 "Наука 102" (6+).
15.30 "Книга сказок".
15.45 "Байтус" (6+).
16.00 "Гора новостей".
16.15 "Перекличка" (6+).
16.30, 17.30, 21.30 Новости.
17.15 "Неизвестный Башкортостан" (12+).
17.45 "Красная кнопка" (16+).
19.15 "Бай бакса" (12+).
19.45 "Сәңгелдәк".
20.00 "Телецентр".
20.45 "Бизнес проба" (12+).
22.00 "Спортбар".
23.15 "Фантастическое путешествие". Худ. фильм (12+).
По окончании: Новости (на башк. яз.).
01.30 "Бәхетнамә" (12+).
02.30 Г.Шафиков. "Операция" (12+).

## 20 ИЮНЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15 "Наедине со всеми" (16+).
13.20, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Давай поженимся!" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Первая студия". Прямой информационный канал (16+).
19.50 "Пусть говорят" с Андреем Малаховым (16+).
21.30 "Время".
21.30 "Путин". Док. фильм Оливера Стоуна. Часть первая.
22.40 "Мажор-2". 2-я серия (16+).
23.40 "Вечерний Ургант" в "Санкт-Петербурге" (16+).
00.15 Ночные новости.
00.30 "Звездная карта". Худ. фильм (18+).
02.35, 03.05 "Суп". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Пыльная работа". Детективный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Кровь и кетчуп". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Плюс любовь". Часть 5-я. Мелодраматический сериал (16+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.45 "На солнечной стороне улицы". Драматический сериал (12+).

### БСТ

07.00 "Сәләм" (12+).
10.00 "Криминальный роман". Сериал (16+).
11.00 "Мистический Башкортостан" (12+).
11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.
11.45 "Бизнес проба" (12+).
12.00 "Счастливый час".
13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).
14.00 "Күңелем моңдары" (12+).
14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).
14.45, 16.45, 19.00, 21.00 "Интервью" (12+).
15.00 "Дорога к храму" (6+).
15.30 "Йырлы кәрәҙ".
15.45 "Бауырһаҡ" (6+).
16.00 "Гора новостей".
16.15 "Семәр" (6+).
17.15 "Криминальный спектр" (16+).
17.45 "Дознание" (16+).
18.15 "Неизвестный Башкортостан" (12+).
19.15 "Автограф" (12+).
19.45 "Сәңгелдәк".
20.00 "Телецентр".
20.45 "Деловой Башкортостан" (12+).
22.00 "Уфимское "Времечко" (12+).
23.00 "Больница". Худ. фильм (16+).
По окончании: Новости (на башк. яз.).
01.15 "Бәхетнамә" (12+).
02.15 Р.Нурлыгаянов. "Озеро моей души" (12+).

## 21 ИЮНЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10, 04.20 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15 "Наедине со всеми" (16+).
13.20, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Давай поженимся!" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Первая студия". Прямой информационный канал (16+).
19.50 "Пусть говорят" с Андреем Малаховым" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Путин". Док. фильм Оливера Стоуна. Часть вторая.
22.40 "Мажор-2". 3-я серия (16+).
23.40 "Вечерний Ургант" в Санкт-Петербурге" (16+).
00.15 Ночные новости.
00.30 "Молчание ягнят". Худ. фильм (18+).
02.45, 03.05 "Моложе себя и не почувствуешь". Худ. фильм (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Пыльная работа". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Гибельный код". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Плюс любовь". Мелодраматический сериал (12+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.45 "На солнечной стороне улицы". Драматический сериал (12+).

### БСТ

07.00 "Сәләм" (12+).
10.00 "Криминальный роман". Сериал (16+).
11.00 "Наука 102" (12+).
11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.
11.45 "Криминальный спектр" (16+).
12.00 "Счастливый час".
13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).
14.00 "Тәмле" (12+).
14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).
14.45, 16.45, 19.00, 21.00 "Интервью" (12+).
15.00 "У дачи" (12+).
15.30 "Городок АЮЯ".
15.45 "Ал да гөл".
16.00 "Гора новостей".
16.15 "Физра" (6+).
17.15 "Дорожный патруль" (12+).
17.45 "Георгий Данелия" (12+).
19.15 "Үткән ғүмер" (12+).
19.45 "Сәңгелдәк".
20.00 "Телецентр".
20.45 "Полезные новости" (12+).
22.00 "Историческая среда" (12+).
23.00 "Возврата нет". Худ. фильм (16+).
По окончании: Новости (на башк. яз.).
01.30 "Бәхетнамә" (12+).
02.30 А.Яхина. "Не ломайте крылья" (12+).

## 22 ИЮНЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10, 04.25 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 03.30 "Наедине со всеми" (16+).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/женское" (16+).
17.00 "Давай поженимся!" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Первая студия". Прямой информационный канал (16+).
19.50 "Пусть говорят" с Андреем Малаховым" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Путин". Док. фильм Оливера Стоуна. Части третья и четвертая.
23.45 "Вечерний Ургант" в Санкт-Петербурге" (16+).
00.20 Ночные новости.
00.35 "На ночь глядя" (16+).
01.30, 03.05 "Приключения Форда Ферлейна". Худ. фильм (18+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести - Башкортостан".
11.55 "Пыльная работа". Сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести - Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Чистосердечное признание". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести - Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир" (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести - Башкортостан".
21.00 "Плюс любовь". Часть 7. Мелодраматический сериал (12+).
23.15 "Поединок". Программа Владимира Соловьева (12+).
01.10 Торжественное открытие 39-го Московского международного кинофестиваля.
02.25 "Сорокапятка". Худ. фильм (12+).
04.25 "Города воинской славы. Кронштадт" (12+).

### БСТ

07.00 "Сәләм" (12+).
10.00 "Курортный туман". Сериал (16+).
11.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).
11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.
11.45 "Дорожный патруль" (16+).
12.00 "Счастливый час".
13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).
14.00 "Бай" (12+).
14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).
14.45, 16.45, 19.00, 21.00 "Интервью" (12+).
15.00 "Неизвестный Башкортостан" (12+0.
15.15 "ДОСААФ: испытано на себе" (12+).
15.30 "Борсаҡ".
15.45 "Фанташ" (6+).
16.00 "Гора новостей".
16.15 "Йырлы кәрәҙ".
17.15 "Криминальный спектр" (16+).
17.45 "Клио" (12+).
19.15 "Башҡорттар" (6+).
19.45 "Сәңгелдәк".
20.00 "Телецентр".
20.45 "Полезные новости" (12+).
22.00 "Уфимское "Времечко".
23.00 "Бандиты". Худ. фильм (16+).
По окончании: Новости (на башк. яз.).
01.45 "Бәхетнамә" (12+).
02.45 Ф.Буляков. "Похищение стариков" (12+).

## 23 ИЮНЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00 Новости.
09.10, 05.30 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 04.30 "Модный приговор".
12.15 "Наедине со всеми" (16+).
13.20, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым" (16+).
19.50 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Победитель".
23.10 "Вечерний Ургант" в Санкт-Петербурге". Развлекательное шоу(16+).
23.55 "Фарго". Худ. фильм (18+).
01.00 "Джон и Мэри". Худ. фильм (16+).
02.50 "Лучший любовник в мире". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Пыльная работа". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Семейные ценности". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести ПФО".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Юморина" (16+).
23.20 "Мой белый и пушистый". Мелодрама (12+).
01.25 "По семейным обстоятельствам". Худ. фильм.

### БСТ

07.00 "Сәләм" (12+).
10.00 "Курортный туман". Сериал (16+).
11.00 "Автограф" (12+).
11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.
11.45 "Криминальный спектр" (16+).
12.00 А. Хусаинов. "Бандабикэ и Еранса Сэсэн" (12+).
13.45 "Күңелем моңдары" (12+).
14.00 Республиканский праздник курая (г.Октябрьский) (6+).
14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).
14.45 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).
15.30 "Сулпылар".
15.45 "Шәп арба" (6+).
16.00 "Перекличка".
16.15 "Зеркальце" (6+).
16.45 "Моя планета Башкортостан" (12+).
17.15, , 20.45, 23.30 "Полезные новости" (12+).
17.45 "Специальный репортаж" (12+).
18.00 "Йома".
19.00 "Алтын тирма".
19.45 "Сәңгелдәк".
20.00 "Бала-сага" (6+).
21.00 "Аль-фатиха" (6+).
22.00 "Наука 102" (6+).
23.00 "Песня года" (12+).
23.45 "Неоспоримый: возмездие". Худ. фильм (16+).
По окончании: Новости (на башк. яз.).
02.00 Софокл. "Царь Эдип" (12+).

## 24 ИЮНЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Наедине со всеми" (16+).
07.00 "Вий". Худ. фильм (12+).
08.35 "Смешарики. Новые приключения".
08.45 "Смешарики. ПИН-код".
09.00 "Играй, гармонь любимая!"
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости.
10.15 К юбилею актрисы. "Наталья Варлей. "Свадьбы не будет!" (12+).
11.20 "Смак" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.15 "На 10 лет моложе" (16+).
14.00 "Вокруг смеха".
15.45 "Это касается каждого" (16+).
16.50 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Точь-в-точь". Шоу перевоплощений (16+).
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
23.00 "Вкус чудес". Мелодрама (16+).
00.50 "Жажда скорости". Боевик (12+).
03.15 "Гром и молния". Худ. фильм (16+).
05.00 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1

05.20 "Похищение Евы". Сериал (12+).
07.10 "Живые истории".
08.00 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.20 "Сто к одному". Телеигра.
10.10 "Пятеро на одного". Развлекательно-интеллектуальное шоу.
11.00 "Вести".
11.20 "Вести-Башкортостан".
11.40 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Отцовский инстинкт". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
18.00 "Субботний вечер".
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Любовь говорит". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
00.50 "Судьба Марии". Мелодрама (12+).
02.50 "Марш Турецкого-3". Сериал (12+).

### БСТ

07.00 "Доброе утро!" (12+).
07.45, 12.30, 18.30, 22.30, 01.45 Новости (на башк. яз.).
08.00 "Морская бригада".
09.30 "Здоровое решение" (12+).
10.00 "У дачи" (6+).
10.30 "Большой чемодан" (6+).
11.15 "Клио" (6+).
12.00 "Мистический Башкортостан" (12+).
13.00 "Бай" (12+).
13.30 "Автограф" (12+).
14.00 "Дарю песню" (12+).
16.00 "Байык-2017" (12+).
17.00 Республиканский праздник курая (г.Октябрьский) (12+).
19.00 "Листок" (12+).
19.30 "Замандаш" (6+).
19.45 "Сәңгелдәк".
20.00 "Колесо времени" (12+).
21.00 "Полезные новости" (12+).
21.15 "Стройки Уфы. Народный контроль" (12+).
21.30 Новости.
22.00 "Следопыт" (12+).
23.00 "Башҡорт йыры-2017" (12+).
23.45 "В поисках янтарной комнаты". Худ. фильм (12+).
02.15 К.Гольдони. "Слуга двух господ" (12+).

## 25 ИЮНЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Ералаш".
06.50 "Перед рассветом". Военная драма (12+).
08.25 "Часовой" (12+).
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости.
10.15 "Ураза-Байрам". Трансляция из Уфимской соборной мечети.
10.55 "Непутевые заметки" с Дм.Крыловым.
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.15 "Теория заговора" (16+).
14.10 "Маршалы Победы" (16+).
16.20 "Берлин 41-го. Долетали сильнейшие" (12+).
17.45 "Аффтар жжот" (16+).
18.50 Концерт Максима Галкина.
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Что? Где Когда?" Летняя серия игр.
23.40 "Тайные общества. Маски конспираторов" (16+).
00.40 "Опасный Джонни". Комедия (16+).
02.25 "Приятная поездка". Драма (16+).
04.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00 "Похищение Евы". Худ. фильм (12+).
06.55 "Мультутро". "Маша и Медведь".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Утренняя почта".
09.00 "Смеяться разрешается". Юмористическая программа.
11.00 "Вести".
11.20 "Вести - Башкортостан. События недели".
12.00 Праздник Ураза-Байрам. Прямая трансляция из Московской Соборной мечети.
12.55 "Сто к одному". Телеигра.
14.00 "Вести".
14.20 "Поздние цветы". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
18.00 "Концерт номер один". Денис Мацуев, "Синяя Птица" и друзья в Кремлевском дворце.
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
00.30 "Под кодовым именем "Анита".
01.30 "Испытательный срок". Худ. фильм.
03.35 "Смехопанорама" Евгения Петросяна".

### БСТ

07.00 "Праздник веры и добра" (12+).
07.45 Новости (на башк. яз.).
08.00 "Колобанга".
09.00 "Ураза-Байрам". Прямая трансляция из мечети "Ляля-Тюльпан".
10.00, 18.00 "Йома".
10.30 "Байтус" (6+).
10.45 "Ал да гөл".
11.00 "Сулпылар".
11.15 "Йәйләү" (6+).
11.45 "Алтын тирмә" (12+).
12.30 Новости недели (на башк. яз.).
13.00 "Тәмле" (12+).
13.30 "Башҡорттар" (6+).
14.00 "Дарю песню" (12+).
15.00 "Млечный путь" (12+).
16.00 "Дорога к храму".
16.30 "Историческая среда" (12+).
17.00 "Ураза-Байрам". Повтор трансляции.
18.30 Поет Радик Динахметов (12+).
19.00 "Большой чемодан" (6+).
19.45 "Бизнес-обзор" (12+).
20.00 "Байык-2017" (12+).
21.00 "Дознание" (16+).
21.30 Новости недели.
22.15 "Специальный репортаж" (12+).
22.30 "Красная кнопка" (16+).
23.15 "Вечер.com" (12+).
24.00 "Свидание с джазом" (12+).
01.00 "Семейный отпуск". Худ. фильм (16+).
02.45 Т.Рэгтиган. "Дама без камелий" (12+).

✓ *Өфө амфитеатры сәхнәһенә тәүгә 200-гә яҡын кешенән торған ҡурайсылар ансамбле сыға. Быныӊ өсөн баш ҡалаға республика райондарынан коллективтар саҡырылған.*



ШУНДАЙ ХӘЛДӘР...

# ЕВРАЗИЯ ЙӨРӘГЕ - ӨФӨЛӘ




**"Евразия йөрәге" Халыҡ-ара сәнғәт фестивален бөтөн донъя күҙәтә ала. 15 июндән 18-нә ҡәҙәр онлайн-трансляция сараныӊ рәсми сайты аша бойомға ашырыла. "Берҙәмлек" Халыҡ-ара милли мәҙәниәттәр фестиваленеӊ гала-концерты Рәсәй көнөндә фестивалде асты ла инде. 15 июндә тәүгеләрҙән булып программаны танылған сәнғәт оҫталары Илһам Вәлиев, Артур Ҡәйепҡолов, Гөлнара Вәлиева, виолончелдә уйнаусы Рөстәм Хәмиҙуллин, флейтасы Инна Фоменко һәм башҡалар ҡатнашлығында Йәштәр симфоник оркестры асты.**

16 июндә лә программа бай булды: ул З. Вәлиди урамы буйлап милли кейемдәр парады менән асылды, байрамды 300-гә яҡын гармунсы һәм баянсы ҡатнашлығында "Уйна, гармун" фестивале дауам итте, Этнотөндә "Иван Купала", "Хартыга" (Тыва республикаһы), "Trad attack" (Эстония) этно-төркөмдәренеӊ сығыштары булды. Башҡортостандан "Zainetdin" проекты һәм "Арғымаҡ" төркөмө ҡатнашты.

Бөгөн, 17 июндә, сараны Милли симфоник оркестр һәм йондоҙ-солистар дауам итә, улар араһында бөтөн донъяға билдәле яҡташыбыҙ Аскар Абдраҙаҡов бар. Оркестр менән шулай уҡ Мария театры солисы Эдем Умеров (баритон), Гөлнара Низамова (Кубань, сопрано), Михаил театры солисы, П.И. Чайковский исемендәге XIII Халыҡ-ара конкурста икенсе премияға лайыҡ булған Олеся Петрова (меццо-сопрано), классик гитарала виртуоз башҡарыусы Ровшан Мамедкулиев сығыш яһай. Концертта Башҡортостандыӊ Т. Сәйфуллин исемендәге Дәүләт академия хор капеллаһы ла ҡатнаша.

Һуӊғы кисте 18 июндә "Мираҫ" йыр һәм бейеү фольклор ансамбле аса. Фестиваль "Өфө - Ҡурайфест" концерты менән тамамлана. Тамашасылар Башҡортостандыӊ Милли халыҡ уйын ҡоралдары оркестры, ҡурайсылар Азат Айытҡолов, Роберт Юлдашев һәм "Курайсы" төркөмө, "Ятаған" этно-төркөмө, Мәскәүҙеӊ "Zaman" төркөмө сығыштарын ҡарай ала. Өфө амфитеатры сәхнәһендә тәүгә 200-гә яҡын кешенән торған ҡурайсылар ансамбле сыға. Быныӊ өсөн баш ҡалаға республика райондарынан коллективтар саҡырылған.

"Беҙҙеӊ фестиваль Рәсәйҙеӊ генә түгел, бөтә донъя фестивалдәре араһында ла төп урын биләүгә лайыҡ. Бындай сараны һәр ил ойоштора алмай. Беҙ сираттағы тапҡыр Башҡортостан һәм уныӊ халҡы донъя граждандары икәнен күрһәтәбеҙ", - тип билдәләне фестивалдеӊ директоры Айҙар Зөбәйҙуллин.

# КИТАПТАР ЕӉЕҮ ЯУЛАНЫ



**Мәскәүҙә "Ҡыҙыл майҙан" китап фестивале үтте. Иӊ яҡшы китаптар күргәҙмәһе Василий Блаженный ҡорамынан алып Тарихи музейға тиклем арауыҡты биләне. Ҡыҙыл майҙан ошо дүрт көнгә Китап майҙанына әйләнде, яӊы гуманитар киӊлек - әҙәби, музыкаль, театраль, тарихи үлсәмгә эйә булды. Быйыл фестиваль өсөнсөгә уҙғарылды. Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте төп әҙәби байрамда йыл һайын ҡатнашып килә.**

"Китап" нәшриәте эшмәкәрлеге фестивалдә лайыҡлы баһа алды, ул өс диплом яуланы. Рәсәй китап нәшер итеүселәре ассоциацияһына "Иӊ яҡшы йыл китабы"на тәҡдим ителгән Сергей Аксаковтыӊ "Ал сәскә" китабы мәҙәни мираҫты популярлаштырғаны өсөн Рәсәй Китап союзыныӊ дипломын алды. "Мәҙәниәттәр диалогына өлөш индереүсе иӊ яҡшы баҫма" номинацияһында Рәсәй китап нәшер итеүселәре ассоциацияһыныӊ дипломы менән Эльза Мирнанованыӊ "Башҡорттар. Традицион туҡланыу системаһы: тарихи-этнографик тикшеренеү" тигән китабы баһаланды. Матбуғат һәм киӊ коммуникациялар буйынса федераль агентлыҡтыӊ "Кесе Ватан" XIII Бөтә Рәсәй төбәк һәм крайҙы өйрәнеү әҙәбиәте конкурсыныӊ "Тыуған төйәгебеҙҙеӊ кешеләре" номинацияһында финалист дипломына Флүрә Әхмәрованыӊ "Хәтер биттәре" китабы лайыҡ булды.

# "ҠАРАУАНҺАРАЙ" ЙӘНӘ СӘХНӘЛӘ



**Өфөлә "Евразия йөрәге" фестивалендә "Ҡарауанһарай" фольклор-эстрада төркөмөнөӊ беренсе составы сығыш яһаясаҡ. Артур Туктағолов, Рәсүл Ҡарабулатов, Вилдан Яруллин, Әмир Тойғонов һәм Мөхмүт Нәҙершин составындағы легендар төркөм сығышы фестивалдеӊ йомғаҡлау көнөндә - 18 июндә буласаҡ.**

"Был тәҡдим фестивалде ойоштороусылар тарафынан яӊғыраны һәм беҙ унда "Ҡарауанһарай" һәм "Ҡурай" йырҙарын башҡарасаҡбыҙ", - ти Башҡортостандыӊ халыҡ артисы Рәсүл Ҡарабулатов. Уныӊ әйтеүенсә, төркөмдөӊ элекке составы халыҡ араһында әле лә билдәле. 2016 йылда төркөм республиканыӊ күп кенә ҡала һәм районларында, шулай уҡ Ырымбур өлкәһендә гастролдәр менән булған. Музыканттар элекке йырҙарға аранжировкалар эшләргә лә йыйына.

"Ҡарауанһарай" төркөмө 1990 йылда барлыҡҡа килә. Уныӊ төп үҙенсәлеге булып ҡурай менән заманса эстрада ансамблен бергә яӊғыратыу була. 1991 йылда төркөм Чечен-Ингуш Республикаһында үткән Бөтөн Рәсәй рок һәм поп төркөмдәр конкурсында беренсе премияға лайыҡ була. 1992 йылда Алматыла "Азия тауышы" Халыҡ-ара конкурсында дипломант була. "Сыӊрау торна" композицияһы бер нисә ай немец радиоһы хит-парадында төп урынды биләй. 1994 йылда төркөм Төркиәгә Халыҡ-ара йәштәр фестиваленә саҡырыла. Һуӊынан Силәбе һәм Пермь өлкәләрендә, Татарстанда һәм Чечен-Ингуш Республикаһында, Төмән һәм Ырымбур өлкәләрендә гастролдәрҙә йөрөп ҡайта. 1995 йылда төркөм Башҡорт дәүләт филармонияһы составына инә.

# БАШҠОРТ ЙӘШТӘРЕ КӨНӨ




**Башҡорт йәштәре көндәренеӊ программаһы билдәле булды. Матур йолаға әүерелгән сараны 27-30 июлдә Баймаҡ районыныӊ Граф күле буйында уҙғарыу күҙалланған.**

Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетыныӊ матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, уҡ атыу, көрәш, гер күтәреү буйынса спорт ярыштарын ойоштороу көтөлә. "Илемдеӊ алтын ҡуллы йәштәре" тигән биҙәүестәр күргәҙмә-йәрминкәһе үтәсәк. Быйыл тәүгә тапҡыр байрам барышында фольклор фестиваль-конкурсы уҙасаҡ. Әле уҡ "Бәйләнештә" селтәрендә "Башҡортостан минеӊ йөрәгемдә" конкурсына ватансылыҡ йырҙарыныӊ видеороликтары ҡабул ителә. "Мин башҡорт кейемендә!" фотоконкурсына йомғаҡ яһаласаҡ, енеүселәр сәхнәгә дефилеға сығасаҡ. Ҡурайҙа һәм ҡумыҙҙа уйнау, "Өләсәйем һандығы" милли биҙәүестәр әҙерләү буйынса оҫталыҡ дәрестәре ойоштороласаҡ.

# МИЛЛИ ПАРК СИМВОЛЫ - АЛТЫН



**"Башҡортостан" милли паркыныӊ символы - айыу балаһы өсөн иӊ яҡшы исем конкурсына йомғаҡ яһалды. Социаль селтәрҙә тауыш биреү барышында бәләкәй айыуға Айыухан, Айман, Умка, Теди, Башҡорт, Урал, Цезарь, Тағанай, Миша, Жора, Копатыч, Медолюб, Сан Саныч кеүек ҡушаматтар бирергә тәҡдим ителде.**

Бынан тыш, айыу балаһына "Дибаш" (дикий башкир - ҡырағай башҡорт) йәки БаНаП (Башкирский национальный парк - Башҡортостан милли паркы) тигән аббревиатура-исем биреү тәҡдимдәре лә булды. Һөҙөмтәлә күпселек тауыш менән Алтын тигән яӊғырашлы исем һайланды. Хәҙер ошо исемде парктыӊ символы - бәләкәй мискә тотҡан ҡыҙғылт һары айыу, шулай уҡ аҙғыһын урмансылар тапҡан етем айыу балаһы йөрөтәсәк. Әлеге ваҡытта ул реабилитация маҡсатында паркта Тыва республикаһынан килтерелгән икенсе бәләкәй тайыштабан менән йәшәй, уныӊ ҡушаматы Адыг (тыва теленән "айыу").

"Башҡортостан" милли паркы 1986 йылда ойошторолған, 1995 йылдан ул федераль әһәмиәттәге махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәләренә ҡарай. Парк Көньяҡ Уралдағы үҙенсәлекле таулы урмандарҙыӊ тәбиғәт комплекстарын һәм айырыуса ҡиммәтле участкаларын һаҡлап ҡалыуға йүнәлтелгән.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1438 һижри йыл.*

| Июнь (Рамаҙан - Шәүүәл) | Сәхәрҙеӊ ахырғы ваҡыты | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 19 (24) дүшәмбе | 2:40 | 3:10 | 4:40 | 13:30 | 20:24 | 21:54 | 23:24 |
| 20 (25) шишәмбе | 2:40 | 3:10 | 4:40 | 13:30 | 20:24 | 21:54 | 23:24 |
| 21 (26) шаршамбы | 2:41 | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |
| 22 (27) кесе йома | 2:41 | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |
| 23 (28) йома | 2:41 | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:25 | 20:55 | 23:25 |
| 24 (29) шәмбе | 2:42 | 3:12 | 4:42 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |
| 25 (1) йәкшәмбе | 2:42 | 3:12 | 4:42 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**21 июнь "Диӊгеҙ. Утрау. Хазина"** (Д. Сәлимйәнов), пираттар мажараһы. Башлана 10.30 0+

**21 июнь "Мин һинеӊ ҡәйнеӊ булам"** (С. Белов), комедия 12+

**22 июнь "Һөйәһеӊме, һөймәйһеӊме?"** (Ф. Бүләков), трагикомедия 12+

**30 июнь "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**19 июнь "Тылсымлы тирмән"** (М. Кәрим), әкиәт. Башлана 10.30 0+

**20 июнь "Нух кәмәһе"** (У. Хуб), ғаилә өсөн тамаша. Башлана 11.00 0+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**24 июнь "Малыш и Карлсон"** (А. Линдгрен). Башлана 12.00, 14.00 0+

ҠЫҪҠА ИНТЕРВЬЮ

# ДОНЪЯЛА...

## ҡурайға еткән уйын ҡоралы юҡ



**Хакасияла үткән III "Ут йыры" Бөтөн Рәсәй этник эстрада фестиваль-конкурсында Башҡортостан исеменән сығыш яһап, Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһының "Карауан" төркөмө солисы Тимур РАМАЗАНОВ беренсе урынға лайыҡ булды. Йәш талантты ошо еңеүе менән ҡотлап, әңгәмәгә саҡырҙыҡ.**

**‣ Тимур, яҙ айҙарында ғына республикала үткән Ф. Ҡудашева исемендәге XVI "Дуҫлыҡ моңо" Халыҡ-ара башҡорт һәм татар йырҙарын башҡарыусылар бәйгеһендә I урын алғайның. "Ут йыры" кеүек юғары кимәлдәге бәйгенән ниндәй тәьсораттар менән ҡайттың?**

- Һәр бәйге үҙенә күрә тәжрибә, үҙеңде һынап ҡарау, шуға ла уларҙың еңеле, ҡатмарлыһы булмайҙыр ул. Әлбиттә, "Ут йыры" фестивалендә тулҡынланыу күберәк булды, сөнки ул Хакас республикаһының мәҙәни бренды иҫәпләнә һәм Азия музыка мәҙәниәтендә үҙәк урындарҙың береһен алып тора. Быйыл унда Рәсәйҙең 9 төбәгенән - Башҡортостан, Ҡырым, Татарстан, Алтай, Бүрәт, Тыва, Хакас республикаларынан, Новосибирск өлкәһенән һәм Красноярск крайынан 36 бәйгесе ҡатнашты. Үҙемә ышаныс уянды, төрлө төбәктәрҙән килгән йырсылар менән таныштым, улар менән аралашып, дуҫлашып ҡайттым.

Көслө йырсылар, төркөмдәр йыйылғайны. Асыҡ тауыш биреү булды. Ярымфинал һөҙөмтәләре буйынса финалға 12 бәйгесе - 3 төркөм, 2 дуэт, 7 солист һайланды. Финал "РТС" компанияһы телевидениеһында тура эфирҙа барҙы. Гранприға "Иренек хан" тигән этно-рок төркөмө лайыҡ булды. Конкурстың төп маҡсаты - этник мәҙәниәттәргә ярҙам итеү, уларҙы үҫтереү, һаҡлау, шулай уҡ этник эстрада йырын таратыу.

**‣ Этник эстрада - ул этник музыкала яңы йүнәлешме? Беҙҙә этник эстрада тигән күренеш бармы?**

- Ул яңы түгел, беҙгә күптән таныш йүнәлеш. Этник эстрада, тимәк, халыҡ йырҙарын замана аранжировкалар ярҙамында тамашасыға еткереү. Миҫал итеп "Арғымаҡ" этно-рок төркөмөн әйтергә булыр ине. Боронғо йырҙарға зыян килмәҫме, улар беренсел формаһын юғалтмаҫмы тип, күптәр был күренештән хәүефләнә. Тик йырсылар бит халыҡ йырын, ул хатта замана эшкәртелгән булғанда ла, башҡарғанда уны еренә еткереп йырлай, тимәк, уны бер нисек тә боҙмай. Бәйгелә мин халыҡ йыры "Азамат"ты йырланым, композитор Урал Иҙелбаев уға аранжировка эшләне. Әйткәндәй, Урал Иҙелбаев этник йүнәлеште нескә тоя һәм уның йырҙары ныҡ уңышлы килеп сыға. Шулай уҡ "Һуңғы ғәйнә" спектаклендә ул ижад иткән "Мин һине яратам, Ҡарасәс" йырын, үҙем ижад иткән "Йәшәйбеҙ" йырын алып барҙым. Йәғни, башҡорт эстрадаһында этник эстрада тигән төшөнсә бар һәм беҙ был йүнәлештә эшләйәсәкбеҙ әле.

**‣ Был бәйгелә ҡатнашып, үҙең өсөн ниндәй фәһем алдың?**

- Иң тәүҙә, бер кемдән дә кәм булмауыбыҙға тағы бер тапҡыр инандым. Хатта, киреһенсә, ҡурайға, уның моңона еткән уйын ҡоралы бер халыҡта ла юҡ икәнен аңланым. Урал Иҙелбаев "Азамат"ҡа аранжировка эшләгәндә ҡурайҙы ла яҙҙырҙы, шуға ла йыр бик уңышлы килеп сыҡты, тип уйлайым. Ҡурай моңон баһалама ағзалары ла тыныс ҡына тыңлай алманы. Йырҙың төп үҙенсәлеге лә шунда, уны аңлау өсөн ул ижад ителгән телде белеү мотлаҡ түгел. Һәр бәйгесе үҙенең моңо, мәҙәниәте - кейеме, уйын ҡоралдары аша халҡын күрһәтте бында. Хакас республикаһы Башлығы урынбаҫары вазифаһын башҡарыусы Владимир Крафт та үҙенең сығышында әйтте был турала. "Беҙҙә 193 халыҡ вәкиле йәшәй, беҙ 270 телдә һәм диалектта һөйләшәбеҙ. Беҙгә бер-беребеҙҙе аңларға моң ярҙам итә. Тап моң аша беҙ башҡа милләттәрҙең мәҙәниәтенә барабыҙ", - тине ул. "Ут йыры" фестивале бының ысынлап та шулай икәнен күрһәтте.

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТӘН СЫРХАУЫ...

## күп ашау

Үҫеҙгә үҫкән мөгөҙ ишәккә сыҡһа, йыҡмаған затты ҡалдырмаҫ ине.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ҡыҙ-ҡатынды яулау өсөн ирҙәр ғәжәйеп матур ялған уйлап сығара. Ҡыҙ-ҡатынды ташлау өсөн ирҙәр иң ахмаҡ һәм иң мәғәнәһеҙ ялған уйлап сығара.

**(Колетт).**

Ир-егеттең холҡо тураһында уның ҡатынының һаулыҡ торошо һөйләй.

**(Сирил Коннолли).**

Кешеләр үҙҙәренең етешһеҙлектәренән арыныуға ярамай һәм уларҙы ниндәйҙер дәрәжәгә күтәреүҙе өҫтөн күрә.

**(Тадеуш Котарбиньский).**

Әгәр ҙә кеше сусҡаларса эш итһә, үҙен: "Кисерегеҙ, мин бары тик кеше генә бит!" тип аҡлай, әгәр ҙә уның менән сусҡаларса ҡыланһалар: "Туҡтағыҙ, мин дә кеше бит!" тип тауыш күтәрә.

**(Карл Краус).**

Бер нәмә лә эшләмәгәндәр генә яңылышмай. Бер нәмә эшләмәү ҙә яңылышлыҡ, әлбиттә..

**(Эмиль Кроткий).**

**Тағы бер риүәйәт: "Бер бер ваҡыт Нафтали исемле руханиға ишек шаҡыйҙар. Ул ишекте аса ла, гәҙәте буйынса: "Һиңә нимә кәрәк?" - тип һорай. "Мин һиңә уҡырға килдем", - тип яуап бирә теге кеше. "Бар, уҡырға өйрәнергә икенсе урын эҙлә! Мин уҡытыусы түгел", - тип ишеген шартлатып ябып ҡуя. Быны күреп торған ҡатыны: "Ниңә уны ҡыуҙың? Ул ысын күңелдән белемгә ынтылыусы кешегә оҡшаған бит", - ти. "Кемдәр уҡырға өйрәнергә теләй, шулар, күберәк осраҡта, аңра була. Улар "йәшенергә" теләй", - тип аңлата Нафтали.**

**Икенсе көн уның ишеген тағы шаҡыйҙар. Нафтали ишеген асып: "Һин бында нимәгә килдең?" - тип һорай. Шаҡыусы кеше: "Мин һинең янға кешелеккә хеҙмәт итергә өйрәнергә килдем", - тип яуаплай. "Күҙемдән юғал! Һин бында яңылыш килгәнһең", - тип Нафтали уны ла ҡыуып сығара. Уның был ҡылығына ҡатыны тағы аптырай һәм: "Ул бит һиңә уҡырға өйрәнергә килмәгән. Уның кешелеккә хеҙмәт иткеһе килә ине бит. Ниңә уны кире ҡаҡтың?" - тип һорай. Нафтали уға былай тип яуап бирә: "Кеше үҙен-үҙе белмәйенсә, береһенә лә хеҙмәт итә алмай. Уның был хеҙмәте тик бәхетһеҙлеккә килтерәсәк".**

**Өсөнсө көн уның ишеген тағы ла бер кеше шаҡый. Нафтали ишеген асып: "Ә һиңә нимә кәрәк?" - тип һорай. "Мин бик аңрамын. Миңә ошо сифатымдан ҡотолорға ярҙам итмәҫһегеҙме икән?" - ти был кеше. Нафтали уны ҡосаҡлап уҡ ала ла: "Әйҙә, ин! Мин һине көттөм!" - тип яуаплай..."**

ИҒТИБАР: АКЦИЯ!

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы

**"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына килгән хаттарҙы барлауҙы дауам итәбеҙ. Һеҙ ҙә башҡорт әҙәбиәтендә һәр быуын кешеһенең иғтибарына лайыҡ әҫәрҙәрҙе/китаптарҙы тәҡдим итеүҙән туктамағыҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар!**

**67. Лира Яҡшыбаева "Мөжәүир хәҙрәт" әҫәре.** "Был әҫәр китап уҡыусыларға Совет осороноң муллалар тураһында тик бер төрлө кире ҡараш тыуҙырған һүрәтләүҙәрҙән ситләшеп, дин әһелдәренә, уларҙың эшмәкәрлегенә бөтөнләй икенсе күҙлектән сығып баһаларға мөмкинлек бирҙе. Әҫәрҙән тәрбиәүи әһәмиәте әйтеп бөткөһөҙ. Мөжәүир хәҙрәттең шәхесе менән дә яҡындан таныштыра китап", - тип яҙа Әнүр Сафиуллаһ атлы уҡыусыбыҙ "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге төркөмөбөҙгә.

**68. Гөлнур Яҡупова "Ҡатындар" романы.** "Гөлнур Яҡупованың "Ҡатындар" трилогияһы минең өсөн бер асыш булды. Был фәһемле, бай йөкмәткеле, йор телле, матур шиғырҙар, тарихтар, легендалар, ҡиссалар, ғилми мәғлүмәттәр, төрлө образдар, хәл-ваҡиғалар һәм тағы ла күп кенә беҙгә кәрәкле мәғлүмәт менән һуғарылған китап ысынлап та башҡорт китаптары араһында иң беренселәр рәтендә торорға тейеш, тип иҫәпләйем. Сөнки был өс роман да тормошто ярятырға, ҡәҙерен белергә, уны нисек бар, шулай ҡабул итергә, тарихыбыҙҙы хөрмәт итергә, дөрөҫ һығымта яһарға өйрәтә, дөрөҫ юлға баҫтыра. Аҡыл, белем өҫтәй, уйландыра, сәмләндерә, хыялдарыңа ҡанат ҡуя, хатта һине (яҡшы яҡҡа, әлбиттә) үҙгәртеп ебәреү көсөнә лә эйә. Әлеге ваҡытта төп проблемаларға әйләнә барған илебеҙ, еребеҙ, телебеҙ, милләтебеҙ, халыҡ-ара мөнәсәбәттәр кеүек темалар ярҙам һорап ҡанһырай, ә яҙыусы иһә, ваҡытында, һис кисектермәй быныһ сараһын күреп барырға өндәй, берләштерә. Бының өсөн төрлө реаль өлгөләр килтерелә, донъяуи проблемаларҙы булдырмау үҙебеҙҙең ҡулда икәнен иҫбат итә ала. Арағыҙҙа был китапты уҡымағандар булһа, һис шикһеҙ уҡып сығығыҙ. Башта уҡыусы ҡатмарлы һымаҡ тойолһа ла (бик үҙенсәлекле тел, стиль менән яҙылған), тиҙ һәм еңел уҡыла, үкенмәҫһегеҙ. Һуңынан минең кеүек энциклопедия итеп ҡул аҫтығыҙҙа ғына тотоорһоғоҙ әле. Гөлнур апайға мин был оло эше өсөн айырыуса рәхмәтемде белдерәм. Һеҙҙең кеүек Ер-Әсәбеҙҙе ҡайғыртып, Ватаныбыҙ өсөн янып тороусылар күберәк булһа, башҡорт милләте йәшәр, Аллаһ бойорһа", - тип яҙа актриса Зиләрә Юлтаева.

**"Башҡорт китабы топ-100+"** акцияһына ҡушылығыҙ, үҙегеҙ уҡыған башҡорт китаптары/әҫәрҙәре араһынан иңиңдәрен һайлап, шулар тураһында редакцияыбыҙға төбәп хаттар яҙығыҙ. Йәки "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Киске Өфө" гәзите" төркөмөндә махсус булдырылған **"Башҡорт китабы топ-100+"** акцияһы" тип аталған фекер алышыу битендә "#башкитап" хештегы ҡуйып, үҙ фекерегеҙҙе белдерегеҙ!

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зөйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы,**
**Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты -
16 июнь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары –
**50665, 50673**

Тиражы - 5007
Заказ - 1211/06